ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22-28 август (урағай) 2015

№34 (660)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Үҙ кинобыҙҙы күрге килә



3

Мөхәмәтхан Ҡулаев



7

Халыҡты халыҡ иткән тел,



йәки уны яҡлау кемдәр иңендә? 8-9

Донъя дилбегәһен...

аҡһаҡалдарға тапшырырға әҙерҙәр



12,16

Һайлауҙар 14-15

**Мөхтәрәм йәмәғәт! Сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә яҙылырға онотманығыҙмы, тип өндәшәбеҙ тағы бер тапҡыр. Баҫмабыҙға республика ҡалалары һәм районларының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Һуңламағыҙ: 31 августа тиклем 2016 йылдың беренсе ярты йыллығына быға тиклемге хаҡ менән, йәғни 539 һум 76 тингә (индексы 50665) яҙыла алаһығыҙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Хаҡтар үҙгәреүен, тауарҙарҙың ҡиммәтләнеүен йә арзанайыуын тояһығыҙмы?



*Гөлфиә ХӘМИТОВА, Өфө ҡалаһы:*

Тоймаған ҡайҙа ул! Оҙаҡ йылдар магазинда һатыусы булып эшләйем. Көн дә иртән тауар ҡабул итәм һәм былтырҙан алып уларҙың хаҡы нисек ырғыуын күреп, үҙемдең дә ҡан баҫымым һикерә башлай. Үҙем эшләгән өлкәне - аҙыҡ-түлекте - күҙ уңында тотоп, анализ эшләп ҡарағанда шуны әйтергә була: йыл башынан күп тауарға хаҡ артты. Ағымдағы йыл үҙ хоҡуғына инеүе булды - магазин кәштәләрендәге халыҡ өсөн мөһим булған һөт һәм һөт аҙыҡтары, икмәк, ит, сәй, ҡәһүә һәм башҡа ошондай көндәлек кәрәк аҙыҡ-түлеккә хаҡтар өҫкә үрмәләй ҙә башланы. Һатып алыусылар был үҙгәреште тиҙ тойҙо, ә сит ил шараптарына һәм һөмбаш балығына хаҡтарҙың шулай уҡ артыуына әллә ни әһәмиәт бирмәне.

Импорт иҫерткес эсемлектәргә хаҡтың күтәрелеүе фонында үҙебеҙҙә күпләп етештерелгән араҡыға хаҡ, киреһенсә, төштө. Рәсәйҙең иҫерткес эсемлектәр баҙарын көйләү Федераль хеҙмәте араҡыны ваҡлап һатыуҙың хаҡын кәметеү тураһында хатта махсус бойороҡ сығарҙы. Уға ярашлы, мәҫәлән, 40 градуслы 0,5 литр араҡы 1 февралдән элекке 220 һум урынына 185 һум менән һатыла башланы. Был аҙымдың ни өсөн эшләнеүен әле булһа аңламайым - былай ҙа ни эшләргә белмәй ҡаңғырған халыҡты эскелек упҡынына этәреүсе тағы бер юл булды был.

Йылдың икенсе яртыһы суҫҡа һәм һыйыр итенә, әфлисунға, мандаринға, тоҙло балыҡҡа, шәкәргә һәм онға хаҡтарҙың тағы ла күтәрелеүе менән башланды. Ә ҡыяр, помидор, виноград, кәбеҫтә, банан, һуған, алма, ҡара сәй, һөт аҙыҡтары, көнбағыш майы, ҡарабойҙай һәм дөгө ярмаһына хаҡтар бер аҙ төштө. Емештең хаҡына миҙгел факторы йоғонто яһайҙыр, тип уйлайым - әле уңыштың өлгөрә башлаған мәле. Еләк-емештең өлгөрөүе шәкәрҙең хаҡына тәьҫир итмәй ҡалманы, әлбиттә - ул бермә-бер артты. Шул уҡ ваҡытта федераль яңылыҡтарҙа яҡтыртылыуынса, күпселек төбәктәрҙә, мәҫәлән, шул уҡ ҡарабойҙайға, алмаға, әфлисунға хаҡтар, киреһенсә, артҡан икән.

Көҙ, ҡыш айҙарының нindәй "яңылыҡтары" менән килерен көтөргә оҙаҡ ҡалманы. Нисек кенә булмаһын, хаҡтар түбән тәгәрәр, тип өмөт итергә ярамай, минеңсә. Шуға күрә "Йәйҙең бер көнө ҡышты туйҙыра" тигәнде иҫтә тотоп, мул уңыштан файҙаланып, етерлек аҙыҡ-түлек запасы туплап ҡалыу ҡамасауламаҫ, тип уйлайым.

(Дауамы 2-се биттә).

БАШ ЙОРТОБОҘ

# КӨНЬЯҠ БИТЛӘҮ ЯҢЫРТЫЛАСАҠ

**Киләсәктә баш ҡаланың Көньяҡ битләүен тап ошолай төҙөкләндерергә уйлайҙар. Яңы проект авторҙарының ниәте буйынса, иҫке, бәләкәй өйҙәр урынына тау башында балҡып торған ҡала ҡалҡып сығасаҡ.**

Өфө ҡалаһының Көньяҡ битләүен төҙөкләндереү проектының төп маҡсаты - заман кешеһенең бөтә талаптарына яраҡлаштырып эшләнгән уңайлы архитектура мөхите барлыҡҡа килтереү. Ярҙың киртләс урындарында юлды ерҙең рельеф үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып һалыу, ҡалҡыулыҡтарҙың һөҙәк биттәренә терәүҙәр ҡуйыу һәм йәшелләндереү, быға тиклем үҫеп ултырған ағас һәм башҡа йәшеллекте мөмкин тиклем һаҡлау ҡаралған. Йылға буйына оҙон бер юл һалып, унда велосипедта йөрөүселәр, йәйәүлеләр өсөн махсус һуҡмаҡтар билдәләп, ял итеү һәм һыуға төшөү урындары эшләнәсәк. Йылға буйына баҫҡыс буйлап ҡына түгел, фуникулёрҙар ярҙамында ла төшөргә мөмкин буласаҡ. Фуникулёрҙың береһе Салауат Юлаев һәйкәленә яҡын урында, икенсеһе Аҡ йорт тирәһендә төҙөлә. Әйтеүҙәренсә, был районда бейек йорттар төҙөлмәйәсәк, улар 5-8 ҡатлы буласаҡ. Торлаҡ йорттарҙан тыш, халыҡ ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында магазиндар, матурлыҡ салондары, офис бинаралары һ.б. объекттар төҙөләсәк.

Әйткәндәй, был территорияға ингән өйҙәрҙең бөтәһен дә һүтмәйҙәр. Мәҫәлән, Өфө етәкселәре әйтеүенсә, Гоголь урамы буйлап урынлашҡан 1-се йортта киләсәктә Федор Шаляпиндың йорт-музейын асыу планлаштырылған. Шулай уҡ билдәле Өфө рәссамы Александр Тюлькиндың да йорт-музейы һаҡлап ҡалынасаҡ.



12+

БАШ ЙОРТТА



# КӘМСЕЛЕКТӘР ҘӘ... күҙгә эләкте

**"Киске Өфө"лә ошо рубрика аҫтында баҫылып килгән мәҡәләләрҙе ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып барам. Улар аша мин йәшлек йылдарым үткән Өфөнөң бөгөнгө йөҙөн асыҡ итеп күҙ алдына баҫтырғандай булам. Һәр авторҙың баш ҡалалағы үҙенә оҡшаған йәки күңеленә ятып бөтмәгән күренештәре төрлөсә - ҡайһы бер мәҡәләне уҡып шатланһың, икенселәре, киреһенсә, йөрәкте һыҙлатып ҡуя. Ҡасан да булһа Өфөгә юлым төшһә, күҙемә эленгән күренештәрҙе мин дә яҙып ебәрәм әле, тигән уйым яңыраҡ, ниһайәт, тормошҡа ашты.**

Утыҙ йыл ваҡыт эсендә Өфө айлап түгел, көнләп үҫкән һәм әле лә ҙурайыуын дауам итә, ахыры. Төрлө урында барған төҙөлөш эштәре ошоға асыҡ миҫал. Ҡала урамдарында бигерәк тә магазиндарҙың, сауҙа үҙәктәренең күплеге күҙгә ныҡ ташлана. Уларҙың тышҡы йөҙө лә, эске биҙәлештәре лә матур, ләкин халыҡтың күп булмауын һәм эстәре ярымбуш икәнлеген күргәс, "Квартал һайын тиерлек сауҙа үҙәге эшләү нимәгә кәрәк булды икән?" тигән һорау тыуҙы.

Телевизорҙан йыш ҡына мөмкинлектәре сикләнгәндәр өсөн тыуҙырылған шарттар тураһында һөйләйҙәр. Өфөлә был йәһәттән проблемалар юҡтыр, тип уйлауым хата булған, сөнки һәр икенсе ойошма "өҫтән талап ителгән" өсөн генә ошо йүнәлештә нимәләр ҡыбырлатҡан булып сыҡты. Мине бигерәк тә бейек күтәрмәле дарыуханаларға ҡуйылған махсус ҡоролмаларҙың бер ниндәй практик файҙаһы булмауын күреү әсендерҙе. Шулай уҡ улар коляскалы әсәләргә лә тәғәйенләнгән. Тик ысынбарлыҡ бөтөнләй икенсе - үҙемә ике-өс тапҡыр дарыуханаға күтәрелә алмай торған әсәләргә ярҙам итергә тура килде. Тағы ла ошо йәһәттән ҡулайлаштырылған махсус автобустарҙың да һирәк булыуы күҙгә ташланды.

Өфөнөң Ленин урамы, Октябрь проспекты кеше иң күп йөрөгән урындарҙың төҫкә баҫҡысын алып тора. Был урамдарҙа урынлашҡан әллә күпме төрлө ойошма, шәхси магазин, кафе һәм башҡа төрлө учреждениеларҙың береһенән-береһе уҙҙырып ҡуйған сағыу алтаҡталары күҙҙе ҡамаштыра. Иғтибарҙы йәлеп итергә тейешле был алтаҡталар, киреһенсә, үтә лә ныҡ сағыулығы, биҙәлеше, рекламаһы менән мейене ҡайната кеүек. Шуға күрә бер урамда (Ленин урамын һәм Октябрь проспектын ғына әйтмәйем) урынлашҡан ойошмаларҙы бер йүнәлештәге стилдә биҙәү халыҡ өсөн күпкә уңайлы булмаҫ инеме икән? Әлбиттә, улар барыһы ла бер төрлө була алмай, ләкин ниндәйҙер уртаҡ дөйөмлөктән сығып эш итеү һәйбәт булыр ине кеүек.

Трамвай элек-электән халыҡта ҙур һорау менән файҙалана. Ләкин ҡайһы бер туҡталыштарҙың пассажирҙар өсөн үтә лә хәүефле булыуы әле булһа хәл ителмәгән. Мәҫәлән, Үҙәк баҙар янындағы трамвай туҡталышы машиналар гөжләп тороусы оло юлдың ҡап уртаһында урынлашҡан. Һәм бындай миҫалдар бик күп. Кешене оло юлдан әҙ булһа ла аралап тороусы ниндәйҙер ҡоролма булыуы хәүефте бер аҙ кәметер, тигән ышаныстамын.

Өфөнө маҡтап күп яҙалар, шуға күрә мин ҡалала күҙемә эленгән ҡайһы-бер кәмселектәрҙе билдәләп үттем.

**Ильяс ВӘЛИЕВ.**
**Белорет ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Хаҡтар үҙгәреүен, тауарҙарҙың ҡиммәтләнеүен йә арзанайыуын тояһығыҙмы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Азат ИЛЬЯСОВ, Мәскәү ҡалаһы, иҡтисадсы:*** Иҡтисадта барыһы ла яҡшы ишетеп белгән инфляция (тауар һәм хеҙмәттәргә хаҡтар артыуы) менән бер рәттән, уға ҡапма-ҡаршы процесты аңлатыусы дефляция тигән төшөнсә лә бар. Күпселек эксперттар оҙаҡламай илдә нәҡ ошо процесс күҙәтелеү мөмкинлеге бар, тип бара.

Йыл башынан, статистика мәғлүмәттәренә ҡарағанда, тауар һәм хеҙмәттәргә хаҡ 9,5 процентҡа үҫкән. Хаҡтарҙың өҫкә үрмәләүенә бернисә фактор тәьҫир итте, тип уйлайым. Беренсенән, уҙған йылдың авгусында Рәсәйгә ҡарата ҡулланылған санкцияларға яуап итеп, ил Хөкүмәте ҡайһы-бер аҙыҡ-түлеккә ҡарата антисанкцияларҙы үҙ көсөнә индерҙе. Был магазин кәштәләренән сит илдән килтерелгән ниндәйҙер төр аҙыҡ-түлектең юғалыуына килтерҙе һәм ҙур булмаған дефицит тыуҙырҙы. Икенсенән, доллар һәм евроның курсы ныҡ артты. Һөҙөмтәлә, импорт тауарҙарҙың барыһының да хаҡы күтәрелде. Өсөнсөнән, 1 июлдән торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә хаҡтың артыуы иҡтисадтың бөтә өлкәләренә лә йоғонто яһаны.

Ләкин үтә төшөнкөлөккә бирелергә лә ярамай, сөнки һәйбәт яңылыҡтар ҙа бар. Рәсәйҙең Иҡтисадты үҫтереү министрлығы прогнозына ярашлы, йыл һөҙөмтәләре буйынса хаҡтарҙың күтәрелеүе, дөйөм алғанда, 10,5 - 11 проценттан артмаясаҡ. Ә әлеге ваҡытҡа был һандың, әйтеп үткәнемсә, 9,5 процент тәшкил итеүен күҙ уңында тотҡанда, йылдың икенсе яртыһында хаҡтар 1 процент тирәһенә генә артыуы мөмкин, тип өмөтләнергә була. Бындай оптимистик рухта фекер йөрөтөү өсөн бернисә сәбәп бар. Беренсенән, миҙгел факторы - һунғы бер-нисә йылда илдә йәй аҙағында - көҙ башында аҙыҡ-түлек дефляцияһы күҙәтелә. Ағымдағы йылда ла был ҡағиҙәнән ситләшеү булмаҫ, тип уйлайым. Икенсенән, юғары база эффекты тип аталыусы күренеште иҫәпкә алырға кәрәк - хаҡтар күтәрелә алмай, сөнки улар былай ҙа ныҡ артҡан. Өсөнсөнән, хаҡтар үҫә, ә эш хаҡы бер кимәлдә ҡала, ә ҡайһы саҡта хатта кәмей. Был осраҡта хаҡтты тағы ла арттырыуҙан фәтүә юҡ, сөнки халыҡтың һатып алыу һәләтлеге түбәнәйә.

Минең фекеремсә, дефляция булыуын артыҡ ышаныл көтөргә кәрәкмәй, сөнки миҙгел факторына ярашлы, ҡайһы бер тауарҙарға хаҡтың кәмеүе сәбәпле ҡыҫҡарған сығымдарҙы торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн хаҡтың күтәрелеүе "ашай". Һум да доллар һәм евроға ҡарата арзанайыуын дауам итә, тимәк, импорт тауарҙарға хаҡ артабан да үҫәсәк. Мәҫәлән, сит илдә етештерелгән аҙыҡ-түлек, автомобиль, көнкүреш техникаһы һәм башҡа әйберҙәр ҡыйбатланасаҡ, тип уйлайым. Ә бына күсемһеҙ милеккә хаҡ, киреһенсә, бер аҙ түбән төшөр тип ышанырға урын бар, сөнки уҙған йыл аҙағында аҡсаларын һаҡлап ҡалыу өсөн күптәр фатир, йорт һәм ер һатып алды. Хәҙер килеп күсемһеҙ милек һатыусылар күп, ә һатып алыусылар әҙ.

Алдағы йылдарҙа инфляция кимәле тағы ла төшәсәк, тип иҫәпләй иҡтисадсылар. Ә был, үҙ сиратында, Рәсәйҙең Үҙәк банкы тарафынан билдәләнгән мөһим ставкаға (ключевая ставка) тәьҫир итә. Ул ставкаһың дәүмәленә вкладтар һәм кредиттарҙың проценты бәйләнгән. Шуға күрә әлеге ваҡытта ышаныслы банктарҙа оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән һәм тулыландырыу мөмкинлеге булған депозиттар асыу - иң отошлоһо. Ә кредиттар алыуҙы, бигерәк тә оҙаҡ ваҡытҡа иҫәпләнгәндәрен, кисектереп тороу урынлы булыр, сөнки алда уларға ставкалар төшәсәк.

***Риф ФӘТИХОВ, Өфө ҡалаһы, хаҡлы ялда:*** Ҡарсығым менән икебеҙ ике бүлмәле фатирҙа йәшәйбеҙ. Әлегә тиклем дә торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү ауырға тура килә ине, уҙған айҙан хаҡ артҡас, бөтөнләй кеҫәгә һуға башланы. Уға утҡа, телефонға, кабель телевидениеһына түләгән аҡсаны өҫтәһәк, пенсияның бик аҙы ғына ҡала. Шуға күрә, магазинға һирәк йөрөйбөҙ һәм күберәген икмәк, һөт, йомортҡа, ҡаймаҡ-май, эремсек, сыр һәм колбаса һатып алабыҙ. Итте һәм картуфты көҙөн ойошторолған ауыл хужалығы баҙарҙарында алып ҡалырға тырышабыҙ. Шунһы өсөн йәйге пенсиябыҙҙы артыҡ сарыф итмәйенсә йыябыҙ. Ә ҡалған аҙыҡ-түлекте балалар күмәртәләп һатып алып, үҙҙәренә һәм беҙгә булә. Шөкер, йәшәгән әбей менән бабайға ашауэсеү булһа, етте, беҙгә яңы кейем кәрәкмәй - булғаны ҡалған ғүмергә етер; машинала йөрөмәйбеҙ - күҙҙәр ҙә насар күрә, бензин хаҡы ла ҡот осҡос; башҡа төрлө хужалыҡ кәрәк-яраҡтары алырға кәрәк, тип тә көймәйбеҙ.

Үҙебеҙ һатып алған аҙыҡ-түлектән сығып һүҙ йөрөткәндә, хаҡтар, әлбиттә, күтәрелде. Шулай ҙа республикала етештерелгән аҙыҡ-түлек һатыусы магазиндарҙа хаҡтар йыш үҙгәрә, тип әйтмәҫ инем. Мәҫәлән, беҙ эскән маркалы һөтҡә хаҡ йыл башынан алып бер тапҡыр күтәрелде һәм әлегә шул кимәлдә ҡала. Икмәктең дә, ҡарап йөрөп алһаң, әллә ни хаҡы артмағанын табырға була. Йомортҡаға килгәндә, хаҡтар, ысынлап та, "бейешеп" алды - йә арта, йә кире төшә. Һөт аҙыҡтары, сыр, әлбиттә, ҡыйбатайҙы, артабан күтәрелмәҫ, тип ышанам.

Төрлө тауарға һәм хеҙмәттәргә хаҡтарҙың үҙгәреүе йәштәргә ныҡ йоғонто яһайҙыр, тип уйлайым. Мәҫәлән, ейәнем һөйләүенсә, интернет селтәре өсөн хаҡты ай һайын тиерлек йылап-йылап арттыралар икән. Беләләр, халыҡтың барыһы бер ҙә уларҙың хеҙмәтенән баш тартмаҫын, шуға ҡоторалар. Бына-бына яңы уҡыу йылы башланырға тора - балаһы мәктәпкә әҙерләү ҙә түңәрәк кенә суммаға барып баҫалыр, тип уйлайым. Шулай ҙа төрлө урындағы хаҡтарҙы сағыштырып йөрөп алғанда, аҡсаны файҙалы тотонорға була. Ҡыҙыҡ өсөн ҡарап йөрөнөм яңыраҡ, бер магазинда 12 битлек дәфтәр 2,40 тин торһа, икенсеһендә ошо уҡ дәфтәр бер һумға арзаныраҡ. Айырма әллә ни түгел һымаҡ күренһә лә, күпләп алғанда, файҙаһы ҙур барыбер.

Демография "аҡһай" тип яр һалалар. Нисек аҡһамаһын инде, бала көтөү ныҡ ҡыйбат булғас. Улымдың өс йәшлек балаһына бер миҙгелдә тотонолған аҡсаға беҙ ике-өс ай йәшәйбеҙ. Ә миҙгелдәр бит дүртәү! Хәҙерге ата-әсәләр үҙҙәре лә балаларына кәрәген дә, кәрәкмәгәнен дә һатып ала: ул һәр миҙгелгә ярашлы коляска, ҡышын - сана, йәйен - велосипед, самокат, ролик һәм тағы әллә нәмәләр. Уларының да хаҡы үҙгәреп кенә тора. Бер көндә ҡарап сыҡҡан балалар велосипеды өс көндән барыуыбыҙға 1500 һумға артып ултыра. Ошо ваҡыт эсендә ниндәйҙер модернизациялау булмағандыр бит инде. Һатыусынан ни өсөн хаҡтың ҡапыл артып китеүен һорағас, "тәьмин итеүсе шулай үҙгәртте", тип яуап бирҙе. Шулай төрлө өлкәне алып ҡараһаң да, хаҡтар бер кимәлдә генә тормауын күрергә була. Һәм күпселек осраҡта улар аҫҡа тәгәрәмәй, ә өҫкә үрмәләй.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓20 августа Нефтекама ҡалаһында мәғариф буйынса сираттағы август кәңәшмәһе булып үтте. Унда республика Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡатнашты. Быйыл кәңәшмә "Берҙәм асыҡ мәғариф киңлеге" тигән девиз аҫтында ойошторолдо. Пленар өлөшкә тиклем Рөстәм Зәки улы һәм башҡа ҡатнашыусылар Нефтекама махсус (коррекцион) дөйөм белем биреү мәктәп-интернатында, инвалид балаларҙ тәрбиәләнеүсе 27-се балалар баҡсаһында, шулай уҡ Нефтекама машиналар төҙөү колледжында булды.

✓Республика Башлығы кәңәшмәләге сығышында балалар баҡсаларында урындар етмәү проблемаһының хәл ителеүе тураһында белдерҙе. Быйыл тағы ла 25 яңы балалар баҡсаһы төҙөләсәк, уларҙа өҫтәмә 4 мең урын барлыҡҡа киләсәк. Яңы баҡсалар төҙөгән саҡта муниципалитеттар демографик хәлде иҫәпкә алырға тейеш, сөнки киләһе йылдарҙа беҙҙә бала табыу йәшендәге ҡатын-ҡыҙҙар һаны кәмеүе, тимәк, тыуымдың да кәмеүе күҙәтеләсәк, уның ҡарауы, мәктәп йәшендәге балалар һаны артыуы көтөлә һәм был динамика 2020 йылға дауам итәсәк, тип билдәләне республика Башлығы.

✓Кәңәшмәлә билдәләнеүенсә, һуңғы биш йылда республикала 369 берәмек оптималлаштерелгән, хәҙер 1448 дөйөм белем биреү учреждениеһы эшләй. Шулай уҡ кадрҙар составы ла оптималлаштерелгән. 41 меңдән 35,5 меңгә тиклем уҡытыусы ҡыҫҡартылған. Оптималлаштереү саралары һөҙөмтәһеҙ сығымдарҙы 2,5 миллиард һумғаса түбәнәйтергә булышлыҡ иткән. Был йылдарҙа уҡытыусыларҙың эш хаҡы ике тапҡырға артҡан, йәғни 12 меңдән 25 меңгәсә күтәрелгән. 197 яңы мәғариф объекттары файҙаланыуға тапшырылған, аҙ комплектлы мәктәптәр һаҡлап алып ҡалынған.

✓Өфө дәүләт нефть техник университетына Ҡытай Халыҡ Республикаһының Гуанчжоу ҡалаһынан Фән һәм технологиялар идаралығы рәйесе урынбаҫары Ие Ксиан Ию етәкселегендә сәнәғәт предприятиелары һәм фәнни учреждениелар вәкилдәре делегацияһы килде. Осрашыу барышында нефть өлкәһендәге машина эшләү технологияларын үҫтереү буйынса берлектәге проекттар булдырыу перспективалары ҡаралды. Ҡытай яғын бигерәк тә коррозияға ҡаршы материалдар һәм майҙар ҡыҙыҡһындырҙы.

✔ **Ни өсөн төрөк, ҡаҙаҡ, монгол халыҡтарының донъя кимәленә сығарыр кинолары бар ҙа, беҙҙеке юҡ? Республикабыҙҙа кино сәнғәтенең 25 йыллығы билдәләнгән был көндәрҙә ошолар хаҡында ла уйланһындар ине.**



ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ҮҘ КИНОБЫҘҘЫ КҮРГЕ КИЛӘ

**Интернеттан ҡаҙаҡ батыры Сартай хаҡында "Мын Бала гәскәре" ("Войско Мын Бала") тигән нәфис фильмды ҡарағандан һуң күңелде күптән өйкәп йөрөгәнде ҡағыҙға төшөрөргә булдым.**



Бынан алда шулай уҡ ҡаҙаҡтың данлы улы Аблай хандың тарихын бәйән иткән "Кочевник" фильмын тетрәнеп ултырып ҡарағайным. Киноларҙың икеһе лә ҡаҙаҡтың көнкүрешен, йолаларын, яу алымдарын күрһәтеп, ә иң мөһиме, тарихын һәм шул тарихта яҡты эҙ ҡалдырған батырҙарын, уларҙың һоҡланғыс мөхәббәтен сағылдырған картиналар. Артистары ла шәп уйнай, ул костюмдар, ул аттар, ул алыштарҙағы халыҡ төркөмө... "Монгол", "Баҫып алыусы", "Патриот", "Мулан" кеүек донъя кимәлендәге тарихи-романтик фильмдар рәтендәләр. Хисләндерә, уйландыра, рухландыра һәм шул мәл күңелдә көнсөл бер уй тыуа: "Нинә беҙҙеке юҡ? Беҙҙең нимә, батырҙарыбыҙ булмағанмы, әллә тарихыбыҙ һаймы? Кино төшөрөр шәхестәребеҙ, кисерештәребеҙ, ғибрәттәребеҙ, данлар, данланыр эштәребеҙ юҡмы?"

"Киске Өфө"нөң 23-сө һанында баҫылған "Фильмдарыбыҙ бар, тамашасы кәрәк" тигән мәҡәләне уҡып сыҡҡас, ғәфү үтенәм, әммә телгә үҙенән-үҙе ошондай тупаҫ яуап килә: көтмәгеҙ, ундай фильмдарға тамашасы булмаясаҡ. Ни өсөнме? Әйҙәгеҙ, бер нисә генә "кино" тип аталғандарыбыҙҙы барлап үтәйек әле. Тәүгеһе - "Ай ҡыҙы"н ҡараным. Беренсенән, унда кино түгел, ә спектакль уйнала. Ун етенсе рәттәге тамашасыға ишеттерәйем әле, тип тырыша артистар. Кино теле, кино һөйләше бөтөнләй юҡ. Икенсенән, нимә пропагандалана? Эскелек, бала ташлау, ирһеҙ бала табыу, йәғни ирекле мөхәббәт һ.б. "Тормош шундай" тиеүселәр ҙә табылыр. Ошондай идеяға ҡоролған, дәрәсәрәге, бөтөнләй идеяһы булмаған сериалды "башҡорт киноһы" тип, сит милләттәргә күрһәтерлекме? Юҡ, әлбиттә.

Киноларҙың башҡаларын да ҡарап сыҡтым. Ҡайһыларындалыр ниндәйҙер иғтибарҙы йәлеп итерҙәй кескәй генә эпизодтар бар барлыҡҡа, әммә уларҙың береһе лә кино түгел. Улар спектакль формаһындағы документаль фильмдар. Ниндәй маҡсат менән был эштәр күккә сөйөп маҡтала - шуға аптырайым. Артабан киткәндә - "Алдар менән һоро бүре" йәнһүрәтенең күрәләтә телде мәсхәрәләү икәнен күреү әрнетә. Геройҙар бер һүҙҙе русса, икенсеһен башҡортса әйтә. Бер көлкөһө лә, идеяһы ла юҡ. Өфө гербындағы һыуһар хаҡындағы әкиәттен, әлбиттә, эстәлеге бик матур, әммә әлеге экран аша бирелеше күңелһеҙ. Бөгөнгө заман балаһын ундай мультфильм менән әүрәтеп, иғтибарын йәлеп итеп булмай, минеңсә. Ә инде "Ел һыҡҡан яҡ" йәнһүрәтен ҡарау - үҙе бер стресс. Ышанмаһағыҙ, интернеттан табып ҡарағыҙ. Ошо тәңгәлдә, ҡыйын булһа ла, әлеге ҡаҙаҡтың "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" эпосы буйынса төшөрөлгән йәнһүрәтен хуплап телгә алғы килә.

"Был кеше башҡорт киноһына ҡаршы! Үҙебеҙҙекен яратмай!" тиерһегеҙ. Яңылышаһығыҙ. Киреһенсә, яҡшы булыуын, сифатлы булыуын теләйем. Ни өсөн төрөк, ҡаҙаҡ, монгол халыҡтарының донъя кимәленә сығарыр, илап-көлөп ҡарар кинолары бар ҙа, беҙҙеке юҡ? Республикабыҙҙа кино сәнғәтенең 25 йыллығы билдәләнгән был көндәрҙә ошолар хаҡында ла уйланһындар ине. Байрамдар бит маҡтаныу өсөн генә түгел, киләсәккә маҡсаттар билдәләү өсөн дә үткәрелә. Мәҫәлән, шул маҡсаттар исемлегендә мотлаҡ "Урал батыр" эпосы буйынса һис юғы йәнһүрәт төшөрөргә булмаймы? Йәки берәй тарихи герой тураһында кино төшөрөлһә лә ятып ҡарар инек. Әҙер идея, әҙер текст, ер-һыуы аяҡ аҫтында. Салауат батыр тураһында алып ҡарар бер нәмә юҡ! Шул уҡ Аблай хандан кәмме ни ул? Яҙыусыларыбыҙҙың "Һауыр ҡумта", "Сыбар шонҡар", "Кинйә", "Шунда ята батырҙар һөйәге", "Бөркөт ҡанаты" һ.б. кеүек әҫәрҙәре тарихи кинолар өсөн әҙер материал. Ҡарап торһаң, һыу һөлөгөндәй сибәр, һөләтле артистарыбыҙ ҙа бар. Тәбиғәт әҙләп Швейцарияға йәки Шотландияға китергә түгел, үҙебеҙҙә хозурлыҡ. Сәбәп низә? Аҡса юҡмы? Әллә ни төрлө бөтмәҫ мәҙәни байрамдарға, һабантуйҙарға сығым түккәнсе, бер юғары кимәлдәге, сифатлы башҡорт киноһы төшөрһәксе. Шул ваҡытта милләттең мәҙәниәтен дә, тарихын да донъяға күрһәтергә мөмкин булыр ине. Оҙон һүҙемдең ҡыҫҡаһы шул: башҡорт киноһын кемдәрҙендер өс көнлөк даны итеп түгел, ә милләттең кино сәнғәтен донъя кимәленә күтәрер һәм киләһе быуындарға тапшырылыр рухи ҡомартҡы итеп күрге килә.

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыйған, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЗАРЛАНМАЙ ЙӘШӘРГӘ ӨЙРӘНӘЙЕК!

**Мөнир ҠУНАФИН, "Шоңҡар" йәштәр журналының баш мөхәррире:** Олатайымдың мин бала саҡта һуғыш тураһында һөйләгән хәтирәләрен иҫкә төшөрәм дә, ул ваҡытта халыҡ ауыр йәшәһә лә берҙәм, ярҙамсыл булған икән, тигән һығымта яһайым. Ауылдаштар бер-береһенең шатлығын да, ҡайғыһын да уртаҡлашып йәшәгән. Етем ҡалған балаларҙы үҙҙәренә алып, нисек тә булһа нәҫелдәрен дауам итеүселәргә лайыҡлы тәрбиә бирергә тырышҡан. Элек бер ултырғанда 16 ҡалаҡ күтәрелә торғайны, тип һөйләр ине ололар. Бөгөн өйөбөҙ зур, күңелебеҙ тар булып тойола. Ҡөрьән аштарына йыйылғанда ололарҙың, өҫтәлдәге һый бөтә ауыл халҡына етерлек итеп әҙерләнгән, заман ауыр тип зарланырлыҡ түгел, тип һөйләшкәнен йыш ишетәм. Булғанына шөкөр итә белеү, бер-береңде аңлау, һанлау, тартыу кеүек сифаттар халыҡтың күңелендә бар, уны уятып ебәреү генә кәрәк. Ә бының өсөн тәү сиратта тормошҡа зарланмай йәшәү, тарихыбыҙҙы, йолаларыбыҙҙы, дини тәрбиәбеҙҙе белеү мөһим. Күптән түгел баш ҡалабыҙҙа үткән ШОС һәм БРИКС илдәре саммиттары ваҡытында Ҡытай Халыҡ Республикаһының етәкселәре беҙҙәге тәбиғәткә, йәшеллеккә хайран ҡалып ҡайтҡан. Уларҙа бөтә нәмә яһалма, ә беҙ ниндәй байлыҡҡа эйә булыуыбыҙҙы аңламайбыҙ, ҡәҙерләмәйбеҙ. Аҡса ҡолона әүерелеп, матди байлыҡ артынан ҡыуып йәшәйбеҙ. Киреһенсә, аҡса беҙҙең ҡолобоҙ булырға, тәләктәребеҙҙе тормошҡа ашырырға булышлыҡ итеүсе бер сара ролен үтәргә тейеш. Киләсәктә йәмғиәтебеҙҙәге ҡиммәттәр яйлап үҙгәрер, тип уйлайым. Тик һәр әйләнгән һайын зарланырға ниндәйҙер сәбәп табыр урынға, мәсьәләләрҙе хәл итергә тырышырға кәрәк.

Халыҡты үҙ артынан эйәртә алған лидер шәхестәрҙе йәштәр араһында тәрбиәләү мөһим булыуы тураһында күп һөйләнә. Әлбиттә, бының өсөн мотлаҡ дөйөм идея, уйҙар бер йүнәлештә булырға тейеш, тиҙәр. Ләкин төрлө хәл-ваҡиғаларға, мәсьәләләргә һәр кем үҙенсә ҡарай, үҙенсә хөкөм йөрөтә. Комплекслы уйланыу юҡ, күмәгебеҙ бер фекергә килеп, үҙ ҡиблабыҙҙы таба алмайбыҙ. Илебеҙҙә әҙәбиәт, сәнғәт, матбуғаттың торошо яҡшы булһа ла, был өлкәлә эшләүселәрҙең кем өсөн, нимә өсөн эшләүен белеп булмай. Совет осорон тәнҡитләһәк тә, ул ваҡытта ниндәй ҡаҙаҡ башына һуғырға кәрәк булғанын яҡшы беләләр ине. Хәҙер унынһына, бынынһына һуғып ҡарайбыҙ, бер ҡаҙаҡты ҡаҡҡансы икенсеһе һурылып сыға. Кешене, бына шулай ит, насар ғәҙәттәрҙән арын, тип өйрәтеп булмай. Ныҡлы идея һәм үҙенең артынан эйәртер лидер булғанда ғына алға китеш һиҙеләсәк. Әлбиттә, бөгөн йәштәребеҙ араһында лидер булырлыҡтар бар. Улар төрлө яҡлап үҫешкән, белемле, иманлы, йыр-бейеүгә лә мәһир, үҙ эштәрендә уныш та ҡаҙанған. Тик киләсәктә улар донъяны яулаһын тиһәк, ирекләрен сикләмәй үҫтерергә, йәштәрҙең фекеренә ҡолаҡ һалырға, уларға юл бирергә өйрәнергә кәрәк.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Шәйехзада Бабич исемендәге Дәүләт йәштәр премияһына дәғүә итеүсе 12 кандидат асыҡланды: улар - йәш яҙыусы Айгиз Баймөхәмәтов, шағир Алмас Шаммазов, архитекторҙар Руслан Алмаев, Гүзәл Арыҫланова, Евгений Пальмин, Асель Фәттәхова, Рөстәм Әлибаев, Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрынан Руслан Хайсаров, Ирада Фазлаева, Урал Әминев, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры режиссеры Альберт Имаметдинов, рәссамдар Вера Фролова һәм Айгөл Ишбирҙина, Мәскәү филармонияһы артисы Артур Нәзиуллин, БСТ-нан Ләйсән Мәзитова, Мили симфоник оркестрҙан Илшат Мөслимов, Милли йәштәр театрынан Шәһит Хамматов, Опера һәм балет театрынан Андрей Брынцев .

✔Өфөнөң халыҡ күп йөрөй торған иҫтәлекле урындары билдәләнгән. Рейтингҡа ярашлы, беренсе урында - Салауат Юлаев һәйкәле, икенсе урында -Изге Богородица ҡорамы, өсөнсө урында - Дуҫлыҡ монументы. Тап ошо урында туристар ҙа, баш ҡалала йәшәүселәр йыш була һәм фотоларға төшә.

✔Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов үҙенең Указы менән 2025 йылға тиклемге осорға Республиканың ғаилә сәйәсәте концепцияһын раҫланы. Концепцияны ғәмәлгә ашырыуҙан көтөлгән һөҙөмтә - улар ғаиләләр өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу, балиғ булмаған балалары булған ғаиләләрҙең социаль яҡланғанлығын тәьмин итеү, ғаиләнең, балалыҡтың, әсәлек һәм атайлыҡтың ҡиммәттәрен үҫтереү.

✔Синоптиктар һуңғы осорҙа Башҡортостанда һауа торошоноң боҙолоуын Ҡара диңгеҙҙән килгән циклон менән бәйләй. Был арала ямғырҙар арктик һалҡын масса менән алышынасаҡ һәм норманан 4 градусҡа түбәнерәк буласаҡ. Һалҡын көндәр байтаҡҡа һуҙыласаҡ, ти синоптиктар.

✔Сибайҙа Ҡымыҙ байрамы булып үтте. Унда Сибай, Баймаҡ, Әбйәлил, Бөрйән, Йылайыр, Хәйбулла райондарынан 13 дәғүәсе ҡатнашты."Урал арыҙы ҡымыҙы" конкурсында тәп бүләкте Баймаҡ районы "Союз" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте яуланы, беренсе урынға Сибайҙың "Элеватор" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте ҡымыҙсылары сыҡты.

**"Башинформ"дан.**

*✔ Тәү сираттағы бурыс булып тәрән стагнацияға бирелмәү, кире күрһәткестәрҙә оҙаҡ ултырмау тора. Ил етәкселеге, республика Хөкүмәте тарафынан дөйөм иҡтисади хәл-торошто сәләмәтләндереү өсөн саралар күрелә.*



*КӨН ҠАҘАҒЫ*

# ХӘЛДӘР НАСАРҘАН ТҮГЕЛ

**19 августа Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Хөкүмәттең йылдың тәүге яртыһында төбәктең социаль-иҡтисади үҫеш йомғаҡтарына арналған киңәйтелгән ултырыш уҙғарҙы. Унда БР Хөкүмәте, Федерация Советы ағзалары һәм Дәүләт Думаһы депутаттары, дәүләт власының Башҡортостандағы территориаль һәм федераль органдары вәкилдәре, Дәүләт Йыйылышы депутаттары, муниципалитеттар башлыҡтары, республиканың ойошмалар һәм предприятиелар етәкселәре ҡатнашты.**

"Бөгөнгө саранның төп һүҙе - "үҫеш". Санкциялар, көнбайыш финанс баҙарҙары ябылыуы, нефтҡа хаҡтарҙың түбән булыуы (әле барреленә 48-50 доллар тирәһе), башҡа кире факторҙар шарттарында үҫешеүе енелдән түгел, бик ауыр. Бөгөн тәү сираттағы бурыс булып тәрән стагнацияға бирелмәү, кире күрһәткестәрҙә оҙаҡ ултырмау тора. Ил етәкселеге, республика Хөкүмәте тарафынан дөйөм иҡтисади хәл-торошто сәләмәтләндереү өсөн теиешле саралар ҡулланыла. Ҡараштар импортты алмаштырыусы урындағы етештереүсегә, иҡтисадтың аныҡ секторҙарына ярҙам итеүгә, инфляция процестарын тотҡарлауға төбәлгән, - тине Рөстәм Хәмитов үҙенең сығышында. - Һыңғай күрһәткестәр араһында торлаҡ төҙөлөшөнөң яҡшы темпта үҫеүенең билдәләргә кәрәк, ул былтырғы кимәлгә ҡарағанда 113 процент тәшкил итте. Инвестициялар буйынса ла күрһәткестәр насар түгел, иҡтисадҡа һалымдар ҙа ете процентҡа артҡан. Ярты йылда республиканың консолидацияланган бюджетына яҡынса 83 миллиард һум - былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 13 процентҡа күберәк килем ингән. Һалым һәм һалым булмаған килем 10 процентҡа артып, 65,5 миллиард һум самаһы тәшкил итә. Быйыл үткәрелгән сараларҙан ШОС һәм БРИКС илдәре башлыҡтарының саммиттары айырым урын алып тора. Был форумдар ил генә түгел, республика өсөн дә мөһим тарихи әһәмиәткә эйә. Саммиттар арҡаһында Башҡортостан тураһында бөтөн донъяла тағы ла күберәк белеп ҡалдылар. Беҙгә был факторҙы тулыһынса файҙаланыу мөмкинлеген ҡулдан ысҡындырырға ярамай. ШОС һәм БРИКС илдәренең рәсми һәм эшлекле даирәләре менән бәйләнештәр икенсе үҫеш алыуы әле үк күренә. Яҡын арала ошо илдәр менән төрлө өлкәләрҙә үҙ-ара файҙалы хеҙмәттәшлекте үҫтереү буйынса саралар планы ҡабул ителәсәк".

Дәүләт башлығының сығышын баһалап, Өфө политологы Дмитрий Михайличенко түбәндәгеләрҙе билдәрҙе: "Көрсөк шарттарында Рәсәй Хөкүмәте ресурстарҙы экономиялауҙың ҡәтғи сәйәсәтен алып бара. Үҙ сиратында Башҡортостан Хөкүмәте лә ресурстарҙы һаҡсыл тотона, уларҙы бушҡа туҙҙырыуға юл ҡуймай. Ултырышта килтерелгән һандар тынысландырмай, әммә был кире күренеш илде солғап алған тәрән эске иҡтисади көрсөк шарттарында һаҡланып килә. Республикалағы хәлдәр бик насарҙарҙан түгел. Эске тулайым продукт ил буйынса кәмей, тимәк, төбәк продукты ла кәмей. Республиканың был трендты бөтөрөрлөк факторҙары бар, тип уйлайым. Тәү сиратта уға бюджеттың "Башнефть" акциялары иҫәбенә тулыланыуын индерер инем. Дөйөм алғанда, көрсөк шарттарында үҫеш кимәле дөйөм Рәсәй күрһәткестәренә тап килә". Политологтың фекеренсә, Республика Башлығының сығышы Хөкүмәтте тейешле юлға сығарыуҙа туплау характерына эйә.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## ТУҠТАЛЫШ АТАМАҺЫНА КОНКУРС



**Баш ҡаланың Совет районы трамвай туҡталыштарының иң яҡшы атамаһына конкурс иғлан иткәйне. Был сараға улар Минһажев һәм Революцион урамдарында бер үк - "Революцион урам" туҡталышы булыуы сәбәпле мәжбүр була һәм Минһажев урамы, 140 адресы буйынса урынлашҡан туҡталышты икенсе төрлө атарға ҡарар ҡыла.**

Өфөләрҙән барлығы 300 вариант тәҡдим алына. Кемдер уны урамдың элекке исеме буйынса "Богородская", бәғзе берәү студент йәтаҡтарының күплегенә бәйле "Студенттар", ә китап уҡырға яратыусылар яҡында ғына модель китапханаһы булыуы сәбәпле "6-сы китапхана" тип атарға тәҡдим итә. Шулай уҡ БРИКС, Сәскәле, Йәшел һ.б. атамалары тәҡдим ителгән. 85 йәшлек Евгения Сурколь туҡталышҡа билдәле йәмәғәт эшмәкәре Зыя Нурыевтың исемен биреүҙе тәҡдим итһә, 78 йәшлек Николай Осипов 112-се башҡорт кавалерия дивизияһының легендар генералы Миңлегәле Шайморатов фамилияһына өҫтөнлөк бирә. Әммә 5-15 августа социаль селтәрҙәрҙә барған тауыш биреү һөҙөмтәһендә "Студенттар" атамаһы 64 процент тауыш йыйған.

## БЕЛЕМ УСАҠТАРЫ ӘҘЕРМЕ?



**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов баш ҡаланың мәғариф учреждениеларында булып, уларҙың уҡыу йылына әҙерлеген тикшерҙе. Тикшереү барышында Сынтимер Биктимер улы капиталь һәм ағымдағы ремонт эштәре, яңы уҡыу йылына әҙерлек эштәрен баһаланы, етешһеҙлектәрҙе күрһәтеп бирҙе.**

Сынтимер Биктимер улы башта "Дим-8" биҫтәһендәге балалар баҡсаһы төҙөлөшө барышы менән танышты. 224 урынға тәғәйенләнгән был учреждениены һәм "Шаҡша -5" (195 урын), "Инорс-7" (177 урын) биҫтәләрендәге балалар баҡсалар төҙөлөшөн тамамлау өсөн федераль бюджеттан 200 миллион һум аҡса бүленгән.

Совет районының 95-се мәктәбендә лә 7,5 миллион һумға капиталь ремонт үткәрелгән. Быйыл был мәктәп 120 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Әммә уға былай йәште бирмәҫһең дә: матур фасад, заманса киң коридорҙар, яҡты һәм уңайлы кластар. Мәктәп директоры Елена Голосеева билдереүенсә, ашханаға ла реконструкция үткәрелгән, аш бешереү бүлмәһе цехтарға бүленгән, яңы ҡорамалдар менән йыһазландырылған һәм улар уҡыусыларҙы йылы аш менән тәьмин итеү мөмкинлеген бирә. Яҡтылыҡ сығанаҡтары светодиод лампаларға алмаштырылған, яңы тәҙрәләр ҡуйылған. Спорт залы, ҡыйыҡ ремонтланған.

## АҠ ФЕСТИВАЛЬ




**Рәсәйҙә һөткә һәм һөт продукцияларына арналған иң ҙур ғаилә байрамы - "Һөт иле" фестивале быйыл 29 августа Салауат Юлаев исемендәге майҙанда үтәсәк. Ҡунаҡтарҙы бик күп интерактив майҙансыҡтар, һөт йәрминкәһе, концерт программаһы һәм мал фермалары көтә. Һәр кем бер стакан "Домик в деревне" һөтөн эсеп киңнәсәк. Теләүселәр продукцияны етештереүсе ҡуйған махсус хаҡҡа һатып ала аласаҡ.**

Байрамда яңы өйләнешеүсе йәштәрҙе сюрприз көтә. Ә инде оҙаҡ йылдар бергә йәшәгән парҙар өсөн ретробейеү майҙансығы эшләйәсәк. Иң кескәй ҡунаҡтарға балалар майҙансыҡтары урынлаштырыласаҡ.

Һәр йылдағыса, иң популяр майҙансыҡ булып һөт биреүсе малдар: һыйырҙар, кәзәләр, һарыҡтар фермаһы торасағы күҙаллана. Улар һәр ҡайһыһы айырым ҡойма артында торасаҡ һәм һәр төр буйынса мәғлүмәт стенды ҡуйыласаҡ. Бынан тыш, фестиваль сиктәрендә экстремаль спорт төрҙәре буйынса зона ла эшләйәсәк. Байрам сағыу концерт программаһы менән тамамланасаҡ.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## АҠСАЛАТА АЛАЛАР

Социаль хеҙмәттәр күрһәтелеүсе федераль льгота менән файҙаланыусылар социаль хеҙмәттәр тупланмаһынан йә уның айырым өлөшөнән баш тартыуҙары тураһында йәки социаль хеҙмәттәрҙе аҡсалата алыуҙы оҙайтыуҙы һорап ошо йылдың 1 октябренә тиклем ғариза яҙа ала.

Ғәмәлдәге законға ярашлы, йыл һайын ғариза яҙыуҙың кәрәге юҡ. Элекке ҡарарын үҙгәртергә теләгән кешеләр генә Пенсия фондына мөрәжәғәт итә.

Әлеге көнгә социаль тупланма 930, 12 һум тәшкил итеп, шул иҫәптән:

716,40 һумы - кәрәкле дарыуҙар менән тәьмин итеү өсөн,

110 һум 83 тин - шифаханаға юллама өсөн,

102 һум 89 тин - дауаланыу урынына барыу һәм ҡайтыу өсөн ҡала яны тимер юл һәм ҡалара транспортка түләүгә тәғәйенләнә.

Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса идарасыһы Фоат Хантимеровтың әйтеүенсә, республикала барлығы 349 федераль льготасы йәшәй. Шуларҙың 311 меңе ( социаль ташлама тупланмаһына хоҡуҡ менән файҙаланыусыларҙың 89 проценты) аҡсалата компенсация алырға теләк белдерҙе.

## ҺӘР ЭШЛӘҮСЕГӘ - АЙЫРЫМ

Йыл һайын августа иҫәпләнә торған өҫтәмә 2014 йылдың 2-4-се кварталдарында эшләгән республика пенсионерҙарына ҡағылды. Пенсия фонды тарафынан эш биреүселәрҙән ошо отчет осорона иҫәпләнгән взностар тураһындағы мәғлүмәттәр алынып, страховкаланған кешеләр иҫәбенә яҙылып сыҡты.

Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе етәксеһе Фоат Хантимеров әйтеүенсә, пенсияларҙы ҡайтанан иҫәпләү был турала ғариза яҙмаған хәлдә лә башҡарыла. Бүлексә буйынса 1 августан буласаҡ пенсиялар күләмен ваҡытында иҫәпләп сығыу эштәре тамамланды. Хеҙмәт пенсияһын яңы күләмдә эшләп йөрөгән 250-нән ашыу пенсионер ала башланы. Был түләүҙәрҙе тулы кимәлдә финанслау тәьмин ителде.

Страховкалы пенсияларҙы ҡәҙимге индексациялауҙан айырмалы, августағы өҫтәмә күләме, эшләгән осорҙо, эш биреүсенән Пенсия фондына килгән страховка күләменә ҡарап, һәр пенсионерға айырым тәғәйенләнә. Пенсиялар 3-24 августа бөтөн почта бүлексәләрендә лә графикка ярашлы түләнә.

**РФ Пенсия фондының БР буйынса бүлексәһе матбуғат хеҙмәте.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔ Быйыл баш ҡаланың мәғариф хеҙмәткәрҙәре август кәңәшмәһе 25 августа үтә. Ҡатнашыусыларҙы SHERATON отелендә иртәнге 11.00 сәғәттә көтәләр. Август кәңәшмәһе сиктәрендә мәғариф учреждениелары етәкселәре өсөн 26, 28 августа дискуссия майҙансыҡтары эшләйәсәк.

✔ Башҡорт дәүләт университеты ғалимдары Рәсәй фундаменталь тикшереүҙәр фондының БДУ базаһында конференция үткәреүгә грантын отто. Грантҡа лайыҡ булған проекттар икәү: береһе - инженер факультеты профессоры Марат Абдуллин етәкселегендәге, икенсеһе - физик-техник институт профессоры Рәүеф Бәхтизин етәкселегендәге проекттар.

✔ "Өфө ҡалаһы халҡының мәшғүллек үҙәге" Өфө ҡалаһы бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм ярҙам итеү фонды менән берлектә "Эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге нигеҙҙәре" тигән түләүһеҙ курс-консультациялар үткәрә. 7-18 сентябрҙә буласаҡ курстарға Өфө ҡалаһы, Ибраһимов бульвары, 47/1 адресы буйынса 26-сы кабинетта йә 251-51-83 телефоны аша яҙылырға мөмкин.

✔ Киң мәғлүмәт сараларында һайлау алды агитацияһы башланды. Республиканың Үҙәк һайлау комиссияһында хәбәр итеүҙәренсә, ул һайлауға тиклем 28 көн алда тормошҡа ашырыла. Кандидаттар өсөн баҫма майҙанды һәм эфир ваҡытын бүлеү буйынса йәрәбә һалынды. Һайлау алды агитацияһы тауыш биреүгә тиклем бер тәүлек алдан, йәғни 12 сентябрҙә тамамлана.

✔ Башҡортостан Хөкүмәте республикала һунар ваҡытын билдәләне. 29 августан 15 ноябргә тиклем - һыу, һаҙлыҡ-болон, ҡыр, дала, 29 августан 31 декабргә ҡаҙар - урман кейектәрен, 1 октябрҙән 29 февралгә тиклем ҡуян аулау рөхсәт ителә. 2015-2016 йылдарҙағы һунар осоронда тотош Башҡортостанда - һыуырға (тейәндәр ғаиләһенә ҡараған кимереүсе), ә Архангел, Ауырғазы, Йәрмәкәй, Илеш, Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко, Мәләүез, Саҡмағош, Шаран райондарында һоро һәм аҡ ҡуянға һунар итеү тыйыла.

✔ Башҡорт балы һәм умартасылыҡ продукттарынан етештерелгән косметика әйберҙәре сентябрҙә Шанхайҙа уҙғарыласаҡ "ПродЭкспо" халыҡ-ара күргәҙмәһенә тәҡдим ителәсәк. Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенең рәсми дилеры ағас һауыттарға тултырылған һеркә, прополислы, сәтләүекле, шулай уҡ кәрәҙле балды күргәҙмәгә ҡуймаҡсы.

*✓ Һәр сит ил гражданы эшкә рөхсәт, хеҙмәт эшмәкәрлегенә патент, ваҡытлыса йәшәргә рөхсәт, РФ гражданлығы алған ваҡытта рус телен, Рәсәй тарихын һәм РФ закондарын белеүе тураһында сертификат тәҡдим итергә тейеш.*



*ХАЛЫҠ ТАУЫШЫ*

# АУЫЛДАРҘЫ БӨЛДӨРӨҮМЕ БЫЛ?



**Салауат районындағы тыуған ауылым Илсекәйҙә 1975 йылда нисәмә быуын ауылдаштарымдың хыялы булған мәктәп бинаһы төҙөлгәйне. Дүрт тиҫтә йыл эсендә матур йылъяҙмаһын яҙҙы, күркәм традицияларға байыны ул.**

Уҡыу сифаты яҡшы, уҡыусыларға төрлө яҡлы тәрбиә бирелә, ҡыҙыҡһыныуҙары буйынса түңәрәктәр эшләй, һәләтле балалар фәнгә тәүге аҙымдарын яһай, ғаиләләр шәжәрәләре, ауыл, мәктәп тарихы өйрәнелә, уҡыусылар тикшеренеү эштәре менән район, зона практик конференцияларында сығыш яһай, эшкәртелгән материал йыйынтыҡтарға индерелә. Әлеге ваҡытта тыуған мәктәбенә 25 йыл ғүмерен бағышлаған (шуның тиҫтә йылдан ашыуын директор вазифаһында), төп белеме буйынса инглиз теле уҡытыусыһы, икенсе юғары белемен география фәне буйынса алған, кәрәк саҡта тарих, технология, музыка дәрестәрен берҙәй сифатлы уҡытҡан Фәссәхов Әғзәм Фәйзрахман улы, мәҫәлән, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугирҙарға бағышланған китабын (мин авторҙаш) баҫтырып сығарырға әҙерләнә. Мәктәбебеҙ ысын мәғәнәһендә ауылыбыҙҙың мәҙәни үҙәгенә, ватансылыҡ, илһөйәрлек тәрбиәләүсе усаҡҡа әүерелде.

Түбәләҫ биләмәһенең Тирмән, Илсекәй, Сүрәкәй, Урмансы, Ҡарағол ауылдары заман елдәренә бирешмәй, үҙлеген һаҡлап килә ине әле. Шул арҡала туған телебеҙ ҙә, шөкөр, һаҡланды, уҡытыла килде. Ә бөгөн юғалыу бәләһенең хәтәр ҡылысы был төбәктең тап ошо башҡорт ауылдары өҫтөндә уйнай. Халыҡтың, тотош милләттең үҙ балаларын туған телендә уҡытыуға булған конституцион хоҡуғы көсләп юҡҡа сығарыла тиһәк тә хата түгел. Иң тәүҙә Сүрәкәй (Нуғай) ауылында, ике-өс йыл элек Ҡарағол (Түбәләҫ Арҡауылы) ауылында аҙ комплектлы башланғыс мәктәптәр ябылды. Берике йыл элек Илсекәйҙәге төп мәктәпте Мөрсәлим урыҫ мәктәбенең филиалы итеп ҡалдырғайнылар. Ошонан һуң башҡа үҙгәрештәр булмаҫтыр, тип уйлаған булғайны ата-әсәләр. Тағы ла бер насар яңылыҡ халыҡты хафаға һалды: быйыл, йәғни алдағы уҡыу йылынан, Илсекәйҙә башланғыс мәктәп кенә ҡалдырмаҡсылар. Рәсәй Президенты В. В. Путин талап иткәнсә, ауыл сходтары йыйыу, халыҡ фекерен тыңлау тигән нимә лә булманы. Бындай хәл иткес ҡарарҙар мотлаҡ ауыл сходтарында хәл ителергә тейеш икәне билдәле ләһа. Ә бит быйыл Илсекәй мәктәбендә 47 уҡыусы уҡыһа, 2015/2016 уҡыу йылында 52 уҡыусы буласаҡ. Балалар һаны артыуға китмәҫ борон, "шау-шыуға" ышыҡланып, ҡыҫҡартып ҡалырға тырышамы урындағы етәкселәр? Халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртырға тейеш депутаттар ниңә көрәшмәй? Эшһеҙлектән, аҡса табыу ниәтенән ауылын, ғаиләһен ҡалдырып, айҙар буйы ситтә эшләргә мәжбүр булған ир-егеттәребеҙҙең балалары йәшәгән бәләкәй ауылдарҙы "ҡоротоу" эше алып барыла түгелме? Нишләп беҙ хоҡуҡи акттарға таянмайбыҙ? Нишләп Халыҡ фронтының төбәк ойошмалары бар ерҙә лә эшләмәй?

Мәғариф системаһын оптималләштереү юлында нимә генә уйлап сығармайҙар! Мәктәп директорҙарына, етмәһә, мәктәп хәстәрҙәре генә түгел, балалар баҡсаларының бөтмәҫ-төкәнмәҫ, үтә лә етди тәрбиәүи-методик, матди-техник мәсьәләләрен хәл итеүҙе лә йөкмәтеп ҡуймаҡсылар, имеш. Тирмән, Урмансы мәктәптәренә балалар баҡсаларын ҡушҡандар. Бер-ике балалар баҡсаһы етәксеһенә түләгән аҡсаны экономиялап, һүнә барған ауылдарҙы өҫтәп һүндереү өҫтөндә эшләп, байып китер микән Хөкүмәт? Ришүәтселәргә, бюджетты талаусы, һалымдан ҡасыусы төрлө "эшҡыуарҙар"-ға ҡаршы ҡатыраҡ ысул ҡулланып көрәш асыу тураһында уйлаһалар, ҡаҙна һайыҡмаҫ, байыр ғына ине.

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА, Өфөнөң 123-сө лицейы башҡорт теле уҡытыусыһы.**

*ШАҢДАУ*

# ҠУРАЙ МОҢО ТЫНМАҺЫН



**"Киске Өфө" гәзитенең 27-се һанында Өфөлә "Ете ҡыҙ" фонтаны асылыуы тураһындағы мәҡәләне уҡығас, үҙемдең тәьҫораттарым менән дә бүлешергә булдым.**

Фонтан асылған көндә, ҡойоп яуған ямғырға ҡарамайынса, майҙанда йөрөгән халыҡ араһында мин дә булғайным. Шундағы төрлө милләт халыҡтарының кәйефенә, йөҙөнә сыҡҡан шатлығына һәм ҡыҙыҡһыныуына, ихласлап ҡурай моңон тыңлауына, видеоэкрандарҙан Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт бейеү ансамбле ҡыҙҙарының бейеүен һоҡланып күҙәтеүенә шаһит булып, күңелем тулып ҡайтҡайным.

Баш ҡалала ШОС һәм БРИКС саммиттары башланған кистә лә саф һауа һулап килергә теләп, ҡыҙҙар менән урамға сыҡтыҡ. Ҡалала тыныслыҡ һәм тынлыҡ. Ғәҙәттә, береһенән-береһе уҙҙырып туҡталыштарҙа тығын ойоштorған автобустар ҙа бик ипле ҡылана, берәмләп кенә үтеп китәләр. Кешеләр ҙә аҙайған. Күрәһең, донъя кимәлендәге мөһим ваҡиғалар барышында урамдарҙа буталып йөрөүҙе кәрәк тапмайынса, ҡаланан ситкә, дачаларына, баҡсаларына китеп бөткәндәрҙер. Был да мәҙәнилек билдәһе. Ә бына "Ете ҡыҙ" фонтаны урынлашҡан Театр скверына халыҡ байтаҡ ҡына йыйылған, сит ил ҡунаҡтары ла күренә. Талғын ғына ҡурай моңо ағыла. Быға тиклем баш ҡала парктарында, майҙандарында башҡорт халыҡ йырҙары йәки ҡурай моңо һирәгерәк яңғырағанғамы, бер аҙ аптырабыраҡ фонтан янына яҡыныраҡ барҙыҡ. Эскәмйәләрҙә төрлө милләт кешеләре ял итә, ҡайһылары баҫҡынсыларға терелә́й бирелергә теләмәй ҡасып китеп, үлемде өҫтөн күргән ғорур башҡорт ҡыҙҙарының һомғол бронза һындарын ентекләп ҡарай... Күрәһең, был майҙан бынан ары баш ҡала халҡының һәм ҡунаҡтарҙың иң яратҡан ял итеү урынына әйләнер. Тик ҡурай моңо тынмаһын ине унда...

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ҠАҘНАҒА ФАЙҘАҒА

**Йылдың тәүге яртыһында Башҡортостанда мигранттарға яҡынса 20 мең патент бирелгән. Был турала Башҡортостан буйынса Федераль миграция хеҙмәте идаралығы етәксеһе Борис Ғөзәйеров журналистар менән осрашыуҙа белдерҙе. Патенттар һаны буйынса республика Волга буйы федераль округында икенсе урында тора һәм был патент системаһы быйыл төбәк ҡаҙнаһын яҡынса 150 млн һумға тулыландырған.**

Йыл башында визаһыҙ илдәрҙән Рәсәйгә эшкә килгән мигранттар өсөн ҡағыҙәләр үҙгәргәйне, уларҙың иң мөһимдәренең береһе - Рәсәй менән визаһыҙ режимда булған илдәрҙең граждандарына юридик шәхескә эшкә урынлашыу өсөн махсус рөхсәт кәрәкмәй. Хәҙер Рәсәйгә башлыса элекке советтар союзы республикаларынан эшкә киләләр һәм уларға төрлө компанияларҙа эшләү өсөн элек физик шәхестәрҙә генә эшләргә мөмкинлек биргән патент алырға кәрәк. Ошо бер үк патент менән юридик һәм физик шәхестәрҙә эшләргә ярай. Патент ниндәйҙер билдәле бер төбәктә бирелә һәм шул төбәктә генә яраҡлы. Уның хаҡын (НДФЛ - физик шәхестең килеменә һалынған һалым күләме) төбәк үҙе билдәләй. Республикала был һалым күләме айына 2 мең 823 һум да 12 тин тәшкил итә. 2015 йылдың 1 ғинуарынан был һалым төбәк бюджетына китә, элек ул федераль һәм төбәк бюджет араһында урталай бүленә ине. Борис Миҙхәт улы билдәләүенсә, әгәр ҙә миграция хеҙмәте идаралағы тапшырған патенттар күләме былтырғы йылдағы кеүек булһа, республика бюджетына миллиард һумдан күберәк аҡса инәсәк. Яңы документ мигранттарға бер йылға бирелә, был ваҡыт үткәндән һуң уны тағы ла 1 айҙан 1 йылға тиклем оҙайтырға була.

Быйылғы йылдан ингән тағы ла бер үҙгәреш медицина страховкаһы полисына ҡағыла. Был яңылыҡ бөтөн категория граждандарға, шул иҫәптән, Белоруссия, Ҡаҙағстан, Әрмәнстан һәм 2015 йылдың 12 августынан Ҡырғыҙстан граждандарына ла ҡағыла. Белеүегеҙсә, был илдәр Таможня союзы һәм Евразия иҡтисади союзы ағзалары һәм уларға Рәсәй территорияһында эшләү өсөн махсус рөхсәт кәрәкмәй, улар бары тик миграция иҫәбенә тороп, ҡайҙа эшләүен генә хәбәр итә. Ә бына медицина тикшереүе үтеп, медицина полисын улар ҙа алырға бурыслы. Мигранттың медицина полисы юҡ икән, эш биреүсе уны эшкә ала алмай, ә полистың ваҡыты сығыу менән контракт өҙөлөргә тейеш. Унһыҙ патент та бирелмәй.

Бынан тыш, 2015 йылдың 1 ғинуарынан һәр сит ил гражданы эшкә рөхсәт, хеҙмәт эшмәкәрлегенә патент, ваҡытлыса йәшәргә рөхсәт, РФ гражданлығы алған ваҡытта башҡа документтар менән бергә рус телен, Рәсәй тарихын һәм РФ закондары нигеҙҙәрен белеүе тураһында сертификат тәҡдим итергә тейеш. Тестарҙы үтеү өсөн шулай уҡ дәүләт пошлинаһы түләнә. Сертификат 5 йылдан һуң көсөн юғалта.

**Шулай итеп, былтыр һәм быйылғы йылда миграция өлкәһендәге күп кенә Рәсәй закондарының үҙгәреүе был йүнәлештәге эшмәкәрлекте тағы ла камиллаштырасаҡ. Идара етәксеһе Борис Миҙхәт улы әйтеүенсә, эшкә килеүселәрҙең күбеһе квалификацияһыҙ эшселәр, улар иң түбән иҫәпләнгән эш хаҡына ла риза, тимәк, миграцияның был тулҡыны дәүләт тарафынан ныҡлы иғтибар талап иткән йүнәлеш. Был яңылыҡтар иһә легаль булмаған миграция менән көрәште көсәйтеү, сит илдән юғары квалификациялы белгестәрҙе эшкә йәлеп итеү, дәүләт пошлиналары күләмен дә арттырырға булышлыҡ итәсәк.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Алма

❖ Халыҡ медицинаһында алмаға ярайһы ҙур урын бирелә. Киске ашҡа алма ашағанға бер табип та кәрәкмәй, тип юҡҡа әйтмәйҙәрҙер, моғайын. Алма диетик һәм дауалаусы сифаттарға эйә продукт. Ул организмды, иммун системаһын, нервыларҙы нығыта, яраларҙың бөтәшеүенә йоғонто яһай, баш мейеһе эшмәкәрлеген яҡшырта, ҡандағы шәкәр кимәлен нормала тоторға булышлыҡ итә.

❖ Аҙ ҡанлылыҡтан, авитаминоздан, ашҡаҙан эшмәкәрлеге боҙолоуҙан да алма ярҙам итә. Уның составындағы пектин матдәләр алышыуын яйға һала, кәрәкмәгән холестеринды организмдан сығара.

❖ Атеросклероз, юғары ҡан баҫымы менән даими яфаланыусыларға ла алманы йышыраҡ ашарға тәҡдим итә табиптар.

❖ Алмағас япраҡтарынан әҙерләнгән төнәтмә тирҙе ҡыуа.

❖ Ауырлы ҡатындар алма ашаһа, баланың тын алыу системаһы һәйбәт үҫешә, бала тыуғас, унда аллергия булмай.

❖ Бешерелгән алма хроник эс ҡатыуҙан ҡотҡара. Ошо уҡ маҡсаттан өлкәндәргә һөткә һалып бешерелгән алма файҙалы.

❖ Падагра мәлендәге көслө ауыртыуҙарҙан алманы табала ҡыҙҙырған мәлдә бүленеп сыҡҡан һутты эсеп дауаланалар.

❖ Алманың орлоғон да ҡулланалар. Ул яман шеш ауырыуҙарын булдырмай, был орлоҡтарҙа биологик әүҙем матдәләр, витаминдар, ферменттар күп. Алманың бер орлоғонда йодтың тәүлек нормаһы бар. Шулай ҙа орлоҡтарҙы күп ашарға ярамай, сөнки уларҙа ағыу иҫәпләнгән синиль кислотаһы була. Көнөнә 4 орлоҡтан артығын ашамағыҙ.

❖ Организмда тоҙ әйләнешен яҡшыртыу өсөн алма сәйе әҙерләргә мөмкин. 2-3 ҡабығынан таҙартылмаған алманы 1 литр һыуҙа 15 минут ҡайнатырға.

❖ Аҙ ҡанлылыҡ мәлендә: 1 ҡалаҡ алмағас япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә, көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң 1-әр стакан төнәтмәне балға ҡушып эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# ТОРНА БЕЙЕҮЕ

**1926 йылда Баймаҡ районының Басай ауылында ҡурайсы Кәрим Дияров тарафынан яҙып алынған "Сыңрау торна" легендаһының бер вариантында әйтелеүенсә, борон бер ҡурайсы егет үҙенең ҡолонон эҙләп, Ирәндек тауҙарының уртаһындағы яланға барып сыҡҡан да, моң ишетеп, аптырауынан хайран ҡалған.**

Был көй ишетелгән яҡҡа барһа, ни күрә: яланда бәләкәй генә буҙ төҫтәге торналар түңәрәктә әйләнә икән. Уртала иңә торна тора, ул ҡанаттарын күтәреп, ҡоңғорлай башлаһа, торна балалары уға ҡушылып, әйләнә башлай, ти. Егет был күйҙә отоп алғансы торған да торған. Һуңынан атҡа атланып, сабып ҡайтҡан һәм ҡурайын алып, торналар көйөн уйнап ебәргән. Был легендаһының варианты Дим бассейны башҡорттарында ла осрай. Башҡорт халыҡ хореографияһында "Торналар бейеүе"нең бер нисә варианты бар, улар "Сыңрау торна" көйөнә башҡарыла.

Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш өләшөндә, айырып әйткәндә, теләүҙәрҙә ул ир-егеттәр бейеүе иҫәпләнә. Ир-егеттәр түңәрәккә йәки ярымтүңәрәккә тороп, ҡулдарындағы йүкә ағасы ҡабығы менән торна тауышына оҡшаған тауыштар сығарып бейегән. Икенсе вариант буйынса, йоҡаҡ ҡына ағас пластиналар ҙур йәки имән бармаҡҡа бәйләнгән. Өҫкә күтәрелгән һәм бер аҙ бөгөлгән ҡул торнаның башын һәм муйынын, бармаҡтарҙы асып ябыу уның суҡышын хәтерләткән.

Теләүҙәрҙә ир-егеттәрҙең тағы бер яңғыҙ бейеүе билдәле. Ул туй йәки башҡа байрамдарҙа башҡарыла, йәғни йола бейеүе булған. Бер ҡатнашыусы торна булып кейенгән - аҡ тунды кирегелән әйләндереп кейгән һәм бер еңенә "торна башы" ҡуйған. "Торна башы" оҙон ағастан яһала, уның торна башына һәм уның суҡышына оҡшаған өлөшө була. "Торна" әйелә бирәп, бейеү башҡарғанда ошо таяҡты ҡыбырлатып йөрөгән.

Үҫәргән һәм бөрйәндәрҙә был күмәк ҡатын-ҡыҙҙар бейеүе иҫәпләнә. Үҫәргән ҡатын-ҡыҙҙарының бейеүе һаҡланмаған. Хәйбулла районы Йәнтеш ауылынан информатор С. Иштәкбаева әйтеүенсә, бейегәндә ҡатын-ҡыҙҙар: "тирҡын-тирҡын-тирарай" тип һамаҡлаған.

Бөрйән ҡатын-ҡыҙҙарының торна бейеүе этнограф һәм хореограф Л. Нагаева тарафынан һүрәтләнгән. Ҡыҫҡаса әйткәндә, был аҡ торналар бейеүе булған. Һәр ҡулдың баш һәм имән бармағына ағас пластиналар бәйләнгән. Бейеүҙе башҡарғанда ҡыҙҙар был пластиналарҙы йә үстарға, йә бер-береһенә һуҡҡан. Ҡулдар торнаның муйынын, башын оҫта итеп күрһәтергә тейеш. Торнаның традицион образы еңел хәрәкәттәр, ҡулдарҙың талғын хәрәкәте, әйрәләүҙәрҙән торған. Ҡыҙҙар түңәрәк буйлап ошо хәрәкәттәрҙе яһаған. Бына бер мәл уртаға ҡоштар тубының башлығы сыға. Ҡыҙҙар уның хәрәкәттәрен ҡабатлай.

Тикшеренеүселәр бер нәмәлә уртаҡ фекергә килә: "Торна бейеүе" борон магик характерға эйә булған. Мөһим ваҡиғалар мәлендә был бейеүҙе башҡарыу ырыуҙың киләсәгенә ыңғай йоғонто яһаған. Әммә шул уҡ ваҡытта, үҫәргән, тамъян, түңгәүер башҡорттары ышаныуҙары буйынса, торналарҙың бейеүен ҡарарға ярамаған. Кем дә кем был тамашаға тап була, һүҙҙәрен устары менән ҡапларға тейеш булған. Торналар ер тапаған ерҙә ҡан ҡойоласаҡ, бәрәкәт китәсәк, һыу сығанаҡтары кибәсәк, тигәндәр. Шуға ла бейеүҙе башҡарыусы уны Тәңренән халыҡҡа бәхет, тыныслыҡ, бәрәкәт һорап башҡарыуын ҡысҡырып иғлан иткән.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ*

# БАЛА ТӘРБИӘЛӘРГӘ ӨЙРӘТМӘКСЕЛӘР...

**Бала саҡта беҙ ата-әсәйҙән ҡурҡа торғайныҡ, бигерәк тә әсәйҙән. Ул ҡушҡан эште тейешенсә үтәмәүҙән (бөтөнләй үтәмәү хаҡында һүҙ ҙә юҡ), унан шелтә алыуҙан, әрләнеүҙән, кәйефһеҙ сағына эләгеүҙән, күңелен төшөрөүҙән һ.б. Бик көйгәнендә ҡул осо ғына эләгеп китеүҙән тыш, сыбығын да, ҡайышын да иҫләмәйем, әммә ҡашын төйөп ебәреүе беҙгә йүгереп йөрөп тырышлыҡ һалыуға үҙе бер сәбәп була торғайны. Үҫкәс тә, хатта бөгөн дә, уның нимәгәлер ризаһыҙлығын тойоу йәки ишетеү ауыр ҡабул ителә. Аллаға шөкөр, үҙемдең дә балаларыма нимәнелер аңлатыу өсөн бер күҙ ҡарашым етә. Әлеге аҡылым менән мин быны ҡурҡыу тип иҫәпләмәйем, был үҙенә күрә хөрмәт һәм тәрбиә. Баланың ата-әсәһенә буйһоноуға, уларҙың хоҡуҡтарын аяҡ аҫтына һалып тапамаҫҡа, олоно оло итергә тейеш булған ҡанундар былар.**



Күптән түгел Дәүләт Думаһы Комитетының ғаилә, ҡатын-ҡыҙ һәм балалар мәсьәләләре буйынса бер тәҡдиме ярайһы уҡ шаулы тауыш ҡуптарҙы. Бында һүҙ Ғаилә кодексын тамырынан үҙгәртеү хаҡында бара. Хәҙер уның нигеҙенә ата-әсәнең гәйепһеҙлегенә, гонаһһыҙлығына өмөт итеү принциптары һалынасаҡ, тиелә. Быны сәбәбе нимәлә? Бөгөнгө кодекс эстәлегендә ата-әсәнең балалар алдында хоҡуғы бөтөнләй юҡ кимәлендә күрһәтелә икән. Йәғни, ата-әсә һәр ваҡыт нимәләлер яңылыша, гәйепле булып ҡала һәм уның бала яҙмышында үтәгән роле лә кәметелә килә. Мәсәлән, балиғ булмаған йәштәр никаҡҡа ингәндә ата-әсәнең түгел, ә опека органдарының рөхсәте кәрәк. Интернетҡа ата-әсә тұләй, әммә балаһы уның менән ҡулланыуҙан тыя алмай, был саҡта улар уны мәғлүмәтле булыуын сикләй. Баланың шәхси тормошо булырға тейеш, йәғни ул кем менән теләй, шуның менән аралаша ала. Ата-әсә баланың фекерен, ниәтен, теләген үҙенсә үҙгәртә йәки "шулай кәрәк, шулай яҡшыраҡ буласаҡ" тигәндән сығып эш итә алмай, һ.б. Был ювеналь юстиция ата-әсәнең балаһына булған хоҡуғын мөмкин тиклем кәметә, ғаиләнең тәрбиә функцияларын тартып алып, уны дәүләт һәм башҡа органдарға тапшыра торған идеология, принциптар буйынса ғаиләгә ҡаршы ҡуйыла. Ә инде яңы индерелергә тейешле тәҡдимдәр ата-әсәнең ғаилә тәрбиәһендә мөһим һәм алыштырғыһыҙ роль уйнауын иҫбатларға ярҙам итәсәк.

Үҙебеҙҙең таныштар араһында булған хәлдәрҙе миҫалға килтерергә мөмкин. 14 йәшлек малайға атаһы һатып алынған тиреҫте баҡсаға ташып өйөргә ҡуша. Бер көн, ике көн, өс көн... Эш үтәлмәй. Атай кеше, ахырҙа, улын футбол уйнауҙан мәхрүм итә. Малай үсегеп, атаһын ауыр эш менән йонсотоуҙа гәйепләп, ғариза яҙа. Был хәлдән һуң ата-әсәгә әллә күпме ваҡыт полиция, опека юлдарын тапап, үҙҙәренең "яҡшы" ата-әсәй булыуын иҫбатларға тура килә.

Икенсе миҫалда бөрәүҙәрҙең ике йәшлек балаһы печеньеға ҡарыла. Ҡото алынған әсә бер нисек тә ярҙам итә алмағас, балаһын баштүбән күтәреп, бер нисә тапҡыр арҡаһына һуға. Артыҡ ҡурҡыуҙан һәм сараһыҙлыҡтан ныҡыраҡ та эләктергәндер, бәлки. Ике көндән һуң улар балалар баҡсаһына урынлашыуға медицина тикшереүе үтә. Табип баланың арҡаһындағы ҡул эҙҙәрен күреп, тейешле органдарға хәбәр итә һәм йәш әсәнең йөрәген һәм нервыларын иләр процедуралар башлана.

Өсөнсө миҫалда үҫмер ҡыҙ ата-әсәһен яратҡан егете менән осрашырға рөхсәт итмәүҙә гәйепләй һәм закон уны яҡлап сыға. Был хәлдән һуң ул ҡыҙҙың ғаиләнең оло ағзаларын тыңлауы бөтөнләй икеле.

Был тәңгәлдә беҙҙекеләр сит илдәргә эйәрә, ахыры. Норвегияла балиғ булмағандар араһында таратылған плакаттарҙа "Әгәр ата-әсә һинән дәрес әҙерләүҙе талап итә икән - шылтырат, ярҙам итербеҙ", Нидерландияла "Ата-әсә кеҫә аҡсаһы бирмәй икән - мәжбүр итербеҙ", Францияла "Ата-әсә һинең шәхси теләктәреңә ҡаршы төшә алмай" тигән яҙыулылары ла бар. Голландияның бер балалар комиксы "Ниндәй енестә йәшәргә икәнде һин үҙең хәл итәһең, был мәсьәләлә ата-әсә һиңә бойора алмай", тигәнгә ишаралай. Шунлыҡтандыр инде, Францияла һәр бишенсе бала ғаиләһенән тартып алынған. Ата-әсәләргә ярҙам ассоциацияһы күрһәткестәре буйынса, был балаларҙың яртыһынан күбеһенә ярҙам түгел, ә ҡатыраҡ ҡайыш кәрәк.

Әлбиттә, баланың хәүефһеҙлеген яҡлаусы закондарға һүҙ юҡ. Әммә әлеге Ғаилә кодексында тәртиптәр баштан уҡ ата-әсәгә ышанырға ярамай тигәндән сығып эш итә. Нисек кенә булмаһын, аҡыллы сиктәрҙә ата-әсә балаһына хужа һәм яуаплы булырға тейеш. Ул һәм ҡыҙҙарҙы тәрбиәләүҙә ниндәйҙер кимәлдәге ҡатылыҡтың зыян иткәне юҡ, минеңсә. Беҙҙә бала саҡта кәнфиткә йәки яңы әйбергә алдаштырып эшләтмәнеләр. Ғаилә тормошона көс һалырға тейешһегеҙ, тип өйрәттеләр. Шул уҡ ваҡытта уҡыу һәм унан ҡалған ваҡытты нисек файҙаланырға икәнде лә күберәген ата-әсә хәл итте. Ниңәлер, хоҡуҡһыҙ һәм кәмһетелгән итеп тойманыҡ үҙебеҙҙе. Һәм быны менән, моғайын, күптәр килешер. Бөгөн балаларҙы беҙ, ата-әсәләр, үҙебеҙ боҙабыҙ. Уларҙы бәләкәйҙән әпәүләп, алдарында йүгереп йөрөп, ололар хәбәренә тығылдырып, тыя, ярай-ярамайҙы өйрәтә белмәйбеҙ. Шундай балалар еңешеү өсөн ата-әсәһенә ҡаршы закон ҡуллана ла инде.

Ғаилә кодексындағы үҙгәрештәр 2016 йылға тиклем индерелергә тейеш, тип көтөлә. Тик ундағы кемгә ниндәй хоҡуҡты күберәк йәки аҙыраҡ биреү гәҙәти кешелек донъяһына артыҡ үҙгәреш бирер микән? Белеп булмай. Ә һеҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар, ошо юҫыҡта ниндәй тәҡдимдәр индерер инегеҙ?

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# СҮПЛӘМӘ

Бала саҡта өләсәйҙәр, ҡартәсәйҙәр менән яланға барып, һауыттар тулғансы еләк терәп ҡайтып килгәндә ҡаршыбыҙға кемдәрҙер осрап, еләкте ҡайһы тирәлә йыйыуыбыҙҙы һорашһа, өләс-ҡарсәйҙәр: "Шунда-шунда йөрөнөк, еләк унда сүпләмә (бында бөртөкләп кенә йыйылмалы мәғәнәһендә)", - тип яуап бирә инеләр. Мин аптырай торғайным: "Шул-шул урында еләк доноп ултыра, һоҫоп ҡойоп алмалы, шунда барығыҙ", - тип әйткә килә ҡаршыбыҙға осрағандарға, тик ололарҙың алдына сығып булмай...

Хәҙер генә аңлайым: баҡтиһәң, өләс-ҡарсәйҙәр "сүпләмә" һүҙен әйтеп, ерһыуыбыҙҙы күҙ теләүҙән һаҡлаған икән дә. Ә мин быны еләкле урынды ҡыҙғаныу тип аңлап яңылышҡанмын. Сөнки иртәгәһенә еләкҡә сыҡһаҡ, кисәге еләкле урынды уратып үтә инек. Бер ваҡытта ла еләкһеҙ ҡайтманыҡ.

Беҙ йыш ҡына Башҡортостан хаҡында һүҙ йөрөткәндә бөҙрә эпитеттар ҡулланып, шаштырып һөйләргә яратабыҙ. Баҡтиһәң, дуҫлыҡ өсөн беҙҙең республиканан да ҡулайыраҡ урын юҡ донъяла, беҙҙә дуҫлыҡ күкрәп сәскә ата икән. Мин быны тап шулай икәнлеген аңлайым, беҙ, ысынлап та, дуҫ, татыу йәшәйбеҙ. Әммә өләс-ҡарсәйҙәрҙең "сүпләмә" тигән һүҙе иҫкә төшә барыбер ҙә. Һоҡланған урынға, әйбергә, кешегә һүҙҙең һоғо тейә, икенсәнә, "шул-шул ерҙә еләк доноп ултыра, һоҫоп ҡойоп алмалы", тип кенә әйт, хәҙер барыһы ла шул урынға уктылып, сәхрәгә тиң еребеҙҙе ҡаҡ сандауға әүерелдерәсәк....

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ

**Ҡайһы бер кешеләргә Хоҙай оло, йөкмәткеле, тынғыһыҙ тормош насип итә, хатта улар иңенә киләсәк быуындарҙың яҙмышын хәл иткән ваҡиғалар өсөн яуаплылыҡ йөкмәтә. Айырым берәүҙәр төплө белем алып, ауырлыҡтарҙа сынығып, бындай тормош юлын үҙҙәре һайлай һәм бер ниндәй ҡаршылыҡтарға ҡарамай, үҙ халҡына хеҙмәт итеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Шундай шәхестәребеҙҙең береһе Мөхәмәтхан Ҡулаев тураһында булыр һүҙебеҙ.**

# МӨХӘМӘТХАН ҠУЛАЕВ



Мөхәмәтхан Сәхипкирәй улы Ҡулаев 1873 йылдың 7 февралендә Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Йәнсура ауылында донъяға килә. Был ауыл бөгөн Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районына ҡарай. Мөхәмәтхандың бала сағы ошонда үтә. Ике йыл мәҙрәсәлә белем алғандан һуң, яңы асылған рус-башҡорт мәктәбенә күсә. Унда ла ике йыл уҡый, шунан Ырымбур гимназияһына уҡырға китә. Ата-әсәһе ҡаршы булыуға ҡарамаҫтан, яңынан беренсе класта уҡый башлай. Гимназияла 1896 йылға тиклем, ун йыл белем ала. Мөхәмәтхан артабан юғары белем алыу теләге менән яна. Әсәһе Йәнифә улының ауыл мөғәллиме йәки мулла булыуын, атаһы Сәхипкирәй иһә уның яҡшы идара эшенә урынлашыуын теләй. Ә Мөхәмәтхан Ҡаҙан университетының медицина факультетына юллана. Ошо ваҡытта ул христиан динен ҡабул итә.

Уның икенсе дингә ҡабул итеүе хаҡында ике фекер бар. Имеш, Ҡаҙан медицина университетында христиан динлеләргә ҡабул итеүгә өҫтөнлөк бирелгән. Икенсе фекер, быныһы хәҡиҡәткә яҡыныраҡ, фатирға бер попҡа төшә һәм уның ҡыҙына ғашиҡ була. Ҡыҙы ла Мөхәмәтханды ярата. Ә поп Мөхәмәтханға, бергә булғыҙ килһә, христиан динен ҡабул итһәң, тигән шарт ҡуя. Башҡорт егете мөхәббәте хаҡына динен алыштыра, рус ҡыҙы Нинаға өйләнә.

Ҡулаев динен алмаштырһа ла, булмышына тоғро ҡала. Уның ғүмер эшмәкәрлеге быны раҫлай. Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр"ендә бына нимә тип яҙа: "Беҙ уға ысын исеме менән "Мөхәмәтхан ағай" тип өндәшә торғайныҡ, үҙе лә шуны теләне. Әммә рәсми исеме менән Мстислав Ҡулаев тип имза ҡуя ине. Ҡаҙан университетында медицинаға уҡыған бик яҡшы доктор... Намыҫлы бер зат. Мосолман булмаһа ла, башҡортлоғона һәм төркилегенә тоғро ҡалды".

Мөхәмәтхан Ҡулаев Ҡаҙан университетында юғары медицина белеме алып ҡына ҡалмай. Ҡаҙан төркиәтселәр мәктәбе вәкилдәренең хеҙмәттәре һәм уларҙың үҙҙәре менән дә таныша. Шуларҙың береһе билдәле медицина профессоры Александр Казембек Ҡулаевҡа айырыуса зур ярҙам күрһәтә. "Медицина факультетын тамамлағас, башҡорт стипендияһының хаҡын сығарыу теләге менән Ырымбур губернаторынан минә Ырымбур йәки Өфө губернаһында эш биреүен һораным. Губернатор минә был губерналарҙа эшләргә рөхсәт итмәне", - тип яҙа Мөхәмәтхан Ҡулаев. Башҡортостанға ҡайта алмағас, ул Ҡаҙан губернаһының Бәләкәй Ялсыҡай ауылына барып эш башлай. Бер йылдан Ҡаҙанға кире барып, Александровск дауаханаһына штаттан тыш ординатор булып эшкә төшә.

Шулай итеп, табиб Мстислав Ҡулаевҡа тыуған еренән ситтә хеҙмәт итергә тура килә. 1913 йылда Варшавала эшләй, Беренсе донъя һуғышы башланғас, көньяҡ-көнбайыш фронттың 275-се госпиталенең баш табибы була. Башҡортостанда, милләттәштәре эргәһендә йәшәмәһә лә, һәр ваҡыт тыуған ере менән ҡыҙыҡһына, унда ҡайта алмауына көйөнә. 1917 йылда көтмәгәндә тарихи ваҡиғаларға ҡушылып китә һәм мөһим сәйәси мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ҡатнаша.

Мөхәмәтхан Ҡулаев автономиялы республика иғлан ителеүе тураһында ишеткәс тә, 1917 йылдың аҙағында милләттәштәренә былай тип телеграмма һуға: "Ырымбур. Башҡорт өлкә советы рәйесе Манатовҡа. Башҡортостан улдарына ҡушылам һәм милләттәштәремә үҙ халҡын уңышлы берләштереүен теләйем. Мстислав Ҡулаев. Дарница. 275-се госпиталдең баш табибы". Был хәбәрҙе алғас, ул ваҡытта үҙ янына рухлы, үҙ халҡына тоғро кешеләрҙе туплаған Әхмәтзәки Вәлиди тиҙ генә яуап хаты яҙып ебәрергә ҡуша. Оҙаҡламай Ҡулаевҡа телеграмма килә: "Һеҙҙе кисекмәҫтән Ырымбурға Башҡортостан Хөкүмәте эшендә ҡатнашырға саҡырам. Башҡортостан Хөкүмәте рәйесе Бикбауб". Ҡулаев 1918 йылда госпиталдән отпусҡыға сыға һәм Ҡаҙанға ҡайта. Артабан тыуған яғына юллана. Мөхәмәтхан Сәхипкирәй улы башҡолло Башҡорт хөкүмәте эшенә сума. Әхмәзәки Вәлиди етәкләгән Башҡорт революцион-хәрби советының ни тиклем хәүефле шарттарҙа эшләүен аңлай. Табиб ҡына булып ҡалмай ул, башҡорт ғәскәре өсөн санитар төркөмдәр ҙә әҙерләү менән шөғөлләнә. Башҡорт хөкүмәте Баймаҡта, Темәстә, Стәрлетамаҡта эшләгән ваҡытта Ҡулаев Ырымбурҙа ҡала. 1919 йылдың 26 мартынан ул Башҡорт хөкүмәтенең рәйесе итеп һайлана. Был турала ул үҙе бына нимә тип яҙып ҡалдырған: "Мин башҡорт хөкүмәте рәйесе булып киттем. Ҡыш көнө, декабрь айында хөкүмәт большевиктар менән һөйләшеүҙәр үткәрергә ҡарар итте. Дөйөм ҡарарҙан һуң мин большевиктар яғына сығыуҙы хупланым. Бының өсөн Өфөгә, унан Сембер ҡалаһына юлландым, артабан Мәскәүгә барып, башҡорт ғәскәренең большевиктар яғына сығыуын һәм башҡорт хөкүмәтен үҙгәртеү процедураһын тамамланым".

**Зилә НИҒМӘТУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**


№ 1
ОСНОВЫ ЗВУКО-ПРОИЗНОШЕНІЯ
и
АЗБУКА ДЛЯ БАШКИРЪ.
Докторъ М. А. Кулаевъ.
КАЗАНЬ.


ПРАВИТЕЛЬСТВО БАШКУРДИСТАНА
№ 67.
8 февраля 1919
дер. Темясово.
УДОСТОВѢРЕНІЕ.
Дано сіе доктору Мстиславу Александровичу КУЛАЕВУ въ томъ, что онъ дѣйствительно состоитъ Председателемъ Правительства Башкиріи, что подписью и приложеніемъ правительственной печати удостовѣряется.
За ПРЕДСѢДАТЕЛЯ ПРАВИТЕЛЬСТВА,
Членъ
Секретарь


О глаголах башкирского языка
Башкирия!
Ни твой алтарь приношу я свой дар с искренностью дикаря.
Мстислав Кулаев.


М. А. КУЛАЕВ.
О ЗВУКАХ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Башҡортостандың тәбиғәт шарттары игенселек һәм малсылыҡ өсөн уңайлы булмаған таулы-урманлы райондарында башҡорттар элеккесә ҙур күләмдә урман кәсепселеге менән, әммә хәҙер ойошҡан рәүештә һәм яңы коллектив башланғыста, шөғөлләнә. Таулы-урманлы ауылдарҙа (Маҡар, Белорет, Бөрйән һ.б. райондар), ҡағыҙҙа булараҡ, ер участкалары сикле, һәр хужа баҡса өсөн 15-әр сутый ер участкаһына һәм шәхси малдарын көтөү өсөн көтөүлек ерҙәренә эйә. Бындай ауылдар халҡы ағас эшкәртеү сәнәғәт артелдәренә берләшә һәм колхоз уларға йыл һайын урман ҡырҡыуға махсус урын бүлә. Төҙ ағастар төҙәлөштә ҡулланылһа, кәкереләре - төрлө нәмәләр эшләүгә, ҡалғандары утынға китә.

Сәнәғәт артелдәренең күпселегенең үҙ ағас ярҙырыу цехы һәм оҫтаханалары бар. Уларҙа йыллыҡ планға бәйле төрлө көнкүреш ҡорамалдары: тәгәрмәстәр, сана табандары, дуғалар, саңғылар, йорт йыһаздары (өҫтәлдәр, ултырғыстар, мәктәп парталары, тумбочкалар, табуреттар, мәктәп таҡталары һ.б.) эшләнә. Төп иғтибар һалабаш әҙерләүгә һәм унан ҡаптар, септә, бура һәм бау әҙерләүгә бүленә. Һыҙырылған йүкә ҡайырыһын июндә һыуға һалып ебетәләр һәм ике айҙан һуң унан һалабаш һыҙыралар. Ҡалған ҡайыры йорт һәм ҡаралты ҡыйыҡтарын ябыуға китә.

Тимер иретеү заводтарына яҡын урынлашҡан промартелдәр сыбыҡтарҙан күмер ташыу өсөн алаптар үрә. Промартелдәрҙең бер өлөшө ыҫмала ағыҙа һәм дегет ҡайната. Атап үтелгән район башҡорттарының шәхси хужалыҡ кәсебе булып йүкә сәскәһен, ҡомалаҡ, муйыл емешен, сәрүәр орлоғон, тал ҡайырыһын йыйыу тора.

Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондарында кәзә мамығынан шәл бәйләү артелдәре бар.

Әлеге ваҡытта башҡорттар тукыусылыҡ, итек тегеү, күндән һауыттар әҙерләү менән шөғөлләнмәй.

Совет власы йылдарында металл эшкәртеүҙә һиҙелерлек үҙгәреш була. Әгәр XIX быуат һуңында - XX быуат башында башҡорт ауылдарында тимерлектәр һирәк күренеш булып, уларҙа иң ябай эштәр башҡарылһа, хәҙерге ваҡытта бөтөн ерҙә лә тимерлеге, слесарь һәм токарь цехтары булған яҡшы йыһазландырылған механик оҫтаханаларҙы осратырға мөмкин.

Һуғыштан алдағы биш йыллыҡтарҙа ҡайһы бер райондарҙа, бигерәк тә Башҡортостандың төньяғында, ауыл һәм колхоз-ара электр, гидро- һәм урындағы яғыулыҡта эшләүсе йыллыҡ станциялары төҙәлөшө киң ҡолас ала. Уларҙан алынған электр энергияһы йорттарҙы яҡтыртыу һәм машина-трактор станцияларының эшендә генә файҙаланылып ҡалмай, иген һуғыу ырҙындарында, иген таҙартыу урындарында һәм колхоздың ҡайһы бер ярҙамсы хужалыҡтарында ҡулланыла. Малсылыҡта урыны менән электр һауыу, автоэсергес һәм һарыҡтарҙың йөнөн автоҡырҡыу индерелә. Электр энергияһы менән бергә башҡорт ауылдарына кино һәм радио килә. Ауыл дауаханаларында электр дауалауы ҡулланыла башлай.

Аҙыҡ-түлек әҙерләү ысулдары һәм милли ризыҡтар һуңғы тиҫтә йылда ниндәйҙер һиҙелерлек үҙгәреш кисермәй. Традицион бишбармаҡ һаҡлана. XX быуат башына тиклем ҡайҙа ҡорот эшләгәндәр, шул урындарҙа артабан да эшләүҙәрен дауам итәләр, урман яғында әсемлек урынына асы бал ҡоялар, ялан яғында буҙа эшләйҙәр. Бары тик икмәк һәм шәкәр ҡулланыу ғына һиҙелерлек артҡан.

***✓ Федераль стандарттар туған телдәрҙе өйрәнеү, этномәҙәни ерлектә тәрбиә алыу хоҡуғын инҡар итмәй. Тимәк, мәктәптәрҙә туған тел, тормош һабаҡтары, Башҡортостан әҙәбиәте һәм тарихы дәрестәре лә үткәрелергә тейеш.***

**Башҡорт теле дәүләт статусына эйә булғандан алып, телебеҙҙе үҫтереү йәһәтенән бик күп эштәр атҡарылыуын танымау мөмкин түгел. "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы законыбыҙ бар, милләтебеҙҙе таныткан абруйлы шәхестәребеҙ, заманса ҡарашлы йәштәребеҙ ҙә байтаҡ. Кәрәк саҡта уларға таянабыҙмы, уларҙың ярҙамын тоябыҙмы? Ғөмүмән, телебеҙҙе яҡлау һәм һаҡлау өсөн ниндәй эштәр башҡарабыҙ? Ошолар хаҡында Белорет районының мәғариф системаһында эшләүселәр фекерен ишеттермәксе булдыҡ һәм һөйләшеүгә Белорет районының мәғариф идаралығы етәксеһе Марина Владимировна САРАНЦЕВАны, Белорет ҡалаһының 17-се гимназияһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Розалия Закир ҡыҙы ӘҠСӘНОВАны, Белорет педагогия колледжы уҡытыусыһы Мәҙинә Мөждәбә ҡыҙы СОЛТАНОВАны, 21-се мәктәп директоры Владимир Лукич КРИВОУСты әңгәмәгә саҡырҙыҡ.**

# ХАЛЫҠТЫ

## йәки уны яҡлау

**▸ Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары иңендә киләсәктә милләтебеҙҙең көсөн, йөҙөн күрһәткән, теленә битараф булмаған белемле шәхестәр тәрбиәләү бурысы ята. Бөгөн ошо бурысты нисегерәк үтәй улар?**

**Р. Әҡсәнова:** Башҡорт теле уҡытыусыһы үҙенең тел һағында тороусы көрәшсе икәнен яҡшы аңларға тейеш. 1991 йылдан алып рус мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытам. Республикабыҙ үҙаллылыҡ яулаған осорҙа аҙнаһына 3-әр сәғәт башҡорт теле уҡыта торғайныҡ. Хәҙер Федераль дәүләт мәғариф стандарттарына һылтанып, башҡорт теле дәрестәре һаны йылдан-йыл кәмей бара. 2015-2016 уҡыу йылында, мәҫәлән, VI, VII, VIII, IX кластарҙа ғына башҡорт теле дәүләт теле булараҡ өйрәнеләсәк. Башланғыс кластар, урта звеноның V класы, X-XI класс ситтә тороп ҡаласаҡ. Эштәр ошо йүнәлештә барғанда бер нисә йылдан һуң башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ уҡытылмаясағы яҡшы күҙаллана. Телде туған тел булараҡ өйрәнгән башҡорт балалары төркөмдәрендә лә хәл маҡтанырлыҡ түгел. Әлбиттә, бында бар бәләне Федераль стандарттарға ғына япһарыу ҙа ҙур хата. Ошондай ҡатмарлы осорҙа ла ҡайһы бер башҡорт теле уҡытыусыларының үҙ эшенә аҡса эшләү сығанағы булараҡ ҡына ҡарауы күңелде ҡыра. Үҙе ошо фәндән уҡытып та, балаларын башҡортса уҡытырға теләмәгән уҡытыусылар ҙа бар. Милләт, тел киләсәге хаҡында юғары трибунанан матур һүҙҙәр һөйләгән ҡайһы берәүҙәрҙең дә балаларын башҡорт телендә уҡытыуҙан баш тартыу миҫалдары бар. Шуға күрә, телгә һөйөү тәрбиәләү уҡытыусыларҙың ғына бурысы тип ҡарау һис тә дөрөҫ түгел.

**М. Солтанова:** Ысынлап та, беҙ бөгөн башҡорт телен уҡытыу өлкәһендәге проблемаларҙа уҡытыусыны ғына ғәйепләргә күнеккәнбеҙ. Ә бит нигеҙ ғаиләлә һалына. Тәрбиәне үҙеңдән башла, ти халыҡ. Әгәр ҙә ата-әсә өйҙә башҡортса һөйләшә, ғөрөф-ғәҙәттәрен хөрмәт итә икән, ошо мөхиттә үҫкән бала ла бер һүҙһеҙ уларҙың юлын ҡабатлай. Мәктәптә бала бары тик күңелендәге телһөйәрлек, илһөйәрлек орлоҡтарын үҫтерә, телдең халыҡты булдырыусы төп ҡорал икәнен нығыта, телмәрен грамматик яҡтан камиллаштыра ғына. Йәш быуынды тәрбиәләүҙә, милли үҙаң үҫтереүҙә, туған телгә һөйөү тәрбиәләүҙә иң тәүҙә ата-әсә яуаплы, шул уҡ ваҡытта ауыл хакимиәттәре, мәҙәниәт йорто хеҙмәткәрҙәре, район, ҡала башҡорттары ҡоролтайҙары, ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар ҙа был эштән ситтә торорға тейеш түгел.

**▸ Ҡайһы бер ата-әсә, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу баланың өлгәш кимәленә насар йоғонто яһай, ваҡытты ала, тип һанай. Уларҙың төп дәлилдәренең береһе - бөтә бала ла тел үҙләштереүгә һәләтле түгел, тип һанау. Әммә, алгебра, химия, хатта йыр, рәсем дәрестәре буйынса ла барыһы ла алдынғы түгел. Тик был йәһәттән береһе лә ҡаршылашмай ҙа, дәғүә лә белдермәй…**

**В. Кривоус:** Үҙ телеңде белмәү, унан баш тартыу енәйәткә тиң, тип һанайым. Бала ғына түгел, ололар ҙа ни тиклем күберәк тел белә, шул тиклем нығыраҡ үҫешкән, киңерәк ҡарашлы, тәрәнерәк фекерле була. Бер телде өйрәнеү икенсе телде өйрәнеүгә теләк тыуҙыра, этәреш бирә. Бары тик туған телде белеп кенә икенсе бер халыҡтың менталитетын аңлап, мәҙәниәтен хөрмәт итеп була. Бөгөнгө заман балалары быны яҡшы аңлай. Проблеманы барыһын да бала өсөн үҙе хәл итергә тырышҡан ата-әсә тыуҙыра.

Ысынлап та, Яңы федераль стандарттар буйынса уҡытыу башҡорт телен ҡыҫырыҡлауға килтерҙе. Бөгөн башҡорт теле урта звенола ғына ҡалды. Башланғыс һәм ҙур звеноларҙа ул бөтөнләй уҡытылмай. Баланың көсөнә ышанмауҙанмы, әллә инде артыҡ ҡурсаларға тырышыуҙанмы, милләте менән башҡорт булғандар ҙа туған тел өйрәнеүҙән баш тартып, ғариза тотоп килә. Ата-әсәләргә аңлатырға тырышабыҙ, тик һәр береһен өгөтләп ултырыу ҙа дөрөҫ түгел. Башҡорт теле һис һүҙһеҙ уҡытылырға тейеш. Бары тик мотлаҡ үтәлергә тейеш булған ныҡлы закон кәрәк.

**Р. Әҡсәнова:** Башҡорт теле яҡшы уҡырға ҡамасаулай, тип уйлау хата фекер. Мәҫәлән, минең ҡыҙым башҡорт телен беренсе кластан алып туған тел булараҡ уҡыны. Берҙәм дәүләт имтихандарын бер ҡыйынлыҡһыҙ тапшырып, Силәбе ҡалаһының Көньяҡ Урал дәүләт университетының механика-математика факультетына уҡырға инде. Бөтә нәмә үҙебеҙҙән тора. Ҡыҙыҡ өсөн күрше Татарстан менән сағыштырып ҡарайыҡ. Бөгөн башҡорт теле дәреслектәренә экспертиза үткәрергә аҡса юҡ, тип аңлатһалар, Татарстан был йәһәттән бөтә дәреслектәренә лә экспертиза эшләтеүгә өлгәшкән. Ысынлап та, аҡса юҡ, мөмкинлектәр һай икән, халыҡҡа мөрәжәғәт итергә лә була бит. Ҡасандыр Ырымбурҙа Каруанһарай һынлы Каруанһарай төҙөп ҡуйған халыҡ был юлы ла битараф ҡалмаҫ ине. Рөхсәт алыу өсөн хатта батшаның үҙенә барып еткәндәр бит. Милләте, теле өсөн янғандар бөгөн дә бөтмәгәндер, тигән ышаныс та бар әле. Башҡорт балаларын уҡытыу теләге менән Санкт-Петербург ҡалаһында тау училищеһы асҡан Исмәғил Тасимовты ла иҫкә төшөрөү насар булмаҫ. Уртаҡ ҡараштарҙы, фекерҙәрҙе берләштереп эш иткәндә әллә ниндәй мәсьәләләрҙе лә еңеп сығырлыҡбыҙ беҙ. Башҡорт телен уҡытыу буйынса бәхәстәр булырға ла тейеш түгел. Тел бөтһә, халыҡ бөтөүен аңлатып торорға ла кәрәкмәй.

**▸ Милләтебеҙҙең туған телде һаҡлауға һәм үҫтереүгә битарафлығы күңелде ҡыра. Саф башҡортса һөйләшкән йәштәребеҙ ҙә кәмей төҫлө. Күбеһе урыҫ һүҙҙәрен ҡушып һөйләшә, ә башҡорт телендәге ҡайһы бер һүҙҙәрҙең мәғәнәһен бөтөнләй төшөнмәй ҙә. Ниндәй ул бөгөнгө йәштәребеҙ? Телен беләме, тарихын олоҡлаймы, ғөрөф-ғәҙәттәрен һанлаймы?**

**М. Солтанова:** 25 йылдан ашыу студенттар менән эшләйем. Йәшереп тораһы түгел, беренсе курсҡа килгән студенттарҙың телмәр мәҙәниәте, интеллект кимәле ҡайһы берҙә аптырата ла. Ни тиклем генә ҡыҙғаныс булмаһын, буласаҡ уҡытыусылар ярым русса, ярым башҡортса һөйләшә, мәҙәниәт, тарих буйынса ябай ғына һорауҙарға яуап бирә алмай. Шул арҡала улар бер төркөмдә уҡыған рус милләтле студенттар араһында ла абруй яулай алмай. Әлбиттә, араларында рухлы, туған телендә иркен һәм матур һөйләшкән студенттар ҙа бар. Уларҙың был сифаты, әлбиттә, ғаиләнән килгән тәрбиә нигеҙе.

**Р. Әҡсәнова:** Йәштәрҙә телмәр мәҙәниәтен үҫтереү, уның бәҫен күтәреү өсөн халыҡ араһында абруй яулаған, белемле, вазифалы кешеләребеҙҙең өлгөһө кәрәк. 20 башҡорт араһында 1 сит милләт вәкиле ултыра икән, беҙҙекеләр мотлаҡ шул телдә сығыш яһай. Халыҡ алдында сығыш яһағандар үҙ фекерен русса ла, башҡортса ла аныҡ һәм матур итеп еткерә алыуын да күрһәтә белергә тейеш. Был йәһәттән профессорыбыҙ Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы Хисаметдинованы үрнәк итеп ҡуйыр инем. Телебеҙҙең абруйын күтәреү өсөн уның ниндәй эштәр башҡарыуын һанап тороу кәрәкмәйҙер. Бер нисә йыл элек ул Әбйәлил районының Рәхмәт ауылына бер төркөм төрөк егеттәрен килтергәйне. Егеттәрҙең халыҡ менән саф башҡорт әҙәби телендә аралашыуы ауылдаштар араһында ҙур һоҡланыу тыуҙырҙы. 5 йыл рәттән Санкт-Петербург ҡалаһынан Рәхмәт ауылына килеп, урындағы халыҡтың мәҙәниәтен, көнкүрешен, телен өйрәнгән студенттарҙың башҡорттарға ҡарап менән һоҡланыуҙарын, уларҙы тәрән фекерле, мәҙәниәтле, бай тарихлы тип билдәләүен иҫәпкә алһаҡ, халҡыбыҙҙы башҡалар алдында нисегерәк итеп күрһәтеү үҙебеҙҙән тороуын бәхәсһеҙ ҙә аңларға була. Шуға күрә теленә, тарихына һоҡланыу уятыу өсөн юғары вазифалы милләттәштәребеҙ йәштәрҙе үҙ артынан эйәртә белергә тейеш.

**▸ Милләттәштәребеҙҙең белеме, мәҙәнилеге туған халҡыбыҙҙың ысын йөҙөн, уның булмышын, башҡа милләттәр араһында тотҡан урынын билдәләй. Халыҡ үҙенең белемле кешеләре менән көслө, тип фекер йөрөтһәк, башҡорт телен уҡытыу буйынса проблеманы нисегерәк хәл итеп булыр ине?**

**М. Солтанова:** Урыҫ телле аудиторияға тырышып-тырышып башҡорт телен өйрәтәбеҙ. Халҡыбыҙҙың тарихы, мәҙәниәте менән таныштырабыҙ. Ләкин, әлегә уҡытыу системаһында билдәле бер аныҡ, камиллаштырылған система юҡ. Ошо сәбәптәр арҡаһында беренсе курсҡа килгән студенттар башҡорт телен артабан өйрәнеүгә ҡәнәғәтһеҙлек белдерә. Мин барыбер ҙә бер нәмә лә аңламайым, беҙ мәктәптә әкиәттәр генә уҡып ултырҙыҡ, йәиһә бары тик тәржемә генә яһаныҡ, тигәнерәк дәлилдәр килтерә.

Тағы шуныһын да әйтергә кәрәк, Яңы мәғариф стандарттары башҡорт телен ҡыҫырыҡланы, тибеҙ. Ә бит федераль стандарттар төбәктәрҙең үҙенсәлеген, туған телдәрҙе өйрәнеү, этномәҙәни ерлектә тәрбиә алыу хоҡуғын инҡар итмәй. Тимәк, мәктәптәрҙә шул уҡ туған тел, тормош һабаҡтары, Башҡортостан әҙәбиәте һәм тарихы дәрестәре лә үткәрелергә тейеш. Һис шикһеҙ, беҙ яңы стандарттарҙа ҡуйылған талаптарҙы үтәп еткермәйбеҙ.

**В. Кривоус:** Башҡорт телен уҡытыуҙан береһе лә баш тартмай. Мәҫәлән, беҙҙең гимназияла бының өсөн бөтә шарттар ҙа бар. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары өсөн айырым кабинеттар ҙа заманса итеп йыһазландырылған. Традицион рәүештә Башҡортостан мәҙәниәте, башҡорт кухняһы көндәре уҙғарабыҙ. Башҡорт телен уҡытыуға ҡағылған бәхәстәрҙе бөтөрөү өсөн республика Мәғариф министрлығы Рәсәй Мәғариф министрлығына сығып, был мәсьәләне законға таянып, аныҡ хәл итергә тейеш. Мәскәү менән килешмәйенсә, ыңғай һөҙөмтәләр булмаясаҡ. Көнбайыштан өлгө алырға кәрәкмәй. Беҙҙең үҙебеҙҙең Конституциябыҙ, дәреслектәребеҙ бар. Тағы ла ҡабатлайым, бары тик бөтәһе лә мотлаҡ үтәргә тейеш булған закон ғына етмәй. Быныһы инде теле, милләте өсөн янып йөрөгән, юғары вазифа билгән

***Аҡса юҡ, мөмкинлектәр һай икән, халыҡҡа мөрәжәғәт итергә лә була бит. Ҡасандыр Ырымбурҙа Каруанһарай һынлы Каруанһарай төҙөп ҡуйған халыҡ был юлы ла битараф ҡалмаҫ ине. Рөхсәт алыу өсөн хатта батшаның үҙенә барып еткәндәр бит. Милләте, теле өсөн янғандар бөгөн дә бөтмәгәндер, тигән ышаныс та бар әле. Башҡорт балаларын уҡытыу теләге менән Санкт-Петербург ҡалаһында тау училищеһы асҡан Исмәғил Тасимовты ла иҫкә төшөрөү насар булмаҫ. Уртаҡ ҡараштарҙы, фекерҙәрҙе берләштереп эш иткәндә әллә ниндәй мәсьәләләрҙе лә еңеп сығырлыҡбыҙ беҙ. Башҡорт телен уҡытыу буйынса бәхәстәр булырға ла тейеш түгел.***

✓ *Йоҡоһонда бик матур бер төш күрҙе. Имеш, күк йөҙө шундай аяҙ, һис бер болот әҫәре юҡ. Ай менән икеһе етәкләшеп ҡырҙа, гөл-сәскәле киң сәхрәлә йөрөйҙәр.*





Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ

# Ай

Хикәйә

Төнгө дежурҙан ҡайтып барған Салауат телеүҙәккә ҡәҙәр бара торған автобусҡа инеү менән артҡы рәттә ултырған асыҡ зәңгәр күлдәктәге сөм-ҡара сәсле сибәркәйгә иғтибар итте. Иғтибар итеү генә лә түгел, ҡаштары ҡарлуғас ҡанатылай ҡыйылып киткән мөләйем ҡыҙҙан күҙҙәрен бер талай ала алмай торҙо. Тик ҡыҙ уның үткер ҡарашынан унайһыҙланып, бешкән муйылды хәтерләткән күҙҙәрен аҫҡа йәшергәс кенә егет бер аҙ айнығандай булды. Инде университетты тамамлап клиник ординатурала уҡып йөрөгән, баҙнатһыҙ малай сағын бер-нисә йыл элек үк артта ҡалдырған егет ҡыҙ яғына үтте һәм уның янындағы буш урынға ултырырға булды. Башҡалар менән аралашып китеүгә әрһеҙерәк булған хирург халҡы вәкиле булараҡ, Салауат та һәүетемсә ҡыйыу ғына егет.

- Рөхсәт итегеҙ, һылыу, - тине тап-таҙа башҡорт телендә. Был ҡыҙҙың үҙ телендә һөйләшә башларында шиге лә юҡ ине.

- Я вас не понимаю, - тине йөҙөнә еңелсә алһыулыҡ йүгергән һылыуҡай урыҫ телендә, әммә үтә лә ныҡ акцент менән.

- Шундай матур башҡорт ҡыҙына үҙ телен белмәү килешеп етмәй, - тип ныҡыш егет үҙенекен итте.

- Мин һеҙҙе ысынлап та аңламайым, - тине ҡыҙ тағы ла ватаемерә урыҫсалап. - Һеҙ миңә башҡорт телендә өндәштегеҙме?

- Башҡа ниндәй телдә булһын? Мин, һылыу, һеҙҙең һымаҡ урыҫсаға әллә ни шәп түгелмен, - тип Салауат ҡыҙға бер аҙ "төрттөрөп" алмаҡ булды. Урыҫ һүҙҙәрен ныҡ боҙоп һөйләшкән был ҡыҙҙың ниндәйҙер төпкөл бер башҡорт ауылынан урыҫтар араһына тәүгә килеп, күптән түгел генә "цивилизация" телен үҙләштерә башлағанына шиге ҡалмаған егет артабан ҡыҙыйҙы ирештереүен дауам итергә ниәтләп һаман да башҡортса һүҙ ҡушып маташты.

- Ә һеҙ урыҫ телен белмәйһегеҙме әллә? - тине ҡыҙ ғәжәпләнгәндәй.

- Бер аҙ ғына һупалаштырам, - тине булды егет был юлы урыҫ теленә күсеп. - Тик бына үҙҙәре саф башҡорт була тороп та туған телендә һөйләшергә оялып йөрөгән яҡташтарыма аптырайым. Таныш булайыҡ, исемем - Салауат. Ә һеҙҙең исемегеҙ нисек?

- Ай, - тине ҡыҙ йылмайып.

- Бына шундай сибәр башҡорт ҡыҙының исеме лә шулай уҡ матур булырына һис шикләнмәгәйнем. Хатта бындай исемде тәүгә ишетеүем, - ҡыҙ менән башҡортса һөйләшеп алып китә алмауына инде өмөтөн өҙгән, кәйефе лә бер аҙ ҡырыла биргән егет тулыһынса урыҫсаға күсергә мәжбүр булды.

- Ә һеҙ мине башҡорт ҡыҙы икән тип уйланығыҙ, шулаймы? - тип йылмайҙы ҡыҙ тағы.

- А как же! - тине егет бер аҙ ҡыҙара төшөп, ни өсөндөр ҡыҙға бер аҙ үпкәләй ҙә башлағандай.

- Хаталанаһығыҙ, - тине ҡыҙ, инде телеүҙәккә килеп еткән автобустан төшөү яғына ыңғайлап.

- Ғәфү итегеҙ, - тине егет һәм ҡыҙ артынан эйәрҙе. - Татар ҡыҙы икәнегеҙҙе белмәнем, - егет артабан шаяртырға итте.

- Япониянан мин...

- ...

Шаңҡығандай бер аҙ һүҙһеҙ барғас, "Ғәфү итегеҙ, зинһар", тип ҡуйҙы Салауат. Матур туфлиҙары менән тыҡ-тыҡ баҫып тротуарҙан атлаған ҡыҙҙан ҡалышмай, университет яғына ыңғайланы.

- Ысын япон ҡыҙын тәү тапҡыр күреүем... Һеҙ башҡорт ҡыҙына бигерәк ныҡ оҡшағанһығыҙ...

- Өфөгә килгәс, курсташтарымдың береһе миңә шулай тип әйткәйне...

Һөйләшкән саҡта һәр һүҙен шундай матур йылмайыу менән оҙатҡан был ҡыҙҙан ниндәйҙер сихри нур балҡығандай тойолдо. Нимәһе менәндер ул яҙҙың йәмле көнөн матурлап, ҡояшҡа ҡарап рәхәтләнгән, күптән түгел генә бөрөләрҙән сыҡҡан саф япраҡлы йәш үҫентене хәтерләтте. Ҡалаҡҡа ғына һалып йоторлоҡ был һылыуҡай үҙе үк яҙғы ҡояштай тирә-яҡҡа йәм сәсеп барған һымаҡ тойолдо. Шундай ҡыҙҙың янынан, әлбиттә, тиҙ генә айырылып киткеһе килмәне егеттең. Тағы, тағы һүҙ ҡушып, ҡыҙ менән артабан да һөйләшеү теләге тыуҙы.

- Беҙҙә уҡып йөрөйһөгөҙмө әллә?..

Ҡыҙ үткән йыл Мәскәү университетының тарих факультетын тамамлап, хәҙер аспирантурала уҡып йөрөүе хаҡында әйтте. Ә Өфө ҡалаһына алты айға стажировкаға килгән икән. Кандидатлыҡ диссертацияһына материал туплаpға.

- Ай, - тип ҡабатланы Салауат ҡыҙҙың исемен. - Ҡалай матур исем! Беҙҙең башҡорт телендә лә бар ундай һүҙ...

- Башҡорт теленән урыҫсаға әйләндерһәң - "луна" тигәнде аңлатыуын беләм, - тип йылмайҙы тағы Ай. - Университетта минең менән бергә башҡорт ҡыҙы уҡыны. Ул әйткәйне. Ә һеҙҙең исемегеҙ милли геройығыҙ исеменән алынған икәнен дә беләм... Минең бында килеүем дә тигенгә түгел. Яҙасаҡ диссертациям Рәсәйҙең Урал тауы төбәгендә йәшәгән халыҡтары тураһында. Мин шәхсән Башҡортостанды һайланым. Шуға күрә лә башҡорт халҡының тарихын, динен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, мәҙәниәтен ентекләп өйрәнергә тырышам.

- Ә мин - хирург. Клиник ординатурала уҡып йөрөйөм.

- Уй, ҡалай яҡшы! Табиптарҙы мин бик хөрмәт итәм. Башҡортостандағы күҙ микрохирургияһының даны бөтөн донъяға таралғанын да беләм.

- Эйе, - тине егет ғорурлығын йәшерә алмай.

Бер ҡарауҙа һылыулығы менән әсир иткән ҡыҙҙан гипноз хәленә килгәндәй булды, ҡарашын унан айыра алманы. Айҙың һәр саҡ мөләйем йылмайыуы айырыуса оҡшаны уға.

- Мин килеп еттем инде, - тине Ай университеттың төп корпусы тапҡырында туҡтап. - Оҙатҡаныңғыҙ өсөн рәхмәт!

- Телефон номерыңды бирмәҫһеңме икән, һылыу? - тине Салауат, үҙе лә һиҙмәҫтән "һин"гә күсеп. Ҡыҙҙың күҙҙәренә моңһоу итеп ҡараны.

Ҡыҙ, һис бер ҡаршылашып тормаҫтан, егеттең телефонын алып, унда үҙенең номерын яҙҙы һәм "звонок"ка баҫты. Унан сумкаһында шылтыраған смартфонын алып, үҙе лә "Салават" тип яҙып ҡуйҙы.

- Кискә шылтыратһам, ҡаршы түгелһеңме?

- Шылтыратығыҙ, - ҡыҙ егеткә тағы матур йылмайыу бүләк итте.

- Ә "Ай" японсанан нисек тәржемә ителә ул?..

- Уныһы - сер, - тип ыңйы һымаҡ тигеҙ ваҡ тештәрен күрһәтеп йылмайҙы Ай. Бик тә килешле итеп нәфис ҡулын болғап, йүгерә-атлай университет корпусына инеп китте.

Салауат үҙе йәшәгән дөйөм ятаҡҡа ҡайтыу менән ноутбугын аса һалып, интернет селтәренә инде. Иң тәүҙә япон ҡыҙҙары исемлегенән "Ай" һүҙе ни аңлатҡанлығын ҡараны. "Мөхәббәт" тип уҡыны уның тәржемәһен. Ҡайһылай матур исем! Дауаханала керпек тә ҡаҡмай үткәргән дежур төнөндә ярайһы ғына ныҡ арығанын әле генә һиҙҙе ул. Ашыҡ-бошоҡ ҡапҡыланы ла, һаман да күҙ алдында матур йылмайып торған шул ҡыҙ тураһында уйлана-уйлана йоҡоға китте.

* * *

Йоҡоһонда бик матур бер төш күрҙе. Имеш, күк йөҙө шундай аяҙ, һис бер болот әҫәре юҡ. Ай менән икеһе етәкләшеп ҡырҙа, гөл-сәскәле киң сәхрәлә йөрөйҙәр. "Ай, ә һин оса беләһеңме?" - тип һорай Салауат. "Әллә, бер ҡасан да осоп ҡарағаным юҡсы", - ти ҡыҙ. "Әйҙә, осоп ҡарайыҡ", - ти егет һәм улар йүгереп барған ыңғайға еңел генә һауаға күтәрелә башлайҙар. Улар оса! Һаман да ҡулға-ҡул тотоношҡан көйө тап-таҙа зәңгәр күктә юғарыға күтәрелгәндән күтәреләләр. Ай шул уҡ зәңгәр күлдәктә, ап-аҡ тигеҙ тештәрен күрһәтеп матур итеп йылмая. Шундай рәхәт, тән һис бер ауырлыҡ та тоймай! Ай уға ниҙер әйткән һымаҡ, тик Салауат ҡыҙҙың тауышын ишетмәй, тик ул уға башҡортса өндәшкән һымаҡ тойола. Ай менән бергә осоуы бигерәк күңелле!..

Телефонына ниндәйҙер смс хәбәр килеп, Салауатты уятты. Шундайын да яҡшы төштө ҡарап бөтөргә бирмәне. Йәл... Душ аҫтында йыуынды ла, сәй ҡайнатып эсте. Сәғәт көндөҙгө ике лә булып киткән. Моғайын, Ай ҙа төшкө тәнәфескә туҡтағандыр. Салауат өҫтәлдә ятҡан телефонына үрелде.

- Алло, - йөрәккә ятып торған таныш тауыш ишетелде.

- Сәләм, - тине егет тә ирәбе генә. - Сәғәт нисәләрҙә эштән бушайһың?

- Бөгөнгә эш бөттө инде, - тине Ай.

- Шулаймы! - тип шатланды егет. - Әйҙә, кискә башҡорт филармонияһына барайыҡ. "Ҡарауанһарай" төркөмө бөгөн унда концерт ҡуя.

- Килештек, - тине ҡыҙ.

- Ярар, билет алғас та шылтыратырмын. Пока!

Ҡыҙ "Башҡортостан" ҡунаҡханаһында йәшәй икән. Салауат уны ишек алдында ҡаршы алды. Осҡан күбәләктәй еңел генә атлап, айҙай балҡып, теүәл үҙе тәғәйенләгән ваҡытҡа һуңламай ғына килеп сыҡты ҡыҙ. Бая иртәнсәк кейгән кейемендә булыуға ҡарамаҫтан, Ай был юлы тағы ла матурыраҡ булып тойолдо. Улар барған филармонияның концерт залы төрлө йәштәрҙәге тамашасылар менән тулы ине. Билеттарҙың да иң һуңғыһына тигәндәй өлгөрөп ҡалғайны Салауат. Йыйылған кешеләр барыһы ла Айҙы башҡорт ҡыҙы итеп ҡабул итте, ахырыһы. Салауаттың коллегаһы Айбулат ҡатыны менән килгәйне.

- Таныш булығыҙ - Мөхәббәт, - тип шаян йылмайҙы Салауат ҡыҙҙы дуҫтары менән таныштырып.

Уның был һүҙҙәренә, янындағы һылыу ҡыҙҙың эскерһеҙ йылмайыуын күреп, бер аҙ ғәжәпләнһәләр ҙә, Айбулат менән ҡатыны быға иғтибар итмәгәнгә һалышты.

- Мәрйәм, - тине Айбулаттың хәләл ефете танышырға ҡулын биреп.

- Ай, - тип йылмайҙы Ай.

- Ҡалай матур, мөләйем ҡыҙ менән танышып алғанһың, - тине коллегаһы ла Салауат менән хәл-әхүәл һорашҡас.

- Эйе, - тине Салауат, - исеме лә Ай бит уның.

Башына рауза төҫөндәге яулығын бик матур итеп бәйләгән, шулай уҡ үҙенә килешеп кенә тороп оҙон еңле күлдәк кейгән Мәрйәм Айға башҡортсалап ниҙер әйтә башланы.

- Япон ҡыҙы ул, Мәрйәм һылыым, - тине Салауат, - башҡортса бер ни ҙә аңламай...

"Бәй, шулай икән дә..." тине лә Мәрйәм урыҫсаға төшөп китте. Әллә ҡасандан белгән танышы һымаҡ, хатта әхирәтендәй итеп күреп алсаҡ башҡорт ҡатыны Айҙы ҡултыҡлап алды ла стенала эленеп торған портреттарға күрһәткәләп, ниҙер һөйләй-һөйләй, ситкәрәк алып китте.

- Башҡорт исемле японлар ҙа була икән, - тип ҡуйҙы Айбулат ҡыҙҙар яғына ҡарап.

- Һинең исемеңдәге "ай"ҙы аңлатмай ул, - тине Салауат, - "ай" һүҙе японсанан "мөхәббәт" тип тәржемә ителә.

- Әй, шулай тигән, - тип хәйләкәр йылмайҙы дуҫы. - Әллә мин бая үҙең "Мөхәббәт", тигәс, һинең сираттағы "керһеҙ мөхәббәтең"дер тип аңлағайным...

Айҙың "Ҡарауанһарай" егеттәре йырлаған һәр йырҙы бирелеп тыңлағанын байҡап ултырҙы Салауат. Уның берсә йылмайған, берсә һағышланған йөҙөн күреп, "Беҙҙең көйҙәрҙе оҡшата, ахырыһы", тип һөйөндө.

- Йә, нисек, концерт оҡшанымы? - тип һораны егет сыҡҡас та.

- Бик ныҡ оҡшаны! - тине Ай һаман тыңлаған йырҙарҙың тәьҫиренән арына алмай. - Үтә лә моңло йырҙар. Һүҙҙәре таныш булмаһа ла, мин уларҙы хатта аңлайым да һымаҡ...

- Миңә лә оҡшай был төркөм, - тине Салауат. - Уларҙың йырҙарын тыңлаған һайын күңелдә ысын башҡортлоҡ хистәре нығыраҡ уяна.

- Миңә, Салауат, һеҙҙең көйҙәрегеҙ нимәһе менәндер үҙебеҙҙең япон мондарын да хәтерләтә. Шул йырҙар араһында берәүһе хаҡында һорауым да бар. Беҙҙең японлар тураһында ниҙер йырланылар, буғай? Йыр араһындағы музыкаль оҙатыуына тиклем хәс тә беҙҙеке... - йылмайыуына ҡарамаҫтан, бер аҙ һағышлы тойолған күҙҙәре менән Ай егеткә баҡты.

- Ниндәй йыр икән ул? - тип үҙ-үҙенә һорау бирҙе лә, тәүҙәрәк Салауат бер аҙға тынып ҡалды. Унан кинәт ниҙер иҫенә төшкәндәй, көлөп ебәрҙе. Тирә-яғын байҡаштырып алды ла, улар китеп барған Ленин скверында кеше-маҙар булмауын күреп, ҡыҙға ҡарап, әркен генә йырлай башланы.

Японлар туп аталар,
Порт Артурҙы ваталар...

- Эйе, эйе, тап шул йыр, - тип егеттең уны аңлауына һөйөндө ҡыҙ.

- Рус-япон һуғышында ҡатнашкан беҙҙең милләттәштәребеҙ сығарған боронғо йыр ул...

- 1905 йылдағымы?

- Эйе, тап үҙе.

- Ә нимә хаҡында ул йыр? Тәржемә итеп һөйләп бир әле, - тине ҡыҙ егеттең күҙҙәренә ҡарап.

- Тәржемә итә башлаһаң - ҡурҡыныс ул, һинең һис шикһеҙ кәйефең бөтәсәк, - тине Салауат. Ни өсөндөр, йырҙың мәғәнәһенән ҡыҙға аңлатҡыһы килмәне.

- Әйт инде, зинһар өсөн, - тип үтенде ҡыҙ.

Нисек итеп шундай заттың һүҙҙәрен үтәмәйһең инде. Салауат йырҙың тәүге ике юлын тәржемә итте лә туҡтап ҡалды.

- Порт Артур өсөн һуғыш хаҡында уҡығаным бар, - тине Ай. - Ә артабан?..

- ...Береһе аяҡһыҙ, береһе ҡулһыҙ,

Тилмерешеп яталар...

- Уй, ҡалай ҡурҡыныс, - тине ҡыҙ.

- Эйе, йырҙың ул өлөшө күңелгә шом һала. Әммә был тарихи хәҡиҡәт...

Йөҙө етдиләнгән Ай бер аҙға ғына уйға ҡалғандай булды.

- Нимә етешмәй икән кешеләргә, ни өсөн улар бер ваҡытта ла татыу ғына йәшәй алмайҙар?..

- Шулай шул, - тип килеште Салауат кинәт кенә фәлсәфәгә төшөп киткән ҡыҙҙың һүҙҙәрен күтәреп.

- Беҙҙең Аллалар ҙа үҙ-ара килешә алмайҙармы икән әллә? - тип ярым шаяртып йылмайҙы тағы Ай.

- Аллаһ барыбыҙ өсөн дә берәү генә, - тине егет етди төҫ алып. - Япондарҙың аллаһы башҡа түгел.

- Ә һин Аллаға ышанаһыңмы?

- Аллаға беҙ барыбыҙ ҙа ышанырға бурыслы, - тине Салауат. - Сөнки Уға ышанмағандарҙы теге донъяла ҡаты яза көтә... Эйе, Аллаһ бер. Ә батшалар башҡа. Бына шулар арҡаһында, үкенескә, халыҡтар бер-береһе менән дошманлаша ла инде.

- Минең диссертацияла тотош бер бүлек һеҙҙең динегеҙгә арнала. Белеүемсә, башҡорттар Ислам динен тота?

- Тап шулай. Дини китаптар миндә күп ул. Һиңә лә бирермен. Башҡорт халҡының тарихы хаҡында ла китаптарым бар. Ә бына һинең илеңде яҡшы белеп етмәйем. Япон ҡыҙы менән танышырмын тип бер ҡасан да башыма килгәне юҡ ине. Японса бер генә һүҙ беләм...

- Ниндәй һүҙ ул?

- Ай. Башҡорт теленә әйләндергәндә - Мөхәббәт.

- Му-ха-бат... Ҡалай оҙон һүҙ, - тип йылмайҙы Ай, - беҙҙәге өс һүҙҙәй бар, әммә шундай матур яңғырай! Ой, Са-ля-уат, оҙаҡ йөрөп ташлағанбыҙ. Миңә ҡунаҡханаға ҡайтырға ваҡыт!

- Ысынлап та, - тине егет ҡулындағы сәғәтенә ҡарап.

Ҡунаҡхана ишеге алдына килеп еткәс, ҡыҙ егеткә йылмайып ҡулын бирҙе:

- Хуш бул, Са-ля-уат, - ҡыҙға был исемде әйтеү ауырыраҡ ине буғай.

- Хуш, Мө-хәб-бәт, - тине егет шаяртып. - Мин һине шулай тип атаһам, ҡаршы булмаҫһыңмы?

Ҡыҙ тағы йылмайҙы, "юҡ", тигәнде аңлатып, башын ғына сайҡаны. Ошо минутта уның матур йөҙө, ысынлап та, тулған айҙы хәтерләтте. Шулай ҡулға-ҡул тотошҡан килеш, башҡаса бер ни ҙә һөйләшмәй генә бер-береһенә ҡарашып бер аҙ торҙо улар.

- Хуш, - тип ҡабатланы Ай күпмелер ваҡыттан егеттән ҡулдарын айырып алып.

- Хуш, - тине Салауат. - Иртәгә йәкшәмбе көн, моғайын, ял итәһеңдер. Әйҙә, тағы осрашайыҡ.

Ярай, тигәнде белгертеп, баш ҡаҡты ҡыҙ...

Бүлмәһенә ҡайтып яткас та Ай оҙаҡ ҡына йоҡлай алмай ятты. Күмерҙәй ҡара күҙле, ҡалын ҡашлы, ҡыйыу сырайлы, яуырынтаҡ башҡорт егете уның күҙ алдынан китмәне. "Са-ля-уат", тип ҡабатланы ул тағы үҙ алдына...

**(Дауамы бар).**

## ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

**Яҙыусы һәр һорауға тапҡыр яуап бирә ала, яуабы менән уйландыра, сәмләндерә һәм ғәмләндерә торған кеше ул. Ошо рубрикала беҙ ҙә әҙиптәребеҙгә ябай булмаған һорауҙар биреп, уларҙың фәлсәфәүи фекерләүҙәрен тыңлап, аң һәм йөрәк төпкөлдәрен ҡуҙғытып алайыҡ, тинек. Тәүге әңгәмәгә билдәле шағирә Таңһылыу Ҡарамышева килгәйне (гәзиттең 29-сы һанында). Был юлы өс һорауҙы яҙыусы, журналист Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙға төбәйбеҙ.**



# ИЖАД ЮЛЫН ҺАЙЛАП БУЛАМЫ НИ?

➔ **Тормошоңда ижад юлын һайламаған булһаң, бөгөн үҙеңде кем итеп күрер инең?**

- Беренсенән, мин ижад юлын һайланыммы икән? Ни өсөн тигәндә, ижад юлын һөнәр һайлаған кеүек, "Ҡана, мин инженер, табип, яңғын һүндереүсе булайым әле" тип һайлап булмайҙыр ул. Әҙәбиәткә яҡын булмаған башҡа һөнәр кешеләренең ижадҡа килеүе лә шул хаҡта һөйләй. Ундайҙарҙың яҙған әҫәрҙәре барыбер ҙә тормошсанйраҡ, анығыраҡ, үҙенсәлеклерәк. Миҫалға, табип Чеховтың хикәйәләрен, архитектор Вознесенскийҙың шиғырҙарын, инженер Ғәйетбайҙың пьесаларын, зоотехник Шәрәфетдиновтың һәр жанрҙағы уңыштарын алырға була. Һуңыраҡ ижадҡа тотоноп, әле яҙыусылар ҡорона килеп инеп, "Колой кантон", "Бигылый" романдары менән беҙҙе һоҡландырып өлгөргән Спартак Ильясов Ауыл хужалығы академияһын тамамлаһа, Әхмәтзәки Вәлидизең Бөйөк Ватан һуғышынан һуң икенсе кеше исеме менән Башҡортостанға ҡайтып, кире китеүен фараз итеүсе Нияз Алсынбаев уҡып алған һөнәре буйынса тарихсы, һайлаған һөнәре буйынса журналист, йөрәк ҡушыуы буйынса яҙыусы-прозаик. Оҙаҡ йылдар ауыл мәктәбендә уҡытыусы булып эшләгән Фирүзә Абдуллина шиғырҙары ябайлығы, халыҡсанлығы, тәрәнлеге менән хайран ҡалдыра. Уның "Әсәйем һабаҡтары" циклы тотош философик трактатты тәшкил итә.

Икенсенән, ижад юлын һайлап булмайҙыр ул. Кем нисектер, мин, мәҫәлән, яҙмайынса булдыра алмағаным өсөн яҙам. Шуға күрә ниндәйҙер айырым бер жанрға йәбешеп тә ятмайым. Миңә жанр мөһим түгел, әйтергә теләгән фекер мөһимерәк. Тыуасаҡ балаһының енесен ата-әсә үҙ теләге буйынса һайлай алмай, бында ла шуның кеүек. Композитор ҙа күңелендә яраласаҡ моңдоң күңеллемеһағышлымы булыуын алдан планлаштыра алмай. Шиғыр ҙа үҙенән-үҙе яҙыла. Үҙе яҙылмаған шиғырҙы яҙһаң, ауырға ҡалмайынса бала тапҡан ҡатын кеүек булаһың. Йәғни ул "бала" ҡағыҙҙа бар, ә ысынында иһә - юҡ. "Йөрәктән сыҡҡан" менән "бармаҡтан һурылған" - икеһе ике нәмә. Тағы ла шуныһы: тән йоҡондо онотоп, шиғыр яҙыу өсөн бәләкәй генә бер образ, фекер, деталь дә етә. Шиғыр мөхәббәт кеүек, үҙеңде көсләп яратырып булмай.

Прозаға егәрлелек, үҙеңде эшкә егә белеү талап итәлә, мәкәләләрҙе иһә, унда күтәрелгән проблема тынғылыҡ бирмәгәне өсөн яҙам. Күптәр мине шағир итеп белә, ә һеҙ ышанаһығыҙмы-юҡмы, ошоғаса мин үҙемдең айырым шиғыр китабымды сығарғаным юҡ. Юҡ, яҙғандары китапҡа тулмаған өсөн тип уйлай күрмәгеҙ. Киреһенсә, шиғырҙарым һәм поэмаларым бер нисә китаплыҡ. Һуңыраҡ Фридрих Ницшенең бик ҡыҙыҡлы бер фекерен уҡыным. "Яҙыусы булырынан оялған ижадсы иң яҡшы автор" тиган ул. Ысынлап та, оятҡа ҡалыуҙан ҡурҡыу тойғоһоноң ниндәй көскә эйә булыуы хаҡында айырым китап яҙырға мөмкин булыр ине. Мин, мәҫәлән, бынан ун ете йыл элек үлемдән ҡурҡыуым арҡаһында эсеүемде ташланым. Был хаҡта китабым да сыҡты, һабаҡтарым "Киске Өфө"лә ике тапҡыр баҫылды. Ярай, һүҙ оҙонға китмәһен өсөн халыҡтың "Үлемдән оят көслө" тигән мәҡәлен иҫкә төшөрөп кенә торайыҡ. Мин, күрәһең, насар шиғыр яҙып, шағир булып иҫәпләнеүҙән ояламдыр, ҡурҡамдыр ул. Айырым шиғыр китабы сығарырға ҡабаланмауымдың тағы бер сәбәбе, Азамат Юлдашбаев әйтмешләй, "китап ваҡиға булырға тейеш" тигәнде аңлауҙыр.

Өсөнсөнән, миңә бик күп һөнәрҙәрҙе һәм ғәмәлдәрҙе башҡарырға тура килде. Һанаһаң, улар йөҙҙән ашып китә. Был хаҡта гәзиттең "Етмеш төрлө һөнәр" тигән рубрикаһында яҙып үткәйнем инде. "Хеҙмәт кенәгәм"дә тәүгә яҙылған һөнәрем - сабан. Мин башҡарған ҡайһы бер һөнәрҙәр замандың үҙе менән юҡҡа сығып, онотолған да инде. Әйтәйек, саҡмансы (сәкмәнщик, йәғни һарыҡтарҙы бәрәсләтеүсе), тапалайщик (машинаға силос, сенаж тейәгәндә тигеҙ итеп йәйеп тапалап тороусы), кантарщик (сәсеү ваҡытында сәскесте орлоҡ менән тултырып тороусы), прицепщик (тракторҙар бесән, һалам һөйрәткәндә йөктә тағып-ысҡындырып тороусы), штурвалщик (комбайнсы ярҙамсыны), шыкасы (тракторға тағылған бесән сапҡыстың өҫтөндә ултырып, агрегатты көйләп барыусы) һ.б. Мәктәптә уҡығанда физика фәнен яраттым. Быға физика уҡытыусылары Рәүеф Бикташев менән Нурмөхәмәт Байрамголов булышлыҡ итте. Атайым минең инженер булыуымды теләгәйне, шуға күрә ул мине ауыл хужалығы институтының механика факультетына уҡырға алып барҙы. Лирика физиканы еңде һәм мин филологияға күстем. Ижадсы булмаһам, хәҙерге ваҡытта, моғайын да, берәр ауылда фермер булып йөрөр инем.

➔ **Буранбай сәсән тураһында тарихи әҫәр яҙыуыңды беләбеҙ. Уның яҙмышы һине нимәһе менән тетрәндерҙе?**

- Яңыраҡ яҙыусы Ғәлим Хисамов миңә шылтыратып: "Утәбай Ҡотосовтоң Буранбай Ҡотосовтоң бер туған ҡустыһы икәнен беләһеңме?" - тип һораны. "Беләм, шуға күрә уның хаҡындағы әҫәрем өҫтөндә шәжәрәмде яҙғандай эшләйем", тинем. Ул Буранбай сәсән осорона ҡараған тарихи документтар аҡтарып ултырғанда шул фактҡа барып юлыҡҡан икән. Миңә документтарҙы ғалим, арҙаҡлы тарихсыбыҙ, мәрхүм яҡташым Әнүәр Әсфәндийәров табып бирҙе. Бала саҡтан мин тыуған ауылым Буранбайҙа халыҡ моңо мөхитендә үҫкәс, "Буранбай" йырының аһәңен ауылдаштарыбыҙҙың һәр тын алышы, өн-ауазы яңғырашында үҙемә һеңдерҙем. Һуңынан бер китабымда "Буранбай" йырының кешегә тәьҫире хаҡында шулай итеп яҙҙым да: "Шуны ла икеләнмәйенсә әйтә алам: йырҙың тәьҫир көсө яҙмыштарҙы, тотош ғүмер ағыштарын ҡырҡа борор, шатлыҡ һуҡмаҡтарына йүнәлтер ҡеүәттә. Был моңдо тыңламаған, тыңлаһа ла ҡабул итә алмаған кеше донъяла иң бәхетһеҙелер. Сөнки йыр бәхетһеҙлек хаҡында, ә бәхетһеҙлектә күрмәгән йәки аңламаған кеше хатта үҙ бәхетен дә тоймай һәм белмәй. Сөнки көйҙөң эскә мәғәнәүи яңғырашы, моң йөкмәткеһе тик изгелек, тик ғәҙеллек, тик хәҡиҡәт өсөн йәнен фиҙа ҡылған кешенең йән инрәүе, күңел һыҡтауы тураһында. Йырҙа кешелеккә ҡаршы ҡырҡа протест яңғырай: донъяға тик яҡтылыҡ, тик яҡшылыҡ өҫтәргә килеп тә, шул уҡ кешелектең үҙен шундайын ғазапҡа дусар итеүҙәренә ҡаршы протест белдереү. Үпкәләү ҙә, йәберһенеү ҙә түгел - ғәзелһеҙлеккә ҡаршы йөрәк ихтилалы. Был йырҙа халҡыбыҙҙың күңел торошо, фажиғәле яҙмышы бөтә тулылығында сағыла..."

Буранбайҙы, ниңәлер, үҙ ауылына ҡайтып, һөйөклө ҡатындары һәм ғәзиз балалары менән бергә ғүмер һөрә алмаған, ғүмер буйына ҡаҙаҡ далаларында, тыуған яғының урман-ҡаяларында ҡасҡын булып йәшәргә мәжбүр ителгән мәхлүк, бахыр кеше итеп күрергә теләйҙәр. Буранбай хаҡында материалдар, башҡа төрлө сығанаҡтар туплай торғас, шәхесенең тағы ла тәрәнерәк яҡтарын күрергә өлгөштем дә инде. Ул бер ваҡыта, күптәр күрергә теләгәндәй, "бығауҙарын сыңғыратып" Себерҙәрҙә йөрөмәгән, хатта унда барып та етмәгән, юлда ҡасып китеүгә өлгөшкән. Уның ынтылышы ҡоллоҡтан ҡотолоу түгел, ә ҡоллоҡ хәленә төшмәү булған. Ҡулына бығау һалғандарын теләмәгән ул. Күптәр Буранбайҙы 1812 йылғы Ватан һуғышы батыры итеп Париждарға алып барып еткерә, Ҡаһым түрә янында йөрөтә. Документтар бөтөнләй икенсене һөйләй: һуғыш башланырҙан теүәл бер йыл алда, 1811 йылда уҡ, уға ғәйепләү ташланып, суд эше һуғыш арҡаһында һуңғараҡ ваҡытҡа күсерелә. Буранбайҙың аҙаштары күп йөрәгәндәр ул һуғышта, әммә бында һүҙ Буранбай сәсән тураһында бара.

Буранбайҙың төрлө тарафта башҡа исемдәр аҫтында йөрөүенең дә сәбәбен таптым. Ул дәүерҙә Башҡортостанда урынлаштырылған кантонлыҡ режимы хәрби гарнизонды ла хәтерләткән. Йәғни кеше күрше кантонлыҡ еренә аяҡ баҫыу өсөн дә үҙ кантон башлығынан рөхсәт ҡағыҙы - справка алырға тейеш булған. Буранбайға яурҙар итергә теләгән, сәсәнгә тышҡы ҡиәфәте, күҙ, сәс төҫө менән оҡшаған күптәр үҙ исеменә рөхсәт ҡағыҙы алып биреп, сәсәнде үҙенең кантонлығына һыйындырып йәшәткән дә инде.

Документтар Буранбай Ҡотосовтың, Юлбарыҫ Бикбулатовтың, Ибраһим Айсыуаҡовтың кантон башлығы Аҡкол Биктимеровтың ҡушыуы буйынса халыҡтан аҡса йыйып үҙләштергәне өсөн хөкөмгә тарттырылыуы хаҡында һөйләй. Улар йыйылған аҡсаның бер тиненә лә теймәй. Тап шул ваҡытта батша указы буйынса буш ятҡан башҡорт ерҙәрен межалау башлана. Буранбай үҙ ауылының йәйләү ерҙәренә ауылдар һалдырып, уларға ауылындағы кешеләрҙе күсереп, ерҙәребеҙгә сит яттарҙың килеүенән, межалауҙан һаҡлап алып ҡала. Ошо рәүешле Буранбай йәшәгән Иҫке Кинйәбулат ауылынан бүленеп сығып, Яңы Кинйәбулат (хәҙерге Беренсе Эткол ауылының яртыһы, Ҡышлауар йылғаһының һул яҡ ярындағы өйҙәр), Манһыр, Ғәҙелбай (Шырмай), Фәйзулла (Шүрәле), Буранбай (Таналыҡ йылғаһы буйындағы ауыл хәҙер юҡ) ауылдары барлыҡҡа килә. Буранбайҙың өлгөнөнә башҡа старшиналар ҙа эйәрә. Буранбайҙы тап шуның өсөн эҙәрлекләү башлана. Аҡсаға бәйле мәсьәлә уны судҡа биреү өсөн һылтау ғына була.

➔ **Ҡатын-ҡыҙға хас булған ниндәй сифаттар һине нык аптырата?**

- Бер ниндәй өмөт, ышаныс ҡалмағанда ла ҡатын-ҡыҙҙың ире, балаһы, ғаиләһе өсөн үҙен ҡорбан итергә әҙер тороуы. Был сифат бигерәк тә мәрйәләрҙә һәм башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарында нығыраҡ сағыла. Уларҙың бындай сифатының нигеҙҙәрен тик тарихта ғына табып булалыр, тием. Икенсенән, тәбиғәттә, йәмғиәттә, милләттә, ғаиләлә "көслө кеше" тигән вакант урын бар. Ул - ирҙәр урыны. Ҡатын-ҡыҙ бөгөн ул урынды ирекһеҙҙән көнөнән яуларға мәжбүр икәнен танығыйым, уларҙың ихтыяр көсөнә аптырайым, ул вакант урынды ысын ир-азаматтарҙың янынан үҙҙәренә ҡайтарып алыры тураһында хыяллана.

✓ *Халҡыбыҙҙың киләсәген хәстәрләү ир-егеттәр елкәһенә лә һалынған, ошо яуаплылыҡты ҡатын-ҡыҙҙар үҙ иңенә алып уҡ бөтмәһен ине. Ағинәйҙәрҙең төп бурысы - эште ойоштороп, яйға һалып ебәреү.*



ИНТЕРНЕТТАН



# УЛТЫРЫП ЭШЛӘҮ... зарарлы

■ Яңыраҡ "Diebetes Care" журналында яңы тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәләре баҫылып сыҡты. Унда әйтелеүенсә, диабет менән ауырығандарға туҡланыу режимын мотлаҡ күҙәтергә кәрәк. Тель-Авив университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, 2 типтағы шәкәр диабеты менән ауырыған кешеләр иртәнге ашты ашамаһа, уларҙың ҡандағы глюкоза кимәле иртәнге ашты ашаған көн менән сағыштырғанда, төш мәленә үк 37 процентҡа күтәрелә. Шәкәр диабеты сире мәлендә был ҙур әһәмиәткә эйә, ти ғалимдар, сөнки һуңғы мәлдә күптәр иртәнге ашты ашамай. Ғөмүмән, иртән яҡшы итеп ашап, кисе ашты еңелсә генә ҡапҡылаған кешеләрҙең ҡандарындағы шәкәр кимәле нормала була.

■ Иртәнге аш урынына печенье ҡушып ҡәһүә эсеүселәр ҙә дөрөҫ эшләмәй. Был сағында яҡшы кәйеф, мөһим ҡарарҙар ҡабул итеү һәләте ҡырҡа түбәнәйә. Иртән эшкә ас китеп, ябығып та булмай, ти белгестәр. Киреһенсә, кеше тағы ла нығыраҡ һимерәсәк. Көнө буйына үҙеңде насар тойоуҙың сәбәбе лә иртәнге ашты ашамауҙа булыуы бар. Баҡтиһәң, иртән уяныу менән ҡанда шәкәр кимәле былай ҙа түбән була. Ашамағас, организм шәкәрҙе башҡа урындан алырға мәжбүр була.

■ Барыһына ла билдәле, ултырып эшләү организм өсөн зарарлы. Австралия ғалимдары сәләмәтлек менән бәйле проблемалар булмаһын һәм тән һомғоллоғо юғалмаһын өсөн күпме ваҡыт аяҡ өҫтө торорға кәрәклеген иҫәпләп сығарған. Ике сәғәт офиста ултырғанға ҡарағанда аяҡ өҫтө тороу ҡандағы шәкәр кимәле һәм холестерин кимәлен яҡшыртҡан. Әгәр ҙә был ваҡытта атлап йөрөһәң, һөҙөмтәләр тағы ла яҡшыра. Тикшеренеүҙәрҙә 36-80 йәштәге 700 ир-ат ҡатнашҡан. Улар бер аҙна дауамында физик әүҙемлек мониторы йөрөткән. Кеше күпме ултыра, тора, йөрөй, ята - быларҙың барыһын да монитор теркәп барған. Дөйөм алғанда, тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар көнөнә 8,8 сәғәт ултырғандар, 4,9 сәғәт торғандар, 2 сәғәт йәйәү йөрөгәндәр. Юғары кимәлдәге физик әүҙемлек оҙайлығы 1,2 сәғәткә тиң булған. Асыҡланыуынса, өҫтәмә рәүештә 2 сәғәт кенә тороу ҙа алда әйтелгәнсә ҡандағы шәкәр һәм холестерин кимәлен төшөрөп ҡалмаған, тән ауырлығының массаһын 11 процентҡа, ә бил үлсәмен 7,5 см-ға кәметкән. Шулай итеп, аяҡ өҫтө эшләү май һәм глюкоза метоболизмына, шулай уҡ йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына ыңғай йоғонто яһай, ти ғалимдар.

■ Раш университеты ғалимдары яңы диета уйлап тапҡан. MIND диетаһы тип аталған был диета когнетив тайпылыштарҙы (хәтер, аҡыл ҡеүәһенең һәм башҡа когнетив функцияларҙың түбәнәйеүе) булдырмаҫҡа ярҙам итә. 4,7 йыл дауам иткән һынауҙарҙа 960 өлкән йәштәге кеше ҡатнашҡан. MIND диетаһын тотҡандарҙың баш мейеһе 7,5 йәшкә йәшерәк булып сыҡҡан. Йәғни, улар был тайпылыштар менән башҡаса туҡланыусыларға ҡарағанда һуңғараҡ осрашҡан. Диета 15 компонентты үҙ эсенә ала. 10 төркөм аҙыҡ-түлек - мейе өсөн файҙалы, ә 5 төрлө ризыҡтан - ҡыҙыл иттән, майлы аҙыҡтарҙан, фастфудтан, майҙан һәм маргариндан, тәм-томдан баш тартырға кәрәк. Ғалимдар билдәләүенсә, сәләмәт булырға теләгән кеше көн һайын 3 порция ярма, йәшел япраҡлы йәшелсәләр ашарға, бер бокал шарап эсергә тейеш. Ҡапҡылап алыу өсөн сәтләүектәр ҡулланылһын. Борсаҡ кеүек ҡуҙаҡлыларҙы көн аша ашарға кәрәк. Шулай уҡ аҙнаһына ике тапҡыр ҡош ите, еләктәр, балыҡты аҙнаһына бер тапҡыр булһа әҙерләү мөһим. Бынан тыш, көнөнә 1 балғалаҡ аҡ май рөхсәт ителә. Сырға килгәндә, ул көнөнә 1 порциянан артыҡ булырға тейеш түгел.

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

**Әбйәлил районы ағинәйҙәре был юлы Таштимер ауыл биләмәһендәге "Ғимран ташы" тип исемләнгән ҡая таш янында йыйылды. Ҡыҙыу эш ваҡыты булыуға ҡарамаҫтан, бер аҙ ғына ял итеп, кәңәшләшеп, фекер төйнәп, йыл буйы эшләнгән эштәргә йомғаҡ яһап ҡайтыу ине ниәттәре. Уларҙың туплаған тәжрибәһе, һис шикһеҙ, башҡалар менән дә уртаҡлашырлыҡ, шуға ла әбйәлилдәр ҡорона Учалы, Белорет, Хәйбулла ағинәйҙәре лә саҡырылды.**

# ДОНЪЯ ДИЛБЕГӘҺЕН...

## аҡһаҡалдарға тапшырырға әҙерҙәр

Гөрләшеп, ғәҙәттәгесә сағыу милли кейемдәрҙә килеп төшкән ҡунаҡтарҙы Таштимер ауыл биләмәһе ағинәйҙәре, биләмә башлығы Гөлшат Йәркәева ҡаршы алды. Ҡорҙоң программаһы буйынса, йыйылыусылар иң тәүҙә тауға артылырға тейеш ине. Ойоштороусылар Рәйлә Хафизова һәм Ғәлиә Ҡаһарманова башта "Ғимран ташы"ның, Ҡанлы бил тауының һәм ошо уҡ исем менән аталған кескәй генә таҙа һыулы йылғаның тарихын бәйән итте. Был атамалар башҡорттарҙың үҙ ерҙәре өсөн ҡаҙаҡтар менән аяуһыҙ алышы тураһындағы тарихҡа бәйле икән. Риүәйәттәрҙә һөйләнеүенсә, башҡорттар ҡаҙаҡтарҙың ҙур ғәскәренә ҡаршы тора алмайынса сигенеп, ошо ҡая-ташлы, текә һәм ҡуйы урманлы тауға килеп һырынған. Эҙәрлекләп килгән дошман ҡулынан байтаҡ ир-егеттәребеҙ ҡырылған. Түгелгән ҡандан йылға ҡыҙыл төҫкә ингән хатта, бына шуға ла был урын "Ҡанлы бил" тип аталған. Йылға тау башындағы бәләкәй күлдән инеш алып, шарлауыҡ булып ағып төшә. Был йылғаның һыуы йыл буйына яҡынса бер үк температура һаҡлай, унда сумып сыҡҡан кеше йыллыҡ сырхауҙарынан арынып, тәненә сихәт ала икән... Ошондай фәһемле тарихтарҙы тыңлай-тыңлай, "Ғимран ташы" ҡаяһына дәррәү күтәрелде ағинәйҙәр. "Иҫ киткес мөғжизәле лә, һоҡланғыс та тәбиғәт ҡосағында йәшәйбеҙ. Ләкин донъя мәшәҡәттәренән арынып, ауылыбыҙ эргәһендәге тауҙарға артылып, тирә-яҡты байҡарға, күлдәребеҙҙә, йылғаларыбыҙҙа бер йөҙөп сығырға ла ваҡыт таба алмайбыҙ шул". Тауға артылғанда әленән-әле шулай тип үкенес белдереүҙәр салынды ҡолаҡҡа. Әммә ағинәйҙәр, халыҡ әйтмешләй, үкенестең үсен ҡандырҙы. Ҡаялы тау башында өймәкләшеп ултырып хәбәрен дә һөйләште, йырланы ла, мөнәжәт тә әйтте. Иң ҡыҙығы: ағинәйҙәр уратып ултырған тар ғына ерҙә, ярты метрҙай ғына майҙанда, рәхәтләнеп, кинәнеп бейеп тә күрһәтте Салауат ауылы мәктәбе уҡытыусыһы Рәйлә Хафизова. "Быны бары тик беҙҙең башҡорт ҡыҙҙары ғына атҡара ала!" тип һоҡланды йыйылыусылар.

Тауҙан төшкәс, Таштимер биләмәһе хужабикәләре ҡунаҡтарҙы үҙҙәре әҙерләгән табын артына саҡырҙы. Бишбармаҡ ашаған, сәй эскән арала ағинәйҙәр үҙ-ара аралашты, ҡунаҡтарҙың сығыштарын тыңланы. Әбйәлил районы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Роза Вәли ҡыҙы Таһирова үҙҙәре алып барған эшкә ҡыҫҡаса йомғаҡ яһаны, әүҙем эшләгән ағинәйҙәргә Әбйәлил районы башҡорттары ҡоролтайының маҡтау ҡағыҙҙарын тапшырҙы. Ҡотлауҙарҙы Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты эргәһендәге "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева дауам итте, шулай уҡ маҡтау ҡағыҙҙары һәм бүләктәр менән ҡайһы бер ағинәйҙәрҙең тырышлығын, әүҙемлеген билдәләп китте.

- Ағинәйҙәр алдына шундай ҙур бурыс ҡуйылған: һеҙ халҡыбыҙҙың йолаларын тергеҙеүселәр, йәмғиәтебеҙҙә таралған эскелек кеүек яман ғәҙәттәргә ҡаршы көрәшеүселәр, ауылдарыбыҙҙың сәләмәт мөхитен, тәбиғәтебеҙҙе һаҡлаусылар, йәш быуынды тәрбиәләүселәр, - тине Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы. - Ошо бурыстарҙы атҡарыу буйынса һеҙ, Әбйәлил районы ағинәйҙәре һәм һеҙҙең етәксегеҙ Роза Вәли ҡыҙы Таһирова - республикала иң әүҙем эшләүселәр. Хәйбулла, Баймаҡ, Белорет, Учалы ағинәйҙәре лә һеҙҙән ҡалышмай. Артабан да тәжрибәләрегеҙ менән уртаҡлашып, үҙ-ара аралашып йәшәһәгеҙ ине. Һеҙҙең бына шулай үҙегеҙ белеп, үҙегеҙҙең күңел талабы буйынса башҡарған эштәрегеҙ киләсәктә йәмғиәтебеҙҙең зарури бер күренешенә әйләнеп, ауылдарҙы һаҡлап ҡалыуға үҙенең тос өлөшөн индерәсәк икәненә иманыбыҙ камил. Урындағы етәкселәр ҙә һеҙҙең улар ҡулы етмәгәнде эшләүселәр, уларға төп ярҙамсылар икәнде таный башлар, инициативаларығыҙҙы хуплап, күтәреп алыр икәненә ышанайыҡ...

Ағинәйҙәр ҡорона баш ҡаланан танылған яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева ла килгәйне. Ул республикала ағинәйҙәр хәрәкәтенең әүҙем таралып китеүенә ҡыуаныуын белдерҙе.

- Халҡыбыҙҙың киләсәген хәстәрләү ир-егеттәр елкәһенә лә һалынған, ошо яуаплылыҡты ҡатын-ҡыҙҙар үҙ иңенә алып уҡ бөтмәһен ине, - тине Мәрйәм апай. - Ағинәйҙәрҙең төп бурысы - эште ойоштороп, яйға һалып ебәреү. Үҙ баһағыҙҙы белегеҙ, бәҫегеҙҙе төшөрмәгеҙ. Әсәләр - милләт тотҡаһы, һеҙгә ғаилә мәктәбен тергеҙеү буйынса бик күп эштәр башҡарырға кәрәк. Бөгөн беҙ, мәктәптәр ябыла, тип илайбыҙ ҙа ултырабыҙ, ләкин элек башҡорт халҡы дөйөм мәктәптәрҙә уҡымаһа ла бик белемле, зыялы булған. Әгәр ҙә беҙ, атаәсәләр, балаларыбыҙҙың туған телде белеүен төп бурыс итеп ҡуймаһаҡ, ауылдарҙы, милләтте һаҡлап ҡалыуға мәктәптәр генә ярҙам итмәҫ...

Артабан билдәле табип Ишмырҙа Һиҙиәтовтың ҡатыны Венера Фәрит ҡыҙы телмәр тотто. Ул ағинәйҙәрҙе ир-егеттәребеҙҙе заман афәте булған эскелектән йолоп ҡалырға саҡырҙы. Йор һүҙле сәсәниә Вәсилә Садиҡова ҡатын-ҡыҙҙарға шул арала ижад итеп өлгөргән шиғри юлдарын уҡып ишеттерҙе:

*- Ағинәйҙәр һеҙгә әйтәм,*
*Ил тотҡаһы ирҙәр ҡайҙа?*
*Донъя ҡалһа ҡатын-ҡыҙға,*
*Янып әйләнмәҫме ҡуҙға?*
*Дилбәгәне тотһа улар,*
*Кәрәк саҡта ҡаҡһа ҡулдар,*
*Ил намыҫы - ир намыҫы.*
*Ирһеҙ ҡалһаҡ Алла ҡарғар!*

**(Дауамы 16-сы биттә).**



*Әбйәлил ағинәйҙәре.*

КИТАБЕННӘС

# АҢЫҢДЫ УЯТ,

## йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында




**Ливан яҙыусыһы Хәлил Джебрандың "Бәйғәмбәр" исемле был китабы XX башында донъя күргән. Китап бынан ике быуат элек яҙылһа ла, ундағы фекерҙәр уҡыусы күңелендә шаңдау таба, аңды яҡтырта. Үҙегеҙ уҡып ҡарағыҙ.**

### "Беҙгә азатлыҡ тураһында бәйән ит", тигән халыҡ араһынан берәү…

"Ҡала ҡапҡалары янында ла, өйөгөҙҙәге усаҡ эргәһендә лә, азатлыҡ һорап, ҡулдарығыҙҙы һуҙып, йөҙтүбән ятҡанығыҙҙы йыш күрҙем, - тигән Бәйғәмбәр. - Ҡолдар ҙа, нәҡ шулай, ҡулын һуҙа, уның арҡаһында яфа сикһә лә, уны маҡтай. Затлы һарайҙар эсендә йәшәгәндәр ҙә, ҡолға ҡулләгәһендә үҙҙәрен иң азат һанағандар ҙа азатлыҡты муйынса йә ҡулдағы быҡау кеүек тағып йөрөй. Азат булыу теләге ғәҙәткә әйләнеп, тик Азатлыҡ ҡына йәшәүҙең төп мәғәнәһе икәнен онотҡанығыҙҙы күреп, йөрәгем әрней. Көндәрегеҙ - ғәм, төндәрегеҙ теләк һәм һағыныу менән тулышҡанда ғына асын мәғәнәһендә азат булырһығыҙ. Тормош ығы-зығыһынан ҡотолоп, быҡауҙарығыҙҙы сисеп ташлаһағыҙ, яланғас булһағыҙ ҙа, азат булырһығыҙ.

Әммә донъяны танып-белә башлағандан бирле киләсәгеген ҡоршау эсенә бикләгәндәр сынйырҙан ысҡына аламы икән? Сөнки һеҙҙенсә азатлыҡ тип аталған азатлыҡ ысынында - быҡау. Тулыһынса азат булыр өсөн иң тәүҙә "Мин"егеҙҙе онтарға тура килер. Ғәҙел булмаған закондарҙы юҡҡа сығарыр алдынан уйланығыҙ: был закондарҙы һеҙ үҙ ҡулығыҙ менән үҙ маңлайығыҙға үҙегеҙ яҙғанһығыҙ. Бөтөн закондар китаптарын яндырған хәлдә лә, улар судьяларҙың мейеһендә ҡаласаҡ. Маңлайығыҙҙағы үҙегеҙ яҙған закондарҙы йыуыу өсөн хатта диңгеҙ һыуы ла аҙ булыр. Тиранды властан мәхрүм итергә йыйынһағыҙ, тәүҙә ҡарағыҙ: күңелегеҙҙәге хаким тәхете емерелгәнме? Әгәр күңелегеҙҙәге азатлыҡ тиранһыҙ йәшәй алмаһа, ғорурлыҡ урынына оят оялаһа, тиран үҙҙәрен азат һәм ғорур һанағандар менән дә бик енел идара итә. Әгәр ҙә берәй уйҙан ҡотолорға теләһәгеҙ, белегеҙ: уй һеҙҙең башта тыуған, икенсе кеше тарафынан һалынмаған. Ҡурҡыуҙан азат булырға теләһәгеҙ, иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ҡурҡыуҙың ояһы һеҙҙең йөрәктә, ә һеҙҙе ҡурҡытҡан кешенең ҡулында түгел".

**Исмәгзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

ЭТИКЕТ

# ҠЫЛЫҠТАРЫҢА - ТӨҘӘТМӘ,

## йәғни сәскә бүләк итә беләһеңме?

**Матур сәскә гөлләмәһе бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы берәүҙәр уйлағанса, сәскәне бары тик ҡатын-ҡыҙҙарға ғына бүләк итеү ҙә ҡаралмаған. Был гүзәл иғтибар билдәһенә һәр кем лайыҡлы - балалар ҙа, абруйлы ир-уҙаманы ла. Ләкин сәскә бүләк итеү урынлы һәм ситуацияға тура килгәндә генә иҫтә ҡалырлыҡ күренеш буласаҡ. Түбәндә сәскә гөлләмәһе бүләк итеү этикетына күҙ һалып үтәйек.**



● Ҡыҙҙарға гербер, роза һәм башҡа ошондай нәфис һәм күркәм сәскә гөлләмәләре бүләк итеү ҡаралған. Розаларҙы, ғәҙәттә, бөрөлә көйөнсә йәки ныҡ асылып етмәгәнен бүләк итеү яйлы.Төҫтәргә килгәндә иһә, сәскәләр ап-аҡтан алып ҡуйы ҡыҙыл булырға мөмкин. Шулай ҙа йәш ҡыҙҙарға сәскә һайлағанда алһыу кеүек нәфис төҫкә өҫтөнлөк биреү урынлы булыр. Ә урта йәштәге ҡатын-ҡыҙға орхидея, хризантема, лилия йәки асылған роза сәскәләре бүләк итеү матур күренеш буласаҡ. Оло йәштәге ҡатын-ҡыҙҙарға сәскә һайлағанда айырыуса иғтибарлы булырға кәрәк. Уларға ап-аҡ төҫтәге, шулай уҡ бәләкәй генә гөлләмәләге сәскәләр түгел, ә ромашка, күк сәскә (василек), астра һәм георгин кеүектәрҙе һайлағыҙ. Әйткәндәй, кешене хаҡлы ялға оҙатҡанда уға ҡыҙыл төҫтәге сәскәләрҙән төҙөлгән гөлләмә бүләк итеү ҡаралған.

● Әгәр ҙә сәскә эшлекле ханымға йәки хеҙмәттәшегеҙгә тәғәйенләнгән булһа, гөлләмәнең артыҡ пафослы һәм семәрле булмағанын һайлағыҙ - күңелгә ятышлы, ләкин тотанаҡлы композиция булһын. Иң яҡшыһы - гөлләмәне түңәрәк йәки дөрөҫ булмаған формала төҙөү. Гөлләмәне биҙәүҙә ялтырауыҡ әйберҙәр ҡулланыу ҙа артыҡ буласаҡ. Сәскәләрҙең альстромерия, малюцелла, дельфиниум, эустома, гербер, матрикарий, сирень, ҡыуаҡлы роза, тюльпан, антуриум кеүектәрен бүләк итеү урынлы буласаҡ.

● Туғандарға, яҡын дуҫтарға һәм яҡшы таныштарға сәскә һайлағанда бүләк итеүсенең ул кешегә ҡарата булған мөнәсәбәте асыҡ сағыла. Шуға күрә композиция, тәү сиратта, һеҙҙең бүләкте алыусыға булған йылы тойғоҙҙо, һөйөүегеҙҙе, рәхмәтегеҙҙе, тәрән ихтирамығыҙҙы, дуҫлығығыҙҙы асып бирергә тейеш. Мәҫәлән, балаларға бәләкәй генә, түңәрәк формала төҙөлгән төрлө төҫтәге сәскәләрҙән торған һәм шатлыҡ өләшкән гөлләмә бүләк итергә мөмкин. Һеңлеләрегеҙгә фиалка, ромашка һәм гвоздиканан торған композиция ярап ҡалыр.

● Әсәйегеҙгә тәғәйенләнгән сәскә гөлләмәһен, тәү сиратта, уның нин-дәй сәскәләрҙе үҙ итеүен һәм яратыуынан сығып һайлағыҙ. Сәскәне тапшырғанда мотлаҡ йылы һүҙҙәр ҡушып әйтергә кәрәк.

● Атайығыҙҙы ҡотлағанда бер тондағы оҙон һабаҡлы эре сәскәләр - пион, гиацинт, гвоздика, хризантема - урынлы буласаҡ. Төрлө оригиналь композициялар эшләү ҡамасауламаҫ. Гөлләмәне артыҡ ҡатмарлы итмәҫкә кәрәк, тик шул уҡ ваҡытта бер генә бөртөк сәскә бүләк итеү ҙә дөрөҫ булмаҫ. Ир-атҡа, ғәҙәттә, юбилей, ниндәйҙер иҫтәлекле ваҡиғаны йәки даталы билдәләгәндә сәскә бүләк итәләр.

● Яҡын кешеләргә һауыт эсендә үҫеп ултырған сәскә бүләк итеү насар тон һанала. Бүләк ителәсәк сәскә мотлаҡ ҡырҡылған булырға тейеш.

● Яратҡан артист йәки йырсыға сәскә һайлағанда, тәү сиратта, үҙегеҙҙең кеҫә ҡалынлығына ҡарағыҙ. Шулай уҡ кемгә нәфис һәм ҙур булмаған, ә кемгә иһә ялан йәки ғәҙәттәге затлы сәскәләр ярауын да күҙ уңынан ысҡындырмағыҙ. Мәҫәлән, абруйлы ир-атҡа йәки оло йәштәге артисҡа бәләкәй генә гөлләмә бүләк итеү килешмәй, ә йәш сәхнә йондоҙона әллә ни ҙур булмаған гөлләмә биреү ҙә хилаф булмаҫ.

● Рәсми вазифа биләүсе ҡатын-ҡыҙға ла сәскә бүләк итеү ҡағиҙәләре бар. Бындай осраҡта, тәү сиратта, күҙгә бәрелеп торған сифатһыҙ, осһоҙ төргәктән баш тартығыҙ. Сәскә гөлләмәһе бөхтә һәм етди булырға тейеш. Икенсенән, тыныс төҫтәге, артыҡ сағыу булмаған сәскәләргә өҫтөнлөк бирегеҙ. Өсөнсөнән, гөлләмәнең формаһын һәм ҙурлығын дөрөҫ һайлағыҙ - ул артыҡ ҙур ҙа, шул уҡ ваҡытта бик бәләкәй ҙә булмаһын. Дүртенсенән, был осраҡта георгин, пион, йондоҙ сәскәһе (астра), ирис һәм ялан сәскәләре бүләк итеү ҡаралмаған.

● Дауаханала ятыусыға сәскә алып барғанда айырыуса иғтибарлы булырға кәрәк. Мотлаҡ рәүештә уның яратҡан сәскәләрен алырға тырышығыҙ. Шулай уҡ алып барған сәскәләрегеҙҙе ҡуйыу өсөн һауыт та хәстәрләүегеҙ артыҡ булмаҫ - дауахана йыһаздары араһында сәскә өсөн тәғәйен вазалар булмай. Еҫе көслө һәм ҡырҡыу булған лилия, фрезия кеүек сәскәләр алып бармағыҙ.

● Бала тыуыуы һәр ғаилә өсөн иҫтәлекле һәм шатлыҡлы ваҡиға. Әгәр ҙә малай тыуһа, әсәй кешегә күк, зәңгәр йәки көрән күк, ә ҡыҙ тыуһа - ҡыҙыл йәки алһыу төҫтәге сәскәләрҙән торған гөлләмә бүләк ителә.

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Имен тормош фәлсәфәһе

### Ни өсөн эҙмә-эҙлекле булырға кәрәк?

Һәр кешенең тәртибен анализлағыҙ һәм уның ысын ҡиммәттәрен, тормош принциптарын табырһығыҙ - үҙе һөйләгәндәрен түгел, ә ысындарын. Икенсе төрлө әйткәндә, ғәмәлдә нимә эшләнә - шуға ғына ышанығыҙ, ҡалғандары - бары тик һүҙҙәр генә. Әгәр кемдер ғәмәлгә ярашлы эшләйем тип уйлай икән, һүҙе эше менән тап килә, тибеҙ. Был кеше имен тормошта йәшәй тигәнде аңлатмай, бары тик уның тормошонда һүҙҙәренең һәм ғәмәлдәренең эҙмә-эҙлеклеге күҙәтелә. Был яҡшы башланғыс - уға бары тик уңышҡа өлгәшеүгә йүнәлеш алырға ғына кәрәк.

Һәр кем, окшаймы ул беҙгә, юҡмы, ниндәйҙер үҙенең принциптары буйынса йәшәй. "Һине алдамаҫ элек, икенсе берәүҙе алдап ҡал", тигән нәмә лә, "алтын ҡағиҙә" лә принцип булыуы мөмкин. Шундай уҡ баһалама ҡиммәттәр өсөн дә ғәҙел; ҡайһы бер ир-атҡа - аҡыллы, фекерле, ярата белгән ҡатын-ҡыҙ, кемгәләр ҙур күкрәкле блондинка кәрәк. Ундай егеттәр шовинист тип әйтерһегеҙ, әммә уларҙың үҙ ҡиммәттәре булыуын инҡар итергә ярамай.

Һеҙ программаланыуға дусар булған мемдар ҡаҙерләгән ҡиммәттәрегеҙҙе, һеҙҙең менән етәкселек иткән принциптарҙы, шулай уҡ үҙ-үҙегеҙҙе тотошоғоҙҙо билдәләй. Мәҫәлән, әгәр: "Байҙар алдаша, һата һәм урлаша", - тигән мем менән зарланғанһығыҙ икән, бай кешеләргә ҡарата мөнәсәбәтегеҙ: "Мине улар файҙаланғанға тиклем, уларҙы файҙаланып ҡалырға кәрәк", - тигән принцип буйынса ҡорола. Был осраҡта һеҙҙең ғәҙеллек тигән ҡиммәтегеҙ булмаясаҡ, сөнки уны ҡулланыу әһәмиәтен күрмәйәсәкһегеҙ; уның ҡарауы, алдашыу сәнғәтен юғары баһалаясаҡһығыҙ.

Бында ҡапма-ҡаршылыҡ барлыҡҡа килә - ысынлап та, ни өсөн байҙар алдаша, һата, урлаша икәненә инанған кеше уларға оҡшарға тырышырға тейеш? Йәғни, аң бер нәмәне теләй, төпкө аң бөтөнләй ҡапма-ҡаршы йүнәлештә эш итә.

Шуға күрә, әгәр лайыҡлы йәшәргә һәм уңышлы булырға теләһәгеҙ, нимәгә ышанаһығыҙ, шуға - аныҡ тәртибегеҙ менән идара иткән принциптарға иғтибар итегеҙ. Әгәр ул принциптар юғары маҡсатҡа, бәхеткә табан барырға ярҙам итмәй икән, был эште эшләүгә һәр саҡ хоҡуҡлы булыу өсөн ниндәй үҙгәрештәр индерергә кәрәклеге хаҡында уйлағыҙ.

Шулай итеп, әгәр уңышлы булырға теләһәгеҙ, уңышлы булыу концепцияһы менән килешкән, йәғни ғәҙеллеккә һәм бер ҡиммәтте икенсеһенә алмаштырыуға нигеҙләнгән принциптарығыҙға ярашлы һайлау яһағыҙ.

Бөгөн беҙ бик ҡатмарлы заманда йәшәйбеҙ, һәм был донъя һәр саҡ беҙҙең принциптарыбыҙҙы юҡҡа сығарырға тырыша. Йыл һайын йәмғиәт һәм техник прогресс алдыбыҙға яңы, хәл итеүе ауыр булған сәйәси, философик һәм интеллектуаль дилемма ҡуя. Быға яуап итеп сәйәсмәндәр, киң мәғлүмәт саралары һәм йәмғиәт нигеҙҙә компромисс тураһында һөйләй. Улар һеҙҙе, бөгөн донъяла йәшәү шул тиклем ауыр, бер ниндәй ҡиммәттәр ҙә, принциптар ҙа ярҙам итмәй, тип ышандырырға тырыша.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**

✓ *Бала бөләкәй саҡтан юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен үтәп өйрәнһен. Юлда булған бөтөн бәхетһеҙлектәрҙе алдан иҫкәртеп булмай, тип уйлағандар ныҡ хаталана.*



*АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА*

# БАЛАҢ ЮЛДА ЙӨРӨЙ БЕЛӘМЕ?



**Йәйге каникулдар тамамланып та бара. Лагерҙарҙа, ауылда ял иткән балалар тыуған ҡалаларына ҡайта, шуға ла Өфө ҡала округы хакимиәте юлда үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен тағы бер ҡат иҫегеҙгә төшөрә.**

Бала менән бергәләп урамға сығып, юлды дөрөҫ сығыу ҡағиҙәләрен ҡабатлағыҙ. Бала был ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ аңлаймы, юлда уларҙы урынлы ҡулланамы икәнен асыҡлағыҙ. Өйҙән - мәктәпкә, мәктәптән өйгә тиклемге маршрутты ҡабат йөрөп сығығыҙ. Юлда осраған хәүефле урындарға иғтибар итегеҙ. Балаларҙы үҙҙәрен генә урамда ҡалдырмағыҙ, машиналар йөрөгән урында уйнарға рөхсәт итмәгеҙ.

Бала бөләкәй саҡтан юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен үтәп өйрәнһен. Юлда булған бөтөн бәхетһеҙлектәрҙе алдан иҫкәртеп булмай, тип уйлағандар ныҡ хаталана. Юлда зыян күргән балаларҙың 95 проценты бер үк тиерлек ситуацияларҙа машина аҫтында ҡала. Алдан был турала бала менән һөйләшкәндә, был хәлде булдырмау ихтималлығы күпкә арта. Түбәндә килтерелгән миҫалдарҙа хәүефле мәлдәр асыҡ күренә. Улар баланың айырыуса иғтибарлы булыуын талап итә.

Төп хәүеф - туҡтап ултырған машина. Уның ҙур тиҙлектә килгән икенсе автомобилдәрҙе ышыҡлап ултырыуы бар. Юл ситендә туҡтап ултырған машина эргәһендә юлда аша сығырға ярамай.

Туҡтап торған автобус - тағы бер "ҡапҡан". Ул шулай уҡ юлды ышыҡлай. Автобусты урап үтәм тигән мәлдә юлдан автомобиль үтеп китеүе ихтимал. Туҡталышҡа яҡын урынлашҡан йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләнгән махсус урынды эҙләгеҙ.

Йәшерен хәүефте алдан күрә белегеҙ! Туҡтап ултырған машина, йорт, ҡыуаҡ артынан ҡапыл машина килеп сығыуы ла бар. Аша сығыу өсөн юл ике яҡтан да асыҡ күренгән урынды һайлағыҙ.

Машина яй тиҙлектә килһә лә, уны үткәреп ебәрегеҙ. Яй тиҙлектәге автомобиль артынан ҙур тиҙлектә хәрәкәт итеүсе икенсе машина килеүе ихтимал.

Сфетофорҙа ла хәүеф бар. Ҡала урамында светофор эргәһендә лә юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙған водителдәр осрай. Ҙур тиҙлектә килгән автомобиль светофорҙың утында туҡтамауы ла бар. Шуға ла балаға юлды йәшел утҡа ғына ҡарап сығырға өйрәтмәгеҙ, ул хәүеф юҡлығына тулыһынса ышанырға тейеш.

Машиналар һирәк йөрөгән урамдарҙа балалар машиналар бармы, юҡмы икәненә иғтибар итеп тә тормайынса, юлды йүгереп үтеүсән. Һәр ваҡытта ла сығыр алдынан туҡтап, юлды ҡарарға өйрәнһен бала.

Үҙәк линияла торғанда иҫегеҙҙә тотоғоҙ: артта ла машиналар бар. Юлдың уртаһына етеп, туҡтағас, бала уң яҡта хәрәкәт иткән машиналарҙы ғына күҙәтә һәм артында ла машиналар йөрөгәнен онота. Ҡурҡып, бер аҙым ғына артҡа атлау етә һәм бала машина тәгәрмәстәре аҫтына эләгәсәк. Әгәр ҙә юлды сығып өлгөрмәйенсә йәки башҡа берәй сәбәп менән юлдың ҡап уртаһында тороп ҡалырға тура килә икән, иғтибарлы булырға, артыҡ хәрәкәт яһамаҫҡа кәрәк.

Урамда баланы етәкләгеҙ. Эргәһендә өлкән кеше булғанда бала юлға иғтибар ҙа итмәй. Өлкән кеше быны иҫәпкә алмай. Урамда бала төрлө нәмәгә әүрәй, хәрәкәт иткән машинаны күрмәйенсә, ҡулын тартып алып, йүгереп китеүе лә бар. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ! Бала юл ҡағиҙәләренә ата-әсәһенә, башҡа өлкән кешеләргә ҡарап өйрәнә. Шуға ла юлда тәртипле булығыҙ, һеҙ башҡа балаларға ла өлгө күрһәтәһегеҙ.

*КАНДИДАТ В ДЕПУТАТЫ*



**Кандидат в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан третьего созыва**

**по одномандатному округу №2 (Инорс, Калининский район).**

## ВАСИЛЬЕВ ЮРИЙ НИКОЛАЕВИЧ

# ПРЕВРАТИМ ИНОРС В ЦВЕТУЩИЙ ОАЗИС УФЫ

### ОБРАЩЕНИЕ К ИЗБИРАТЕЛЯМ - ЖИТЕЛЯМ ИНОРСА

В 2013 г. участвовал в выборах в депутаты Государственного Собрания - Курултая Республики Башкортостан пятого созыва, в которых занял второе место по одномандатному Солнечному избирательному округу № 9.

В 2014 г. как кандидат, принимал участие в выборах в Совет ГО г. Уфа Республики Башкортостан третьего созыва по одномандатному избирательному округу № 4 и занял второе место.

Мною были проведены активные избирательные кампании: проводились встречи с избирателями, обсуждались насущные проблемы и волнующие каждого избирателя вопросы, вся полученная информация собрана и обобщена и была готова для формирования первоочередных действий в роли депутата.

Но в связи с многочисленными нарушениями по проведённым выборам, и их результатам, я как кандидат и гражданин не согласился, и обратился в суд для того, чтобы добиться справедливости не только для себя, но и для граждан, которые за меня голосовали.

Я искренне хочу помочь изменить ситуацию, которая складывалась и развивалась годами, хочу помогать гражданам в решении многочисленных проблем! Для этого у меня есть огромный опыт в управлении предприятиями, а это, несомненно, поможет мне более эффективно принимать решения как депутату.

Поэтому принял решение и в этом году баллотироваться кандидатом в депутаты Совета городского округа г. Уфа. Призываю Вас прийти и проголосовать за меня! Вместе мы победим!

### МОЯ БИОГРАФИЯ

Родился в 1973 г в семье рабочих в г. Уфа.

В 1988 г. окончил среднюю школу №74 в микрорайоне "Инорс", Калининского района г. Уфы, проживал по ул. Транспортная 46/1.

Во время учебы в школе работал на "УМПО" разнорабочим, совмещая учебу и работу.

В 1991 г. окончил среднее ПТУ №64 г. Уфа по профессии "Наладчик деревообрабатывающего оборудования".



*Вот у того "водопада" мы в детстве рыбачили.*

С 1991 по 1993 год работал на Уфимском фанерно-плитном комбинате слесарем-ремонтником 4 разряда.

В 1996 г. окончил Уфимский нефтяной техникум по специальности "Техник-технолог". В 1995 г обучался в учебном центре по специальности "Охранник".

В 2012 году окончил Уфимский юридический институт МВД РФ по специальности "Юриспруденция".

С 1994 по 1995 год работал в частном предприятии на должности сотрудника охраны.

С 1995 по 1996 год работал в Специализированном Охранном Предприятии на должности заместителя директора.



*Родная, семьдесят четвертая.*

С 1996 по настоящее время - руководитель Группы Охранных Агентств "Волкодав".

Являюсь соучредителем Фонда "Социальной защиты охранников и содействия органам правопорядка".

Член Координационного совета по взаимодействию с частными охранными организациями и частными детективами при МВД по Республике Башкортостан.

Председатель Комиссии по организации взаимодействия частных охранных организаций с правоохранительными органами в борьбе с преступностью.

С 2010 года - лауреат проекта "Кадровый резерв - профессиональная команда страны".

Независимое объединение по защите прав потребителей региональной общественной организации Республики Башкортостан. Общественный инспектор.

Член партии "Справедливая Россия".

**Награды**

- Ведомственная: медаль "90 лет МВД по Республике Башкортостан" - за личный вклад в развитие частной охранной и сыскной деятельности, 2012 год.
- Общественная награда: медаль "20 лет частной охране и сыску" - за личный вклад в развитие частной охранной и сыскной деятельности, 2012 год.
- Нагрудный знак "За выслугу лет", "15 лет в частной охране", 2012 год.
- Орден "За профессиональную честь, достоинство и почетную деловую репутацию" 3 степени, 2005 год.
- Орден признания: за инновации в области безопасности, 2006 год.
- Юбилейная медаль "За безупречный труд" в честь 15-летия Закона РФ "О частной детективной и охранной деятельности в Российской Федерации", 2008 год.
- Награжден почетными грамотами и благодарственными письмами Правительства Республики Башкортостан, МВД по РБ, ЦЛРР МВД по РБ, ФСКН по РБ.

Награждён дипломом "За вклад в организацию и проведение мероприятий Эстафеты Параолимпийского огня "Сочи 2014" продвижение Параолимпийских ценностей и популяризацию здорового образа жизни" Президентом АНО "Оргкомитет "Сочи 2014"

Семейное положение. Женат, трое детей: дочь и два сына.

## МОЯ ПРОГРАММА - ЭТО ВАШИ НАКАЗЫ, ПРОГРАММА ДЕЙСТВИЙ

### Общегородская деятельность

ВЗНОСЫ В ФОНД КАПИТАЛЬНОГО РЕМОНТА - ДЕНЬГИ НА ВЕТЕР

Ситуация вокруг Фонда капитального ремонта заставила меня глубже изучить правовые аспекты этой проблемы. Оказывается, коммунальщики только собирают деньги в Фонд, но никакой ответственности не несут и дома не ремонтируют. Более того, авансовые взносы за не предоставленные услуги незаконны. Необходимо выяснить, куда делись те денежные средства граждан, которые отчислялись на капремонт ранее, провести ревизию, так как многое изменилось юридически, а многие управляющие компании уже обанкротились. Многие дома отремонтированы за счёт средств текущего ремонта, и поддерживаются в надлежащем состоянии постоянно, и не требуют капитального ремонта, а многие дома в плачевном состоянии, которые достались по наследству от советских времён. Надо добиться отмены незаконного взимания денег с жильцов.

РЕМОНТ КРОВЛИ И МЕЖПАНЕЛЬНЫХ ШВОВ

Ни один жилец в отдельности оплатить ремонт кровли и межпанельных швов не сможет. Речь может вестись только о финансировании из бюджета! И делать это надо немедленно. Потому что через несколько лет у нас будут не дома, а решето.

СНИЖЕНИЕ ПЛАТЫ ЗА УСЛУГИ ЖКХ

В случае, если собственники помещений не приняли решение о способе управления многоквартирным домом, размер платы за капитальный ремонт устанавливается органами местного самоуправления в соответствии с пунктом 34 Правил содержания общего имущества в многоквартирном доме, утвержденных постановлением Правительства РФ от 13.08.2006 №491, по результатам открытого конкурса, проводимого в порядке, установленном Правилами проведения органом местного самоуправления открытого конкурса по отбору управляющей организации для управления многоквартирным домом, утвержденным постановлением Правительства РФ от 06.02.2006 №75. Нигде данного конкурса не проводили, а лицензирование управляющих компаний сделало невозможным работать на этом рынке желающим, тем самым создались подконтрольные монополии.

Люди переплачивают за услуги ЖКХ. Установка приборов учета горячей и холодной воды на дома даст экономию до 50%. Необходимо переходить на электронную передачу данных, такие возможности существуют. Те средства, которыми муниципалитет ежегодно дотирует коммунальные службы, надо один раз направить на установку счетчиков. А не оплачивать бесхозяйственность и вороватость "коммунальных баронов".

ПОДНЯТЬ КАЧЕСТВО УСЛУГ ЖКХ

Качество услуг ЖКХ не соответствует взимаемой плате. В некоторых микрорайонах жильцы нескольких домов поменяли обслуживающую коммунальную организацию. Плата за услуги осталась такой же, а качество резко улучшилось. Какие еще доказательства нужны? Хватит кормить "коммунальных баронов", которые даже своим рабочим платят самый минимум. Необходимо ввести электронную систему документооборота по ЖКХ, отказавшись от ненужных услуг ЕРКЦ и снизив расходы.

АВАРИЯ В ИНОРСЕ НЕ ДОЛЖНА ПОВТОРИТЬСЯ

Серьёзная авария на теплотрассе в Инорсе произошла по причине изношенности трубы - конструкция попросту проржавела и прохудилась. Тогда без тепла остались много жилых домов, поликлиника, детские сады, школа, институт. А ведь этой аварии можно было бы избежать, если бы обслуживающая организация позаботилась о ремонте теплотрассы заранее. Но как говорится в известной поговорке, на ошибках учатся. А надо все делать заранее!

ПЕНСИОНЕРАМ - БЕСПЛАТНЫЙ ПРОЕЗД

Из бюджета выделять средства для категории граждан, которым необходима финансовая помощь для поездки не только в муниципальном транспорте, но и в коммерческом. Неужели наши отцы и деды не заслужили права хотя бы на общественном транспорте ездить бесплатно, в том числе на пароме?

### Деятельность депутата по решению проблем жителей Инорса

ТРАНСПОРТНАЯ ПРОБЛЕМА

Ситуация с выездом из микрорайона Инорс в утренние часы и с въездом вечером так и не улучшается с каждым годом. Сейчас маршрутки из центра в часы пик ползут по несколько часов. Жители неоднократно поднимали этот вопрос. Имеются в виду оба выезда из Инорса: в сторону мкр. Сипайлово и ст. им. Гастелло.

Требует решения и вопрос скопления автобусов, троллейбусов и маршруток на конечной остановке в Инорсе.

ДОРОГИ - ВЕЧНАЯ БЕДА

В последнее время часть дорог в Инорсе были точечно отремонтированы. Но остальные ждут своего часа. Нынешнее состояние дорог - главная причина высокой аварийности, в результате чего ежегодно гибнут десятки жителей Инорса микрорайона, в том числе дети. Особое внимание надо уделить прокладыванию дорог в новые кварталы. Став депутатом горсовета, в первую очередь займусь решением этих вопросов.

ОРГАНИЗАЦИЯ ДОСУГА

В настоящее время в Инорсе нет ни одного развлекательного комплекса, ТРЦ. Их надо строить. Кроме того, здесь просто необходимо проводить различные мероприятия. Люди их очень хорошо воспринимают.

В прошлом году в Инорсе впервые состоялся "День соседа". Он прошел на "ура!" Бывают здесь и праздники дворов, и самодеятельные концерты. Но их до обидного мало. Возможность превратить для инорсовцев каждые выходные в праздники со встречами с интересными людьми, играми, соревнованиями, есть. Всем этим нужно заниматься и организовывать - это реально!

БЛАГОУСТРОЙСТВО

Во время частых приездов в Инорс постоянно общаюсь с его жителями. Они сокрушаются по поводу недостаточности элементарных скамеек, современных спортплощадок, дорожек, парковых зон, замусоренность территории и плачевное состоянии береговой линии реки и озера, образующих границу микрорайона. Все вопросы благоустройства решаемы. И набережную, и прилегающую территорию не так уж и сложно привести в надлежащий вид. Надо наконец-то очистить пруд имени Гастелло. Привести его в надлежащий вид обещали еще при советской власти. Надо лишь этим заниматься.

Жители Инорса давно хотели парк, пора приблизить желаемое к реальности и вместе ответить на вопросы: "где будет наш парк?", "что в нем будет: какие мероприятия, развлечения, зоны отдыха?", "кто будет хозяином парка?", "кто будет следить за порядком, поддерживать чистоту народного парка?".

ВЕРНУТЬ ДЕТСКИЕ САДЫ - ДЕТЯМ!

В Инорсе острая нехватка мест в детских садах. Мамы вынуждены ставить ребятишек в очередь сразу же после рождения. И то большинство попадает в детский сад годикам к четырем-пяти, когда уже пора думать о школе. А ведь некоторые детские сады используются откровенно не по назначению. В одном разместилась гостиница УМПО, в другом - районный суд. Это только два самых ярких примера. Неужели для этих и других организаций не нашлось во всей Уфе других помещений? Сейчас здесь строится детский сад "Инорс-7" на 155 мест. А в очередях стоит до трех тысяч ребятишек. А все потому, что нет четкого планирования в "детсадовской" политике. В этом вопросе надо ввести планирование, строя детские сады, исходя из потенциальной потребности.

МЕЖДУ ИНОРСОМ И СИПАЙЛОВО НУЖЕН МОСТ

На ДОКе люди несколько десятилетий мучаются из-за отсутствия моста, который бы соединил Инорс с Сипайлово и центром Уфы. Чтобы попасть туда, а также на полуостров Лихачевский, к своим дачам, они по старинке пользуются переправой. Это и дополнительные затраты, и потраченное время, и, главное, риск, связанный с паромной переправой. Необходимо срочно построить мост, возведение которого было намечено еще в советское время. Кардинально транспортную логистику Инорса не решить без этого моста. А на полуострове Лихачевский необходимо создать парковую зону отдыха для жителей города, прежде всего Инорса.

ИЗБАВИТЬСЯ ОТ ОЧЕРЕДЕЙ

Многие жители Инорса сталкиваются с проблемами в паспортном столе, я и сам столкнулся с ней не так давно. Чтобы прописаться или выписаться, надо потратить несколько дней. Там очень большие очереди. Думаю, решить эту проблему поможет передача функций паспортного стола в МФЦ.

ЭКОЛОГИЯ

Инорс, расположенный в ложбинах, страдает от повышенной загазованности. Здесь постоянное превышение в 10 - 20 ПДК по токсикантам в штилевую погоду. Наша нефтехимия и нефтепереработка портит экологию. Необходимо добиться от предприятий соблюдения всех законных требований и санитарных правил.

## КАК Я БУДУ ДЕЙСТВОВАТЬ, СТАВ ДЕПУТАТОМ УФИМСКОГО ГОРОДСКОГО СОВЕТА

**ГЛАВНОЕ:**

Моя работа депутата городского совета будет построена на оперативном реагировании на просьбы жителей Инорса!

**Чем я займусь СЕГОДНЯ:**

- Созданием в районе органа Народного Контроля. Представители общественности, активные инорсовцы должны сами контролировать соблюдение законности предпринимателями, торговцами. Прежде всего, следует прекратить продажу спиртного на автобусных остановках (как это делается сейчас) и непосредственной близости от школ, детских садов. Проведение проверок на рынке, где часто продают некачественный товар.
- Борьбой с коррупцией при государственных и муниципальных закупках и в сфере ЖКХ:
- Проведением постоянных публичных слушаний жителей Инорса перед принятием значимых решений чиновниками города и Калининского района Уфы;
- Внедрением новых средств общения избиратель-депутат (социальные сети, создания сайта "Наш Инорс") получением фотографий и описанием проблем для оперативного решения со стороны администрации.

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан третьего созыва Васильеву Юрию Николаевичу согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006 г. N 380-з "О выборах".

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

## АҒАС ӨЙГӘ НИ КӘРӘК?

**Әле синтетика материалдары быуатында йәшәйбеҙ. Әммә ағас йорт йәки дача кеүек үҙебеҙҙең бәләкәй генә экологик таҙа мөйөшөбөҙҙө булдырырға ҡарар иткәнбеҙ икән, тәү сиратта, уны уттан һаҡлау тураһында ла хәстәрлек күрергә кәрәк. Янғындарҙың өстән бер өлөшө электр ҡорамалдарын ҡуйғанда йәки уларҙы ҡулланғанда ябай ғына хәүефһеҙлек сараларын үтәмәүҙән килеп сыға.**

Ағас өйҙәрҙәге стенаға керамик изоляторҙар ярҙамында ҡағылған ҡалын электр сымдары заманы күптән тарихта ҡалды. Заманса сымдар махсус техник параметрҙарға тура килергә, шул уҡ ваҡытта профилактика, ремонт һәм башҡа эштәр башҡарғанда ҡамасауылыҡ итмәскә лә тейеш. Кешеләр һәләк булған һәм милек зыян күргән ағас өйҙәрҙәге янғындар тураһындағы мәғлүмәттәрҙә ут сығыуҙың сәбәбе булып ҡыҫҡа замыкание тороуы билдәләнә. Ҡыҫҡа замыкание нилектән барлыҡҡа килә һуң? Тәү сиратта, изоляцияның ныҡлы булмауынан. Ул сымдың тышҡы механик зыян күреүҙән, артыҡ көсөргәнеш булғанда, саманан тыш йылыныуынан, кеше факторының башҡа эшмәкәрлегенә бәйле булыуы мөмкин. Ҡыҫҡа замыкание ваҡытында сымдар һәм изоляцияның бер өлөшө ялҡынлана. Әгәр юғары температура зонаһына өйҙөң ағас йәки пластмасса конструкциялары тура килһә, был осраҡта янғындан ҡасып ҡотолоу икеле.

Ағас өйҙә нисек итеп эске сымдарҙы хәүефһеҙ итеп үткәрергә? Төп шарттарҙың береһе - янмаҫлыҡ изоляция менән ҡапланғандары. Ағас өйҙәрҙә сымдарҙы күренмәслек итеп үткәреүҙең төрлө ысулдары бар, әммә шуларҙың бер нисәһе генә дөрөҫ тип һанала. Беренсе ҡағиҙә - янғын хәүефһеҙлеге талаптарына тулыһынса яуап биреү. Бында эстетик һәм дизайнер ҡуҙаллауҙары икенсе планға сығырға тейеш. Был эштәрҙе башҡарыу хаҡына ла бәйле. Электр сымдарын сифатлы итеп үткәреүгә киткән сығымдар барыбер ҙә янғындан күргән зыянға ҡарағанда осһоҙораҡ буласаҡ.

## БЕНЗОЛ ҠУРҠЫНЫС!

**Водителдәрҙең күбеһе машина көн дауамында тәҙрәләре ябыҡ хәлдә ҡояшта урында торғанда уның салонында 400-800 мг бензол тупланыуы тураһында мәғлүмәтлеләр, моғайын.**

Автомобилдә 16 градустан да юғары температурала ҡояшлы урында ҡалдырып киткән осраҡта бензолдың кимәле 2000-4000 мг тиклем барып етеүе мөмкин, был рөхсәт ителгән кимәлдән 40 тапҡырға юғары. Тимәк, тәҙрәһе ябыҡ торған автомобилдә еллätмәйсә инеп ултырған кешеләр бөйөр, бауыр һәм һөйәктәргә зыян килтергән зарарлы матдә менән тын ала. Организмдан бензолды сығарыуы ауыр икәне билдәле.

Автомобилдәрҙе файҙаланыу тураһындағы ҡулланмала кондиционерҙы эшләтерҙән алда машинаның тәҙрәләрен асып, ике минут елләтеп алыу зарурлығы тураһында әйтелә, әммә, ғәҙәттә, был транспорттың эше яҡшырыуына килтерә, тип кенә яҙыла. Бәктиһән, кондиционер һауаны һыуыта башлар алдынан пластиктағы эҫе һауаны салонға бөркөп сығара икән. Машина эсендә ултырғанда пластик еҫен тиҙ генә абайламаҫҡа ла мөмкин. Салондағы эҫе һауала бензолдың кимәле айырыуса юғары була, уны даими рәүештә һулаған кеше яман шеш ауырыуына дусар булыуы ла ихтимал. Бынан тыш, бензин составында булған бәйләнмәгән углеводородтар һәм башҡа төрлө ҡушылмалар канцероген матдә булып тора. Шуға күрә кондиционерҙы ҡабыҙыр алдынан автомобилдең тәҙрәләрен асып, бер аҙ елләтеп алыу мотлаҡ.

✔ Ҡымыҙ, буҙа һоҫоу өсөн ҡулланыла торған семәрле ағас сүмес - ижауҙы оҫталар айырыуса тырышып эшләгән. Ҡулсалы ижауҙар бигерәк матур була. Улар хеҙмәт кешеһенең ижади хыялының бер сағылышы ул.



АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

# ДОНЪЯ ДИЛБЕГӘҺЕН...

## аҡһаҡалдарға тапшырырға әҙерҙәр



Рәйлә Хафизова бейей.

(Башы 12-се биттә).

Ирҙәрҙе ҡәҙерләйек, улар эсә тип, тағы ниндәйҙер етешһеҙлектәрен табып, ирҙәребеҙҙе өйҙән сығарып ебәреп, балаларҙы яңғыҙ тәрбиәләп ултырып ҡалмайыҡ. Итәгенә йәбешеп булһа ла изгелеккә һөйрәйек уларҙы, яҡшы ниәттә эшләнгән эшкә Хоҙай үҙ ярҙамын һәр ваҡыт бирә, - тип, Вәсилә апай йәш ҡатын-ҡыҙҙарға үҙ кәңәштәрен еткерҙе.

Йылы һүҙ - йән аҙығы, тиҙәр. Ағинәйҙәрҙең сығыштарын ситтәнерәк тыңлап тороусы ир-егеттәр үҙҙәре тураһындағы йылы һүҙҙе ишетеп, йәнләнеп китте. Бер-бер артлы үҙ фекерҙәрен белдереп, бергәләп хәл итәлергә тейешле ҡайһы бер етешһеҙлектәрҙе барланы. Рысҡужа ауылы старостаһы Вәкил Баҡыев, мәҫәлән, эскелек тураһындағы мәсьәләгә бер яҡлы ғына ҡарамаҫҡа, был афәттең таралыуында ҡатын-ҡыҙҙарҙың да ғәйебен танырға саҡырҙы. "Ҡатын-ҡыҙҙар яңы күлдәк алып кейеү кеүек бәләкәй шатлығын да, бала табыу һымаҡ оло ҡыуанысын да әхирәттәре менән "йыуырға" күнегеп китте, - тине Вәкил Әнәс улы. - Байрамдарҙа, ғаилә менән бергә йыйылғанда, һуғым аштарына йөрөгәндә өҫтәлгә хәрәм ризыҡ ҡуйыуҙан тыйылмайынса, хатабыҙҙы танымайынса тороп, был афәттән ҡотолоп булмаясаҡ. Һеҙҙең был изге ниәттәр менән башланған эшегеҙҙә уңыштар теләйем, уртаҡ проблемаларҙы уртаға һалып хәл итеп, бергәләп эшләргә насип итһен".

Әбйәлил районының Әүнәш ауылынан Рәсүл Даутов, Ҡаҙмаштан Миҙхәт Рәжәпов, Ишбирҙенән Зөлфәр Дәүләтшин, Ҡужандан Азат Фәтхуллиндар ҙа үҙ сығыштарында бындай мәсьәләләр буйынса ағинәйҙәр менән бер төптән эш итеүҙең мөһимлегенә баҫым яһаны. Ир-егеттәрҙе "Аҡһаҡалдар ҡоро"на ойошторорға хыялланған ҡатын-ҡыҙҙар уларҙың ағинәйҙәр бурыс итеп алған эштәрҙән, маҡсаттарҙан ситтә ятып ҡалырға теләмәүен, битараф булмауҙарын күреп шатланды. Донъя дилбәгәһен ҡатын-ҡыҙҙар тартып алды, тип түгел, ә дилбегәне дөрөҫ йүнәлешкә борорға маташалар, тимәк, уларға ярҙам итергә кәрәк, тигән аңлау тип ҡабул ителде уларҙың сығыштары.

Әйткәндәй, ағинәйҙәр "Ғимран ташы" эргәһендәге ҡорҙан һуң юл ыңғайында Ҡужан ауылы эргәһендәге урманда үҫкән, халыҡ телендә "бөҙрә" йә "өлпәк" тип йөрөтөлгән ҡарағастар янына ла һуғылды. Был уникаль ағастар бары тик Японияла һәм Австралияла ғына үҫә икән. Улар Әбйәлил районы территорияһына ниндәй хикмәт, ниндәй юлдар менән килтереп ултыртылғандыр, уны Хоҙай үҙе генә белә. Шуға ла эшҡыуар Клара Абдуллинаның был территорияны кәртәләп алып, ҡарағастарҙы ҡурсыуы, килгән-киткән кешеләрҙе тәбиғәт мөғжизәләре менән таныштырыуҙы үҙ өҫтөнә алыуы маҡтауға ғына лайыҡ. Клара апай әйтеүенсә, был ағастарҙың "инәһе" һәм "атаһы" бар, улар һәр яҙ һайын башҡа ағастарҙы һеркәләндереп, береһе һыу ағыҙып, икенсеһе сайыр тамыҙып тора һәм был ағастарҙың йәшәйешен тәьмин итә, имеш. Эйе, тәбиғәттә һәр нәмәнең үҙ гармонияһы бар. Шунын кеүек, һәр милләттең үҙенең рухи донъяһы, боҙолмаҫ ҡанундары, үҙенә генә хас уникаль йәшәү рәүеше була. Әбйәлил районында үткән "Ағинәйҙәр ҡоро"нан тап ошо иң мөһим фекергә килеп, үҙ асылыбыҙға тоғро ҡалыу юҫығында әүҙем эш башлаған ағинәйҙәребеҙ йәнәшәһенә аҡһаҡалдарыбыҙҙың да баҫырға ынтылышын күреп ҡайттыҡ. Афарин һәммәһенә!

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ХАЗИНАЛАРЫБЫҘ

# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА





**Халҡыбыҙҙа ағастан һауыт-һаба яһау кәсебе, башҡа һөнәрҙәр кеүек үк, быуындан-быуынға күсә килгән. Бындай әйбер ҡупшы ла, ныҡ та, ҡулайлы ла һәм, хәҙергесә әйткәндә, экологик яҡтан таҙа ла булған. Унан һуң, Башҡортостандың тәбиғәт шарттары ла һауыт-һаба етештереү кәсебе өсөн уңайлы ерлек икәнен беләбеҙ. Ағастарҙың күп төрлө булыуы был кәсепте кәрәкле сеймал менән тәьмин иткән.**

Һауыт-һаба етештереү ҡорамалдары сапҡы, йышҡы, аталғы тип атала. Ағас эшкәртеүсе башҡорт һөнәрселәре, айырыуса ағас семәрләү оҫталары, формаһы, тәғәйенләше яғынан бик уңайлы һауыт-һаба етештергән.

Көбө, батмандар йүкә түмәренең эсен соҡоп алып, һуңынан уға төп һуғып эшләнгән. Тәпән - бал, май кеүек ризыҡтар һалыу өсөн йыуан ағастың эсе соҡоп яһалған. Шыйыҡлыҡтар ҡойоу өсөн яһалған көрәгәне лә ҡайһы яҡтарҙа тәпән тиҙәр. Уның семәрле ҡапҡасы ла булған. Шуға ла "Көрәгәһе йәмле, ҡымыҙы тәмле, нисәү икән һауған бейәһе" тиелә инде халыҡ йырында.

Ҡоршауһыҙ бейек һауыт - көбө йүкә ағасының үҙәген соҡоп яһала. Ҡымыҙ көбөһө, бешкәкле көбө булған. Көбөсәк тип бәләкәй көбөнө әйткәндәр. Айран көбөсәге, ҡапҡаслы көбөсәк тә эшләгәндәр. Киле - онтау, йомшартыу өсөн төрлө нәмә төйә торған сөм һауыт. Унда ярма, етен төйгәндәр. Батман, киле, тәгәс, туҫтаҡ, алдыр, сүгәтә, сара һәм башҡа һауыт-һабаларҙың тәғәйенләнешен, атамаларын өйрәнеү, белеү бөгөн дә оло әһәмиәткә эйә.

Ҡымыҙ, буҙа һоҫоу өсөн ҡулланыла торған семәрле ағас сүмес - ижауҙы оҫталар айырыуса тырышып эшләгән. Ҡулсалы ижауҙар бигерәк матур була. Улар хеҙмәт кешеһенең ижади хыялының бер сағылышы ул. Һелкәүес йәки һелкеүес - он иләй торған киң ағас һауыт. Төйгән ярманы һелкеп, кәбәген айыра торған йәйпәк ялғаш ул.

Ағастан яһалған һауыт-һаба халҡыбыҙҙың ижадҡа бай күңелен, быуаттар буйы был юҫыҡта тупланған тәжрибәһен, оҫталығын сағылдыра һәм шуның менән дә ҡәҙерле.

**Миңзәлә ФӘСИМОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЭШҺЕҘ КЕШЕ...

## башһыҙ ҡаҙау

Халҡы ямандың бейе аҙыр, ҡатыны ямандың өйө аҙыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер үк көндә, бер үк сәғәттә тыуған игеҙәк егеттәр йәшәгән. Бер-береһенә ике тамсы һыуҙай оҡшаш игеҙәктәрҙе кешеләр бер-береһе менән бутай торған булған. Игеҙәктәрҙең беренсеһенә был оҡшамаған, ул һәр саҡ үҙенең икенсе һыңарынан айырылып торорға хыялланған. Был хыялын нисек тормошҡа ашырырға белмәй, аҡыл эйәһенә мөрәжәғәт иткән. "Кешеләрҙе бер-береһенән теләк кенә айырып тора ала, - тигән аҡыл эйәһе. - Кеше үҙендә ниндәй теләк йәшәтә, теләге артынан ҡайҙа бара - шул ғына уны халыҡ араһында айырып күрһәтә ала. Теләктәреңде аныҡла һәм улар һине үҙең лайыҡлы булған рәүешкә индерер. Үҙеңдең эске донъяңа күҙ һал һәм унда үҙең теләгәнде табырһың..."**

**Беренсе игеҙәк үҙенең күңел төпкөлөндә оҙаҡ ҡаҙынып тормай һәм халыҡ төркөмөндә үҙен айырып күрһәтер теләкте тиҙ таба: алтынға һәм байлыҡҡа эйә булырға! Шулай итеп, дан көҫәүсе беренсе игеҙәк үҙ ғүмерен байлыҡ туплауға бағышлай. Ул кейенгән бар кейем, өй эсендәге бар әйбер, йыһаз тик алтындан ғына була, үҙе гел генә алтын битлек кейеп йөрөй.**

**Бына бер саҡ ул битлеген сисеп, көҙгөгә баға һәм... Ҡурҡыныс, шешенгән, йыйырсыҡлы, йәшәү төҫө ташлаған йөҙөн күреп, ҡото оса. Көҙгөнө тибеп осора. Ләкин башҡа көҙгөләрҙә лә шул уҡ йөҙҙө генә күрә. Асыуынан ярһыған ир баяғы аҡыл эйәһенә китә һәм: "Һин миңә насар кәңәш биргәнһең!" - тип ябырыла. Тегенеһе тыныс ҡына былай ти: "Һин күңел төпкөлөнә үк төшмәй, өҫтәрәк ятҡан теләкте, үҙеңә яҡынырағын үҙ иткәнһең. Һайлау бит һинең иркеңдә ине..." "Ләкин минең игеҙәк һыңарым минән йәшерәк һәм бәхетлерәк күренә бит! - тип сығырынан сыға ир. - Ә һин үҙеңдең ахмаҡ һүҙҙәрең менән мине зәғиф йәнгә әйләндерҙең, мине йәшлектән, бәхеттән мәхрүм иттең! Мин һине үлтерәм!" "Һәр кешенең йөрәгендә йәшәгән Юғары Аҡылды юҡҡа сығара алмаған кеүек, мине лә үлтереү мөмкин түгел. Сөнки мин кешеләр йөрәгендә йәшәгән намыҫ. Ә намыҫты үлтереүе бик ауыр", - тигән аҡыл эйәһе тыныс ҡына. Ләкин асыуынан буҙарынған беренсе игеҙәк аҡыл эйәһенең һүҙҙәрендәге төп мәғәнәне аңламаған. Үҙенең алтын йортонан тирә-яғындағы бәхетле, яҡты йөҙлө кешеләрҙе күҙәтеп ярһыған. Шул кешеләр араһында икенсе игеҙәктең дә булыуы, уның бәхеттән балҡыған йөҙө һәм үҙенең бер ҡорһаҡта ятҡан ағаһынан бик күпкә йәш күренеүе оторо ҡоторҡан...**

**...Алтын ғүмер буйы кеше йәненең батшаһы булған. Ул кешеләрҙе ҡолға әйләндергән, уларҙың йәшәү көсөн һурған. Донъяла кеше энергияһын һурған башҡа металл юҡ. Кеше алтын менән ялтырарға теләй, ә алтын кеше энергияһы менән ялтырай. Ерҙәге ике ҡомһоҙ - алтын һәм кеше - бер-береһенә торорлоҡ, теләктәре менән тигеҙҙәр, әлбиттә, ләкин шуныһы ҡурҡыныс: уларҙың һәр береһе бер-береһенән сағыуыраҡ балҡырға теләй..."**

1 582218 911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Азамат ӘБҮТАЛИПОВ, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**, **kiskeufa@mail.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 21 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 3825